ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-31 декабрь (аҡъюлай) 2021

№52.(990)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Бар мөғжизәләр - Бәхет ҡошо ла, Сәләмәтлек тигән ҡорос арғымаҡ та, Мөхәббәт тигән серле тойғо-хис тә, Уңыш гәли йәнәптәре лә, "Минең донъям" тигән күңел һиллеге лә, "Минең балаларым" тигән кинәнес тә, асмандарға аштырыр Хыял-ҡанат та, мул табындар ҙа, өҙөлөп көткән һәм көтөлмәгән шатлыҡлы осрашыуҙар ҙа - барыһы ла ҡаршы алып торһон һеҙҙе яңы 2022 йыл тупһаһында. Яңы йыл менән!*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Боронораҡ яңы йылды...**
март айында байрам иткәндәр



6-7

**Ил менән ил дуҫлығына...**
иң тәүҙә мәҙәниәт күпер һала



8-9

**Шамондың "һикһәненселәр"**
ауылында ҡунаҡта



10

**Барыҫ низәр вәғәҙәләй?**



12

**ТВ-программа** 14

ЯҢЫ ЙЫЛ МЕНӘН!

Сафуан ӘЛИБАЙ.

# БАРЫҪ ЙЫЛЫ КИЛӘ!

*Теҙелешеп килә йылдар,*
*Сыҡҡандармы ярышҡа?*
*Яңы йылым тәҙрә сиртә*
*Атланған да Барыҫҡа.*

*Ғәйрәттәре күсһен беҙгә -*
*Йүгәнләгән Барыҫты.*
*Барыҫы ла белһен, әйҙә,*
*Сасҡауҙарҙы, ҡар, ҡышты.*

*Барыҫ йылы - ҡырыҫ, тиҙәр,*
*Ҡырыҫ микән? Бар өндәш!*
*Барыҫ йылы барын сәс һин,*
*һис булмаһа, тарың сәс.*

*Тәғәм ризыҡ ҡалмағанда,*
*Тәмләтер ул тарыһын:*
*Тары тартҡан Барыҫ йылың*
*Ырыҫыңа тарытһын.*

*Барыҫ йылы - ҡырыҫ тиҙәр,*
*Үтһә, ул да йәл кеүек.*
*Ҡырыҫлыҡмы бәлә яһай,*
*Әллә күберәк һәлкәүлек?*

*Барыҫ йылы - ҡырыҫ, тиҙәр,*
*Ҡарамайыҡ ырымға;*
*Ваҡыт юлын кире бормаҫ,*
*Ҡарап көрткә, йырынға.*

*Ҡырыҫ булһа, булыр Барыҫ,*
*Бер һикерер яҙ, йәйгә;*
*Бәндәләргә ярар өсөн*
*Әйләнмәҫ тә... бесәйгә!*




ӘЙҘӘГЕҘ...

# БИТАРАФЛЫҠ БЕҘГӘ ЯТ БУЛҺЫН!

**Яңы йылды һәр кемебеҙ яңы өмөттәр һәм хыялдар менән ҡаршылай. Эштәрҙе теүәлләп, бурыстарҙан ҡотолоп, үтеп барған йылға йомғаҡтар яһап ҡуйырға ашығып сабабыҙ аҡъюлай аҙағында. Саҡ ҡына туҡтап тын алаһы ине лә, ғүмер юлыбыҙға күҙ һалаһы ине - бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәр менән күңел тураһында онотоп ташлайбыҙ, күп мөһим нәмәләргә битараф ҡалабыҙ. Йөрәгемдә йөрөткән һүҙҙәрҙе гәзит уҡыусыларына еткергем килә.**

**Тәү сиратта, тыуған еребеҙгә битараф булмайыҡ!** Уның бөгөнгөһөн ҡайғыртайыҡ, киләсәген күҙ уңынан ысҡындырмайыҡ. Тыуған ергә һөйөү һәр кемдә төрлөсә сағыла, бер кем дә, ниндәй генә ҡаты күңелле булмаһын, был һөйөүҙе инҡар итә алмай. Үҙ еребеҙҙең патриоттары булып ғүмер итәйек. Ул тойғо беҙҙең күңелдәрҙә теге йәки был байрам айҡанлы ғына ҡалҡып сыҡмаһын, ә йөрәк түребеҙҙә мәңге дөрләһен. Ә йөрәгендә тыуған иленә һөйөү йөрөтөүсе уның яҙмышына битараф була алмай.

**Телебеҙгә битараф булмайыҡ!** Кеше затына һөйләшеү, күңелендәге хис-тойғоларҙы тел ярҙамында еткереү, аралашыу кеүек оло хазина бүләк итеп бирелгән. Тел ярҙамында сабыйға тормоштоң асылы аңлатыла, файҙалы кәңәштәр бирелә, дөйөмләштереп әйткәндә, шәхес тәрбиәләнә. Мәҙәниәтле, аңлы кеше генә үҙ теленән ситһенмәй, ул телдә һөйләшергә оялмай, уның яҙмышына битараф булмай. Шуға күрә, әйҙәгеҙ, туған телебеҙҙе яратайыҡ, уны һаҡлайыҡ, уға ҡарата битараф булмайыҡ! Уға булған һөйөүебеҙ башҡорт телендә китаптар уҡыуға, милли гәзит-журналдар алдырыуға, концерт һәм спектаклдәргә йөрөүгә лә ҡайтып ҡалыуын онотмаһаҡ ине.

**Һаулыҡ - иң ҙур байлыҡ икәнен тажзәхмәт айырыуса ныҡ төшөндөрҙө.** Ул бер кемде лә аямай - уға кешенең статусы ла, йәше лә, енесе лә мөһим түгел, барыһын да бер кимәлгә ҡуйҙы. Үҙ һаулығын ҡайғыртҡан, үҙенең хәл-торошона иғтибарлы булған кеше, тимәк, киләсәген, яҡындарын уйлаусы. Сирләмәгән саҡта профилактик тикшереү уҙыу өсөн ун кешенең береһе генә дауаханаға бара, ә ҡалған туғыҙы ауырып аяҡтан йығылыр саҡта ғына табипҡа мөрәжәғәт итә. Был төптө хата, сөнки медицина ниндәй юғары кимәлгә еткән булһа ла, ниндәйҙер осраҡта ул да көсһөҙ. Үҙенең һаулығы өсөн һәр кем шәхсән үҙе яуаплы икәнлекте онотмайыҡ һәм һаулығыбыҙға битараф булмайыҡ.

**Яҡындарыбыҙға, балаларыбыҙға битараф булмайыҡ!** Ер йөҙөндә кеше иңенә төшкән иң ауыр нәмә - яңғыҙлыҡ, тигәндәр. Янында ата-әсәһе, туғандары, балалары булған кеше үҙенең ниндәй бәхетле икәнен ҡайһы саҡта онотоп та китә. Тормош ығы-зығыһына сумып, бөтмәҫ эш менән мауығып, яҡындарыбыҙға ҡарата битарафлыҡ күрһәтмәһәк ине. Машинаң боҙолдомо? Иҫең китмәһен, сөнки был ваҡытлыса ғына. Эштә етәксең ауыр һүҙ әйттемме? Борсолма, яңы көн тыуыр һәм барыһы ла артта ҡалыр. Сит илгә ял итергә бара алманыңмы? Бәлә түгел, әҙерәк тырышлыҡ һалһаң, әллә ҡайҙарға сәйәхәт ҡылырһың. Ошондай һәм башҡа ваҡ мәшәҡәттәрҙе яҡындарыбыҙҙан өҫтөн ҡуябыҙ ҡайһы саҡта, уларҙың күңелен ҡалдырырлыҡ һүҙҙәр әйтәбеҙ, вәғәҙәбеҙҙе онотабыҙ, битарафлыҡ күрһәтәбеҙ һәм башҡалар. Ә ысынында тормоштағы иң ҙур ҡиммәт - нәҡ яҡындарың менән бергә гөрләшеп йәшәү. Бергә булығыҙ, берҙәм булығыҙ!

**Фәнүзә АБДУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы Асҡар ауылы.**

12+

ӘЙҘӘГЕҘ...

# УҠЫЙЫҠ!

**Ҡағыҙ баҫманың баш мөхәррире булараҡ, гәзит уҡыусыларға ҡытлыҡ кисереүҙән генә түгел был "Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ!" тигән ораным. Аҡ ҡағыҙ битенән - гәзит-журналдар, китаптар уҡымауҙың ниндәй бәләгә, ниндәй наҙанлыҡҡа килтерә барғанын тойомлауҙан, йән әрнеүенән әйҙәләүем.**



...Телевизорҙан бер бәйге-тапшырыу ҡарайым. Опера һәм эстрада йырсыларынан торған ике команда ярыша. Алып барыусы уларға ябай ғына шундай һорау бирә: "Кисен йоҡларға ятыр алдынан эргәгеҙгә ни алаһығыҙ?" Бик оҙаҡ хитланғандан һуң шундай яуаптар алына: телефон, телевизор пульты, стакан һыу, күҙлек... Гәзит, журнал, китап тигәне юҡ...

Хәҙерге быуын уҡымай, тигәнде раҫлар миҫалдар күп инде. Әле яңыраҡ Өфөлә йәштәр менән Башҡорт теле көнөнә арнап "Йомро баш" уйыны ойошторҙолар. Алып барыусы Рөстәм Абдразаҡов ("Самауырлы ритайым" проекты авторы ла ул) ҡатнашыусыларға башҡорт халыҡ мәҡәлдәренең дауамын әйтергә, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева кеүек башҡорт әҙәбиәте классиктарының мәктәп программаһында ла булған әҫәрҙәренән өҙөктәрҙең авторҙарын атарға, башҡорт тарихындағы ҡайһы бер ваҡиғаларҙы, данлыҡлы башҡорт зыялылары исемдәрен иҫкә төшөрөргә ҡуша. Һорауҙар күп йәштәрҙә яуапһыҙ ҡалды. Һығымта бер: уҡымайҙар...

"Әйҙәгеҙ, уҡыйыҡ!" тигән әйҙәләүгә инандырыр дәлилдәр етерлек: "Мәғлүмәтле кеше донъя менән идара итә" тигән хәҡиҡәтте күҙҙә тотоп, бар өлкәлә - заман ағышында, сәйәсәттә, иҡтисадта, социаль һәм мәҙәни өлкәлә мәғлүмәтлелектә артта ҡалмаҫ өсөн; аҡыл һәм белем туплар, дөрөҫ һөйләшер, дөрөҫ уйлар, уңышҡа өлгәшер, тарихи тамырҙарыңды ныҡыраҡ белер, бөтөн һорауҙарыңа яуап табыу өсөн уҡырға кәрәк. Һәм тағы бер сәбәп: немец геронтология һәм гериатрия йәмғиәте ғалимдары йәшлекте, хәтерҙе һәм теүәл аҡылды һаҡлар өсөн көн дә... бер генә бит булһа ла китап йәки гәзит уҡырға кәрәк, ти. Йәғни, аҡ ҡағыҙҙан уҡығанда беҙҙең мейе лә, тойғолар сығанағы булған йөрәк тә күнекмәләр яһай булып сыға... Аҡ ҡағыҙҙан уҡыу аң һайығайыуын , наҙанлыҡты ла иҫкәртә, тимәк...

Заман ахырының билдәләренең береһе - белемдең юҡҡа сығыуы һәм наҙанлыҡтың өҫтөнлөк итеүе, тип яҙыла Ҡөрьән-Кәримдә. Бәлки, кемдәрҙәлер ошо дәлил дә уйландырыр?

Нисек кенә булмаһын, әле аҡ ҡағыҙ битендә, шулай уҡ "Киске Өфө"лә яҙылғандарҙы баһалаған, өҫтөн күргән уҡыусыларыбыҙ бар. Улар беҙҙең менән дуҫлыҡты 2022 йылда ла дауам итәсәк. Рәхмәт уларға! Үтеп барған йылда гәзитебеҙ биттәрен алтын фекере менән күтәрмәләгән, баҫмабыҙға матур йөкмәтке өҫтәгән, тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе менән уртаҡлашҡан авторҙарыбыҙға ла рәхмәт!

Яңы йыл менән!

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# КЕСЕЛЕКЛЕ БУЛАЙЫҠ!



Булған хәл тип аталған ошо бәләкәй генә мәҡәлә ныҡ тетрәндерҙе. Бер ҡатын ит комбинатында эшләгән. Бер көндө эш аҙағында тикшерергә уйлап, туңдырғыс камераға инһә, ҡапыл ишек ябыла ла, ул эстән бикләнеп ҡала. Ҡатын бар көсөнә ҡысҡырып, ишеккә шаҡып ярҙам итеүҙәрен һорай. Тик уны бер кем дә ишетмәй, сөнки эшселәрҙең күбеһе ҡайтып киткән була, өҫтәүенә, туңдырғыс эсенән бер тауыш та ишетелерлек түгел. Биш сәғәт тирәһе ваҡыт үткәс, иҫән ҡалыуға өмөт осҡоно һүнеп бөттө тигәндә ҡарауылсы ишекте асып ебәрә һәм ҡатынды үлемдән ҡотҡара. Һуңынан ҡатын хеҙмәттәшенән ни өсөн туңдырғыс камераны асырға уйлауын һорай. Сөнки тикшереү уның бурысына бөтөнләй инмәгән була. Ҡарауылсы шулай тип яуап бирә:

- Был заводта 35 йыл эшләйем. Көн һайын унда йөҙәрләгән кеше инә, сыға. Әммә һин көн һайын иртән эшкә килгәндә - иҫәнләшеп, ә кисен ҡайтҡанда һаубуллашып сығып киткән һирәк кешеләрҙең береһе. Күптәр мине күрмәмеш булып үтеп китә. Бөгөн иртән һин һәр ваҡыттағыса: "Сәләм!" - тип әйтеп инеп киттең. Әммә кисен: "Иртәгә күрешкәнгә тиклем хуш", - тигән һүҙҙәреңде ишетмәгәс, завод биләмәһен тикшерергә булдым. Мин һинең көн һайын әйткән "Сәләм", "Иртәгәгә тиклем" тигән һүҙҙәреңә шул тиклем өйрәнгәнмен. Улар минә кемгәләр кәрәккәнемде белгертеп, күнелемдә йылытып тора. Бөгөн хушлашыу һүҙеңде ишетмәгәс, һинең менән нимәләр булғанын аңланым. Бына шуның өсөн һине бөтә ерҙән эҙләп, һыуытҡысҡа барып сыҡтым, - тигән.

Уйландырырлыҡмы? Уйландырырлыҡ! Ысынлап та, беҙ йыш ҡына ишек төбөндә ултырған вахтер апайҙарға-ағайҙарға, ҡарауылсыларға, иҙән йыуыусыларға, урам һепереүселәргә иғтибар бирмәйбеҙ. Уларҙың көн һайын беҙҙе ҡаршы алыуына, беҙҙең килеүебеҙгә йыуып, йыйыштырып, һеперәп йәки ҡарҙы көрәп ҡуйыуына шул тиклем өйрәнгәнбеҙ. Шулай булырға тейеш кеүек кенә ҡабул итәбеҙ һәм беҙҙең йылы ҡарашыбыҙҙы тойғоһо килгән был һөнәр эйәләрен, иҫәнләшеү, өндәшеү, рәхмәт әйтеү түгел, хатта күрмәбеҙ ҙә. Әлбиттә, был бөтәбеҙгә лә ҡағылмай. Шулай ҙа арабыҙҙа шундайҙар бар. Ә беҙҙән күп тә кәрәк түгел, бер һирпелеп ҡарау, баш ҡағып ҡына иҫәнләшеү ҙә ҙур мәғәнәгә эйә улар өсөн...

Күптән түгел оҙаҡ йылдар ҡаланың дөйөм ятаҡтарының береһендә вахтер булып эшләгән апайҙы осраттайым. Ул йәш саҡында торлаҡ ремонтлау-эксплуатациялау участкаларының береһендә урам һеперҙе. Сүп ташыған йөк машинаһы кузовынан көнөнә утыҙлаған-ҡырҡлаған таҫҡыр ергә һикереүҙән эсе төшөп, медицина ҡурһәтмәһе буйынса ауыр эш ярамағас, уны йәш булһа ла вахтаға ултырттайылар. Байтаҡ йылдар биш ҡатлы ятаҡхана йәшәгәндәрҙе оҙатып, ҡаршы алып, аҫҡыстарын биреп ултырҙы. Төн йоҡламай, тәртип, таҙалыҡ һаҡлаһы, тиһәң дә була. Хәҙер күптән хаҡлы ялда инде ул.

- Бер аҙ аҡсаһы булыр, тип, яңыраҡ бер ойошмаға вахтер булып эшкә сыҡҡайным. Тик күпкә сыҙай алманым. Юҡ, эш ауырлығынан түгел. Заманалар үҙгәреше был өлкәгә лә ҡағылған икән. Вахтала ултырыу хәҙер бик еңел: бөтә ерҙә видеокамера тора, өҫтәлдә - пульт, телефон. Түҙемлегем етмәүҙең сәбәбе шунда: мине унда бер кем дә "тере" кеше итеп күрмәне. Заман менән бергә атлаған етди ойошма, хеҙмәткәрҙәре лә абруйлы, дәрәжәле кешеләр. Әммә етәксенән һәм бер урынбаҫарынан тыш, бер кем дә минең менән иҫәнләшмәй ине, әйтерһең дә, мин бөтөнләй унда юҡмын. Тәүҙәрәк уларҙың мине күрмәмеш булып үтеп китеүҙәренән ныҡ уңайһыҙланып, ишектән инеүсенән башлап үҙем һаулыҡ һораша торғайным. Башта тәүгә күргән кешегә ғәжәпләнгән һымаҡ ҡараһалар ҙа, сәләмемде алдылар, ә һуңынан ишетмәмешкә һалыша башлағас, был ғәҙәтемде ҡуйҙым.

Сыҡҡанда ла һаубуллашмайҙар, күҙле букәнгә ҡараған һымаҡ үтеп китәләр. Байрам көндәрендә лә бер йылы һүҙ ишетермен тимә. Егермеләгән хеҙмәткәр йә ҡулындағы телефонына текәлеп, йә һөйләшеп, береһенән-береһе уҙҙырып, ҡайҙалыр ашыға, йүгерә-атлай сығып китәләр.

Әйткәндәй, бындай мөнәсәбәт минә ҡарата ғына түгел ине, шикелле. Бәләкәй генә коллективтың, ғөмүмән, үҙ-ара ла йылылығы булмауы һиҙелә ине. Бер-береһенең хәле, һаулығы менән дә ҡыҙыҡһынманылар улар. Мин бит оҙаҡ йылдар ябай вахтер булып эшләһәм дә, һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә булдым. Кешеләрҙе лә беләм, уларҙың психологияһын да аңларға өйрәндем. Элек дөйөм ятаҡта эшләгәндә үҙемде унда иң кәрәкле, иң мөһим кеше итеп тоя торғайным. Олоһонан кесеһенә тиклем ихтирам менән ҡараны. Минең бер кемгә лә һөйләмәгәнемде белеп, иң ҙур серҙәре менән дә уртаҡлашты улар. Элек кешегә кеше кәрәк ине, ә хәҙер - юҡ. Кешенең ҡәҙере лә юҡ. Эшкә сығып, шуны аңланым... - тине вахтер апай.

Был миҫалдарға артабан сурыһып, аңлатма яҙыу урынһыҙҙыр. Заман үҙгәреү менән бергә кешеләр араһындағы иң мөһим, иң изге, иң йолаyи мөнәсәбәттәр үҙгәрә, шуныһы ҡыҙғаныс. Кешегә кешеләр менән аралашыу түгел, үҙенең тап-тар донъяһында соҡоноу үҙерәк, яҡыныраҡ була бара. Шуның емештәрен тирәбеҙ, тирәсәкбеҙ әле. Йәл...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓23 декабрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин менән ҙур матбуғат конференцияһы ойошторолдо. Ул иҫәп буйынса 17-се сара була. Ҙур матбуғат конференциялары ойоштороу тәжрибәһе 2001 йылдан бирле килә. Путин уны тәүге президент мөҙҙәте ваҡытында индерҙе. Быйыл матбуғат конференцияһы Манежда уҙғарылды, унда 500 журналист саҡырылғайны.

✓Матбуғат конференцияһында Башҡортостан юлдаш телевидениеһы хәбәрсеһе Гөлназ Хәйбуллина Рәсәй Президенты Владимир Путинға 2024 йылда юбилей уңайынан республиканың баш ҡалаһын финанслау тураһында һорау бирҙе. Владимир Путин Өфөнөң 450 йыллығына өҫтәмә финанслау бүлергә вәғәҙә итте. Гөлназ Хәйбуллина Президенттан Өфөлә хоккей буйынса донъя чемпионатын ҡабул итеү мөмкинлеге тураһында ла һораны, сөнки ҡала "Салауат Юлаев" хоккей клубы менән дан тота.

✓Радий Хәбировҡа "Янғантау"ға ЮНЕСКО-ның глобаль геопарκы статусын биреү тураһында сертификат тапшырылды. Әлеге статус 2020 йылда бирелгәйне, әммә ковид таралыуы сәбәпле сертификатты быйыл ғына тапшырҙылар. Әле ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫының яҡынса исемлегенә ("Тәбиғәт объекты" номинацияһында) индереү өсөн "Башҡорт Шихандары: Торатау, Йөрәктау һәм Ҡуштау" тәбиғәт-геологик ҡомартҡыһының ғаризаһын әҙерләү өҫтөндә әүҙем эш алып барыла.

✓Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһын йоҡторғандарҙың дөйөм һаны - 119 562. Лабораторияларҙа һуңғы тәүлектә 407 яңы осраҡ раҫланған. 260 пациент - дауаханала, уларҙың 174-һе - 60 йәштән өлкән. Ә бына 83 кешенең хәле ауыр, бәрәүһе үпкәне яһалма елләтеү аппаратында ята. Башҡортостанда 6369 кеше табип күҙәтеүенә алынған. 17 кеше сир ҡорбаны булған. Тәүлек эсендә 48 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓Әлеге ваҡытта республикала халыҡтың 60 проценты прививка эшләткән. Ауырығандарҙы ла иҫәпкә алғанда, коллектив иммунитет 70 процентҡа яҡынлашып килә. "Коллектив иммунитет булдырыу өсөн был ғына етмәй, - тип билдәләне һаулыҡ һаҡлау министры. - Беҙҙең иҫәпләүҙәр буйынса, февраль баштарында шуға өлгәшергә тейешбеҙ".

ИШАРА



**Элегерәк Яңы йыл етә башлаһа, өс ат мисәүләп егелгән санаға ултырып, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу өйҙән-өйгә, ауылдан-ауылға ҡарттарға һәм бала-сағаға күстәнәс өләшеп йөрөй торғайны. Замана менән бергә был йола ла ваҡыт сандығынан төшөп ҡала бара. Ауыл хакимиәттәре эше яҡшы ҡуйылған урындарҙа ғына һаҡлана был йола. Әммә ажғырып торған аттар елеп килгәнен белдереп, бар халыҡты урамдарға сығырға мәжбүр итеүсе дуғаларҙағы ҡыңғырау сыңы күңел төбөндә сың-сың килеп ишетелеп тик тора. Ҡыңғырау тигәндән, унан саҡрым-саҡрым алыҫтарға китерлек тауыш сығыуы эсенең буш булыуынан килә тип кем уйлаһын инде. "Ҡыңғырауҙың эсе буш" тип әйтелә халыҡ мәҡәлендә. Уның кинәйәһе хаҡында уйланһаң, мәғәнәһе ҡыңғырау сыңынан да алыҫҡараҡ китерлек, Ер шарын урап сығырлыҡ, быуаттарға етерлек. Ошо әйтем хаҡында киңерәк итеп фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

# ҠЫҢҒЫРАУҘЫҢ ЭСЕ БУШ

Ҡасандыр ике күрше йәшәгән. Уларҙың хәлле йәшәгәне Ҡөрьәнде ятҡа белеп, Ҡөрьән-Хафиз дәрәжәһенә өлгәшкән. Ул мәсеттән сыҡмаған, көнө-төнө намаҙ уҡыған, дин талап иткән бер ғәмәлде лә ҡалдырмай, теүәл үтәп барған. Уның күршеһе, йортонда балалары күп булғанлыҡтан, йыл һәм тәүлек әйләнәһенә эшенән бушамаған, онотҡанда бер генә тапҡыр булһа ла мәсеткә барып намаҙ уҡырға ла ваҡыт тапмаған.

- Ҡайһылай бәхетле минең күршем. Донъяны етеш, көнө-төнө намаҙлыҡ өҫтөндә ултырып, Аллаһы Тәғәлә хозурында булыуҙан да ҙурыраҡ бәхет бармы икән был донъяла йәшәгән кеше өсөн, - тип уйлаған эш менән мәшғүл булыусы кеше үҙенең диндар күршеһен осраткан һайын.

- Ҡайһылай бәхетһеҙ кеше, көнө-төнө эш тә эш. Мәсеткә барырға аҙ ғына ваҡыт табырға була бит, - тип уйлаған диндар күршеһен осратҡанда.

Күпмелер ваҡыт үткәс, күршеләр гүр эйәһе булған һәм яндарына һорау алыусы фәрештәләр килгән. Улар күршеләрҙән бәхетле булыу-булмауҙары хаҡында һорашҡан.

- Эйе, мин ғүмерем буйына изге доғалар менән йәшәп, бик тә бәхетле булдым, - тигән диндар бик ҡәнәғәт ҡиәфәттә.

- Татырға насип булманы инде өләшмә төшкән көмөшөмдө, бәхет мине урап үтте. Ғүмерем буйына көнө-төнө эш өҫтөндә ҡайнаным. Әммә һис тә мандыманым. Балаларым күп булғас, уларҙы ашатырға-эсерергә, кейендерергә кәрәк ине. Үкенескә күрә, намаҙ уҡырға, ғилем эстәргә теләгем ҙур булһа ла, быға минең ваҡытым етмәне, - тигән ғүмере буйына эш менән мәшғүл булыусы күршеһе.

Күршеләрҙе иң ныҡ аптыратҡаны шул булған: фәрештәләр уларҙың бәхет дәүмәлен бизмәнгә һалып ҡарағанда, һәм ике яҡ та тигеҙ тартҡан. Был хәлде бер фәрештә түбәндәгесә аңлатып биргән. Иғтибарын тәүҙә диндарға йүнәлткән:

- Һин матди байлыҡҡа эйә булһаң да, рухи байлыҡ ҡытлығы кисереп йәшәгәнһең. Шул бушлыҡты тултырыу маҡсатында көнө-төнө намаҙ уҡығанһың, ғилем эстәгәнһең. Һин үҙеңдең байлығың уртаһында буп-буш күңелең менән фәҡир кеүек ултырғанһың. Фәҡәт тик донъя малына бәйле нәфсең үлгәс кенә һин рухи байлыҡҡа эйә буласаҡһың. Матди байлыҡты һинә Аллаһы Тәғәлә күңелеңдәге рухи фәҡирлекте тултырырға күберәк ваҡытың ҡалһын өсөн биргән...

Икенсе күршегә ҡарап фәрештә былай тигән:

- Ә һин үҙ ғүмереңдә ярлылыҡтың, хеҙмәт ауырлығының ғазаптарын ныҡ татығанһың. Шуға күрә ғүмереңде бәхетһеҙ үткәрҙем тип иҫәпләйһең. Әммә һин ярлылығыңда, сөнки рухи халәт һәм бәхет матди байлыҡ менән үлсәнмәй. Һинең ғүмереңдең һәр миҙгеле рухи көс, ғәм, сәм, доға уҡырға ынтылыш, хыялдар менән тулы булғанға, һин ғүмереңде бәхетле үткәрҙем тип иҫәпләй алаһың...

- Бер тапҡыр ҙа доға уҡымаған һәм үҙен бәхетһеҙ тойған кеше менән үҙ ғүмерен намаҙлыҡ өҫтөндә үткәргән кешенең бәхет дәүмәле тигеҙ булып сығамы инде? - тип үҙ дәғүәһен белдерергә ашыҡҡан диндар, фәрештәләрҙең һүҙе менән риза булмайынса.

- Һеҙҙең дәғүәгеҙ урынһыҙ, сөнки Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында һеҙҙең бәхет дәүмәле үҙегеҙҙе бәхетле итеп тойоу йә тоймауға бәйле түгел, - тигән диндарға фәрештә.

- Барыбер риза түгелмен быға. Мин ғүмерем буйы Аллаһты маҡтап доға уҡыным, күпме дини ғилем эстәнем, мин уҡыған доға-аяттарҙың иҫәбе-һаны юҡ, ә ул ғүмере буйы донъялыҡҡа бәйле тормош, эш менән булды, - тип һаман да сигенергә теләмәгән диндар.

- Кемгә нимә етмәй, ул шул бушлыҡты тулыландырырға тырыша, - тип яуаплаған уға фәрештә. Был һүҙҙәр диндарҙың ярһыуын шунда уҡ юҡҡа сығарған...

Ошо фәһемле тарихта динле булыу менән иманлы булыуҙың араһында ҙур айырма барлығы күренеп тора. Үҙ ғүмерендә бер генә тапҡыр булһа ла намаҙ уҡымаған кеше ғүмере буйына намаҙлыҡтан тормаған кешегә ҡарағанда иманлыраҡ булып сығыуы бар икән хатта. Һәр хәлдә, был тарихтан күренеүенсә, уларҙың ҡылған ғәмәлдәренә бирелгән баһала бизмәндәрҙең ике яғы ла тип-тигеҙ.

Совет дәүерендә кешеләр һәм төрлө милләт вәкилдәре бер-береһенә ҡарата ихтирамлы, эскерһеҙ мөнәсәбәттә булды. "Кеше кешегә дуҫ һәм иптәш" тигән һүҙҙәр ҡоро лозунг ҡына булманы. Шул уҡ ваҡытта донъялар үҙгәреп китеп, элекке Советтар Союзында йәшәгән милләттәр үҙ диненә ҡайта башлағайны, дуҫлыҡ һәм иптәшлек мөнәсәбәттәре лә юғала башланы. Бынан ниндәй һығымта яһарға була, тип уйлайһығыҙ? Эйе, тимәк, совет осоронда кешеләрҙең меңәр йылдар буйына тоғролоҡ һаҡлаған дини иман, әхлаҡ принциптары һуғышсан атеизм шарттарында ла дуҫлыҡ, иптәшлек сифаттарына йәшеренеп йәшәгән. Тимәк, ул саҡта кешеләр үҙ асылы менән иманлы булғас, барыбер ҙә Аллаһы, динле булып йәшәгән. Күптәрҙең үҙ диненә килгән хәҙерге заманды иманға ҡайтыу тип атап булһа, кешеләр һәм ҡәүемдәр араһында арта барған дошманлыҡты нисек аңлатырға һуң? Әлбиттә, сабыр, иманлы, әхлаҡлы булырға саҡырған дин менән был күренештең араһында бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ юҡ. Икенсенән, беҙ күп кенә кешеләрҙең ошо үҙгәрештәр заманында ысын мәғәнәһендә дингә килеп, Аллаһтың барлығын йөрәге менән тойоп, диндең фарыз ғәмәлдәрен үтәп, үҙе, ғаиләһе, милләте, иле өсөн ҡулынан килгәндең барыһын эшләп йәшәгәнен дә беләбеҙ. Бында инде дәғүәбеҙ икенсе төркөмдәгеләргә ҡағыла.

Ә хаҡ мосолман менән монафиҡты нисек айырырға һуң? Ошонда инде халҡыбыҙҙың "Ҡыңғырауҙың эсе буш" тигән әйтеме иҫкә килеп төшә. Ә шулай ҙа... Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

Әхмәр
ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# УҢЫШЛЫ БУЛАЙЫҠ!

**Тормошомдо, кем әйтмешләй, "до" һәм "после"ға бүлеп йөрөтәм. Шуның икеһе араһында хәтеремдән юйып ташларға теләгән бер йыл бар. Бер генә йыл, әммә бөтә ғүмергә торош итә ул. Унан байтаҡ йылдар үтте. Хәҙерге аҡылым менән уйлап ҡараһам, тап шул ҡыҫҡа ғына осор миңә ҙур тормош һабағы биргәнлеген аңлайым һәм, иҫләргә яратмаһам да, уға рәхмәтлемен.**

Көндәрҙән бер көндө яратып ҡына эшләп йөрөгән эшемдән ҡалдым. Ә өйҙә берҙәнбер аҡса табыусы - мин, ирем - һаулыҡ торошо буйынса икенсе төркөм инвалиды. Ваҡытлыса ауырлыҡтарҙан ҡурҡып, ике балам менән ҡалдырып сығып китте. Эшһеҙ ҡалыу - бер, уның артынса ипотеканы ваҡытында түләй алмау сәбәпле банкка бурыстың, көнкүреш техника яһыртыуға алынған кредиттың көндән-көн артыуы мине упҡынға килтереп терәне. Кәңәш бирер, терәк булырҙай бер кем дә юҡ. "Берәй нисек аҡса табып, бурысыңды түлә инде", тигәндән башҡа ҡолаҡҡа ятышлы бер ниндәй тәҡдим дә, кәңәш тә, ярҙам да булманы.

Шул ваҡыт шәхси үҫеш буйынса билдәле тренер, бизнес-консультант, психолог Наталья Грейстың "Генетик хәйерселектең дүрт сәбәбе" исемле яҙмаһына тап булдым. Авторҙың китабын тотоп уҡып ҡараһаным булмаһа ла, уның ҡанундары тураһында мәҡәләләр быға тиклем дә ҡыҙыҡһыныу уята бирепъ ҡуйғайны, ваҡыт булмау сәбәпле, уҡырға тура килмәгәйне. Уҡый башланым, ябай һәм һәр кем аңларлыҡ итеп яҙған мәҡәләләре еңел уҡылды. Яҙыусы һәр ваҡыт үҙенең уйланыуҙарын, фәлсәфәүи фекерҙәрен тормошта үҙе осратҡан миҫалдар менән дәлилләй. Минең тормошома оҡшаған ғаилә, кеше тарихтары ла бар ине.

Ни өсөн хәйерселек менән бысраҡлыҡ, сүп-сар һәр ваҡыт бер-береһен оҙатып йөрөүенең сәбәптәрен дә төрлө ваҡиға менән иҫбатлай психолог. Уҡыйым да, үҙемдең тормошом менән сағыштырам. Өйөмдө, балаларымды, иремде, улар менән мөнәсәбәтте күҙ алдынан үткәрәм дә, артабан уҡыйым. Тиҙҙән обойҙары ҡубып торған стеналар, бысраҡ тәҙрәләр, иҙәндәге иҫке балаҫтар миңә уҡырға бирмәй башланы. Хәйерселектең дүрт сәбәбен аңлау тормошомдо, дөрөҫөрәге, аңымды үҙгәртергә этәргес булды. Ҡупҡан, иҫкергән, төҫө бөткән әйберҙәр күреп үҫкән балалар төпкөл аңында хәйерселек программаланыуын белгәс тә фатирҙа ремонт башланым. Тиҙҙән барыһы ла яйға һалынды. Эш тә табылды, бурыстарҙан да ҡотолдом, ирем дә кире әйләнеп ҡайтты. Ҡыйын саҡта ташлап киткән кешене нисек ғәфү иттең, тигән кешеләргә бер нәмә лә әйтмәнем. Сөнки ярты ғәйеп үҙемдә ине.

Ул йылдарҙа бик күп китап уҡыным. Сергей Лазаревтың "Диагностика кармы"һын, Лууле Вилма, Луиза Хей, Наталья Правдиналарҙың китаптарынан да үҙем өсөн күп аҡыл алдым...

Тәнзилә КИНЙӘҒОЛОВА.
Күмертау ҡалаһы.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әйтеүенсә, Яңы йылға тиклем республикала коронавирусҡа ҡаршы указға бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр индерелмәй. Шулай уҡ Радий Фәрит улы һаулыҡ һаҡлау министрына һәм Роспотребнадзор башлығы Анна Казакка коронавирустың "омикрон" штамы таралыуға бәйле хәлде контролдә тоторға ҡушты. Коронавирус инфекцияһына ҡаршы вакцинацияға килгәндә, ағымдағы темп һаҡланһа, республика февраль баштарында уҡ коллектив иммунитет булдырыуға өлгәшергә мөмкин, тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Тиҙҙән Башҡортостанға 12-18 йәшлек үҫмерҙәр өсөн "Спутник М" вакцинаһы килтерелә, тип хәбәр итте һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. Билдәләнеүенсә, йыл аҙағында уҡ Рәсәйҙә үҫмерҙәргә прививка яһау башлана. Үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән "Спутник М" препараты "Спутник V" вакцинаһы нигеҙендә эшләнгән, шулай уҡ ике компоненттан тора. 15 йәшкә тиклемге балаларға прививка ата-әсәләрҙең йәки балиғ булмағандарҙың законлы вәкилдәренең ризалығы, балаға 15 йәш тулһа, уның үҙ ризалығы менән эшләнә.

✓Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министры Михаил Мурашко иҫкәртеү прививкаларының милли календарын һәм эпидемиологик күрһәтмәләр, шул иҫәптән коронавирусҡа ҡаршы прививкалар календарын раҫланы. Бойороҡҡа ярашлы, 60 йәштәгеләр һәм унан өлкәндәр, медицина, мәғариф һәм социаль өлкәләрҙә эшләгәндәр, социаль учреждениеларҙа йәшәгәндәр, хроник, шул иҫәптән үпкә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренән, шәкәр диабетынан һәм һимереүҙән яфаланғандар, шулай уҡ миллионлы ҡалаларҙа йәшәгәндәр мотлаҡ коронавирус инфекцияһына ҡаршы прививка яһатырға тейеш.

✓Хәйбулла районында И. Тасимов исемендәге Аҡъяр тау колледжында 50 урынға иҫәпләнгән заманса кинозал асылды. Быға тиклем район халҡына премьера фильмдарын ҡарау өсөн 100 саҡрым алыҫлыҡтағы күрше Сибай, Ырымбур өлкәһенең Гай һәм Орск ҡалаларына йөрөргә тура килде. Яңыртылған кинозалға тәүгеләрҙән булып балалар килде. Уларға "Айыу балаһы Бамси һәм Аждаһа" тигән анимация фильмын күрһәттеләр.

ҠЫҪҠАСА

# ТЕЛӘКТӘР ШЫРШЫҺЫНА...

✓ **21 декабрҙә Өфөлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала "Теләктәр шыршыһы" Бөтә Рәсәй акцияһына старт бирҙе.** "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһендә теләктәр яҙылған Яңы йыл шыршыһы ҡуйылған. "Теләктәр шыршыһы" хәйриә проекты 2019 йылда Рәсәй Президенты Владимир Путиндың тәҡдиме менән башланды. Башҡортостанда проектҡа 531 кеше, шул иҫәптән республика Хөкүмәте ағзалары, сәйәси һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, эшҡыуарҙар, артистар ҙа ҡушылды. Республика етәксеһе Радий Хәбиров Яңы йыл ағасынан акцияла ҡатнашыусыларҙың теләктәре яҙылған дүрт шар алды. Мәҫәлән, Шишмә районынан 11 йәшлек Евгений Буданов - велосипед, Өфөнән 8 йәшлек Нияз Ҡәйүмов - квадрокоптер тураһында, ә 15 йәшлек Өфө егете Данил Ларуков поезд машинисы ролендә булырға хыяллана. Ейәнсура районынан 11 йәшлек Элина Ямағолова иһә Өфө ипподромында һыбай йөрөү буйынса оҫталыҡ дәресе алырға теләй.

✓ **Башҡортостандың Роспотребнадзор белгестәре мотлаҡ вакцинация буйынса ҡағиҙәләрҙең үтәлешен тикшереү өсөн предприятиелар буйлап рейдҡа сыҡты.** 18 декабрҙә Башҡортостанда баш санитар табип Анна Казактың граждандарҙың ҡайһы бер категорияларына коронавирусҡа ҡаршы мотлаҡ прививка яһау тураһында ҡарары үҙ көсөнә инде. Эш биреүселәр прививкаһыҙ хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә индермәскә хоҡуҡлы. Тәү сиратта был түбәндәге хеҙмәткәрҙәргә ҡағыла: медицина, белем биреү, социаль хеҙмәтләндереү ойошмалары, транспорт һәм транспорт өлкәһе, хоҡуҡ һаҡлау һәм күҙәтеү органдары хеҙмәткәрҙәре, Өфө аэропортында ил сиге аша үткәреү пункттарында эшләгән хеҙмәткәрҙәр, хәрбиҙәр, хеҙмәттәр һәм көнкүреш хеҙмәттәре өлкәһе, финанс ойошмалары һәм почта бүлексәләре хеҙмәткәрҙәре. 11 ноябрҙән был исемлеккә сәнәғәт, төҙөләш һәм проектлау, ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте өлкәһе хеҙмәткәрҙәре, шул иҫәптән гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеү нигеҙендә эшләгән хеҙмәткәрҙәр ҙә индерелде. Алдан хәбәр ителгәнсә, предприятиела хеҙмәткәрҙәрҙең 80 проценттан аҙырағы прививка эшләткән осраҡта, юридик берәмектәргә 200- 500 мең һум штраф һалыныуы ихтимал.

✓ **Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаттары яңы йыл каникулдарында иҫерткес эсемлектәр һатыу режимына үҙгәрештәр индергән закон ҡабул итте.** "Был тема парламент майҙансығында ҡыҙыу тикшерелде һәм халыҡта төрлө фекерҙәр тыуҙырҙы, - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Тәүҙә Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы ғинуар башында алкоголде ваҡлап һатыуға өҫтәмә сикләүҙәрҙе бөтөрөргә тәҡдим иткәйне. Әммә граждандарҙың мөрәжәғәттәрен төрлө яҡлап тикшергәндән һуң, сикләүҙәрҙе йомшартырға тигән ҡарар ҡабул ителде. 3 ғинуарҙа республикала ғәмәлдә булған алкоголь һатыуҙы тулыһынса тыйыу бөтөрөлә. Бынан тыш, 4-6 ғинуарҙа һатыу ваҡыты оҙайтыла. Алкоголь баҙарындағы хәлдең яҡшырыуы сикләүҙәрҙе йомшартырға мөмкинлек бирҙе. Был өлкәлә мотлаҡ талаптарҙы күҙәтеүгә контроль көсәйтелде. Сикләүҙәр ғәмәлдә булған осорҙа республикала яңы йыл каникулдарында спиртлы эсемлектәрҙе саманан тыш ҡулланыуҙан ағыуланып үлеү осраҡтары кәмене".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ФАБРИКАЛЫ БУЛДЫЛАР

**Ишембай районында "Алға" махсус иҡтисади зонаһы майҙансығында тәүге производство эшләй башланы. Бында "Аркада" компанияһының заманса тегеү фабрикаһы асылды. Уны асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

"Бөгөн мин үҙенә бер төрлө хис-тойғо кисерәм: беренсенән, мин тыуған яғымда, икенсенән, Ишембай районы өсөн генә түгел, бөтә республика өсөн яҡшы эш башҡарҙыҡ. Ике йыл элек Башҡортостанда бизнесты үҫтереү һәм предприятиелар асыу өсөн махсус иҡтисади зона булдырыу идеяһы менән яна инек. Хөкүмәт ҡарары менән йыл ярым элек беҙҙә махсус иҡтисади зона булдырылды. Уҙған аҙнала был зона иң әүҙем үҫешеүсе тип танылды, йыл ярымда 10 резидент барлыҡҡа килде, бер юлы ике предприятие эшләй башланы. Тарихта бер ҡасан да бындай хәлдең булғаны юҡ ине", - тине Радий Хәбиров.

"Аркада" йәмғиәтенең директорҙар советы рәйесе Михаил Цукерман Башҡортостан етәкселегенә һәм республика Башлығына үҙҙәренең проектына ярҙам күрһәткән һәм предприятие асыу өсөн бөтә шарттар булдырған өсөн рәхмәт әйтте. Рәсәйҙә 800 эш урыны булдырылған тегеү производстволары асылғаны булманы, тип билдәләне ул. Уның һүҙҙәренсә, предприятие хеҙмәткәрҙәренә лайыҡлы эш хаҡы түләнер, улар өсөн яҡ төҙәлгән, эшләү өсөн яҡшы шарттар булдырылған.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# БӘЛӘКӘЙ ЭШТӘН БАШЛАНА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөгә "Халыҡ-ара бизнес аҙналығы"нда ҡатнашырға килгән Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ корпорацияһының генераль директоры Александр Исаевич менән осрашты.**

Яҡтар киләсәктә үҙ-ара килешеп эш итеүҙе, республикала эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү механизмдарын һәм уларҙы камиллаштырыу мөмкинлектәрен тикшерҙе, тип хәбәр ителәр республика етәксеһенең матбуғат хеҙмәтенән. "Халыҡ-ара бизнес аҙналығы" форумы башлыса йыл аҙағында уҙғарыла һәм эшкә йомғаҡ яһай тип әйтергә мөмкин, - тине Радий Хәбиров. - 2021 йыл бөтә тармаҡтар өсөн дә еңелдән булманы, ләкин беҙ бизнесҡа ярҙам итергә тырыштыҡ. Өс ярҙам саралары пакетын ҡабул иттек. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү корпорацияһы ягынан ярҙам алған эшҡыуарҙарҙың рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә теләйем. Улар - 230-ҙан ашыу. Киләһе йылдарҙа ла һеҙҙең менән шулай һөҙөмтәле эшләрбеҙ тип ышанам".

Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү корпорацияһы башлығы Башҡортостан етәкселегенә бәләкәй һәм урта бизнесҡа булышлыҡ иткәне өсөн рәхмәт белдерҙе һәм республика өсөн файҙалы булырҙай яңы ярҙам саралары хаҡында һөйләне. "Республика етәкселеге Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ корпорацияһы башланғыстарына һәр саҡ төрҙәрҙән булып ҡушыла. Унан да бигерәк, федераль сараларға өҫтәп, үҙ тәҡдимдәрегеҙҙе индерергә тырышаһығыҙ", - тип билдәләне Александр Исаевич.

Осрашыу һуңында Башҡортостан Хөкүмәте менән Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса федераль корпорация араһында үҙ-ара килешеп эш итеү һәм хеҙмәттәшлекте үҫтереү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды. Документ бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарына һәм үҙмәшғүл граждандарға ярҙам саралары системаһын камиллаштырыуҙы, ярҙам күрһәтеүҙең яңы йүнәлештәрен үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ РИЗЫҠҠА ЕТӘМЕ НИ!

**Өфөлә Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ корпорацияһынан Рәсәйҙә тәүге "Фермер утрауы" асылды. "Фермер утрауы" - "shop-in-shop" форматындағы сауҙа нөктәһе, уның кәштәләрендә урындағы етештереүселәрҙең, беҙҙең осраҡта республика фермерҙарының һәм ауыл хужалығы кооперативтарының продукцияһы урын аласаҡ.**

Башҡортостан ошондай сауҙа нөктәләре селтәрен булдырыу буйынса федераль проектты тормошҡа ашырыу өсөн пилот төбәге булып тора. Был аңлашыла ла, республикала 7 меңдән ашыу фермер хужалығы иҫәпләнә. Хужалыҡ итеүҙең кесе формалары төбәктә ауыл хужалығы продукцияһын етештереү күләмен арттырыуҙа төп роль уйнай. Шуныһы мөһим: дүрт йыл рәттән Башҡортостан илдә ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативтары һаны буйынса алдынғы урынды биләй. Улар республикала 370-тән ашыу, ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативының төп маҡсаты кооператив ағзалары хужалыҡтарында етештерелгән ауыл хужалығы продукцияһын бергәләп эшкәртеүҙе ойоштороуға ҡайтып ҡала.

Тәүге "Фермер утрауы" "Магнит" супермаркетында асылды. Адресы: Өфө ҡалаһы, Б. Баландин бульвары, 9-сы йорт. Ассортиментта экологик яҡтан таҙа һөт ризыҡтары, шул иҫәптән сырҙар, ит, ярымфабрикаттар һәм бакалея", - тип белдерҙеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. "Беҙҙең фермерҙар һәм ауыл хужалығы кооперативтары күп төрлө үҙенсәлекле продукция етештерә, - тине Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов "Фермер утрауы"н асыу тантанаһында. - Улар - ҡымыҙ, ҡорот, ҡаҙы һәм башҡа һөт, ит, емешләк деликатестары. Был ризыҡтар башлыса берәмләп һатыла торған тауар. Беҙ уларҙы йәрминкәләрҙә, күргәҙмәләрҙә, махсус сауҙа нөктәләрендә һатабыҙ, ләкин был ғына етмәй, ҙур магазиндарҙа Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ корпорацияһы ойошторған фермер нөктәләренең яңы форматын дәртләнеп ҡаршы алабыҙ".

"Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү корпорацияһы ойоштороусы булып ҡына сығыш яһамай: беҙ "Фермер утрауы" өсөн майҙансыҡ табырға ярҙам итәбеҙ, эшҡыуарҙарыбыҙға отошло булһын өсөн магазиндар менән ҡуртым шарттары тураһында килешәбеҙ, магазин төҙөүгә сығымдарҙы кәметеү өсөн ҡоралдар эҙләүҙә һәм ритейл-бук төҙөүҙә үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ. Бынан тыш, проектта ҡатнашыусыларға МСП банкынан махсус, уңайлы шарттарҙа кредит алыу мөмкинлеге бирәбеҙ. Беҙҙең "Фермер утрауы" - 10-25 фермерҙы берләштереп, бер нисә эшҡыуарға бергә тупланыу мөмкинлеге", - тине Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ корпорацияһының генераль директоры Александр Исаевич.

"Илдәге беренсе "Фермер утрауы"нда беренсе булып ҡатнашыуыум менән ғорурланам, - тине Башҡортостандың Шишмә районында уйнлашҡан ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативы етәксеһе Вилена Дәүләтова. - Кесе һәм урта эшҡыуарлыҡ корпорацияһына ошондай сауҙа нөктәһен ойошторған өсөн ҙур рәхмәт".

Әйткәндәй, "Фермер утрауы" сауҙа нөктәләрен урынлаштырыу буйынса пилот проекты алты айға иҫәпләнгән. Ошо ваҡыт эсендә "Магнит" һәм "Пятерочка" магазиндары булған биш төбәктә тағы ла тиҫтәнән ашыу майҙансыҡ ойоштороу күҙаллана. Йыл аҙағынаса Новосибирск һәм Омск өлкәләрендә лә "утрауҙар" асыла ("Пятерочка" сауҙа селтәре менән берлектә). 2022 йылда Төмән, Мәскәү өлкәләрендә һәм башҡа төбәктәрҙә проектты бойомға ашырыу күҙаллана. Проекттың артабанғы маҡсаты - ил кимәлендә сығыу.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Өфө" индустриаль паркының етештереү майҙансығында "Инвестиция сәғәте"нең йөҙөнсө ултырышы үтте. Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, ошондай берлектәге эш республикаға инвестиция йәһәтенән үҙенә йәлеп иткән биш төбәк иҫәбенә инергә мөмкинлек бирҙе. "Инвестиция сәғәттәрендә системалы мәсьәләләр ҙә хәл ителә. Был кәңәшмәләрҙә Австрияла, Төркиәлә, Башҡортостанда вәкиллектәр асыу мәсьәләһен тикшерҙек. "Алға" махсус иҡтисади зонаһының ниндәй буласағы тураһында фекер алыштыҡ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте етәксеһенең шыршы байрамы 25 декабрҙә альтернатив форматта уҙғарыла. Был хаҡта мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә баш ҡала хакимиәтенең мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова хәбәр итте. Ул шулай уҡ предприятиелар һәм уҡыусылар ҡатнашҡан хәйриә акциялары хаҡында ла һөйләне. "Мәктәптәрҙә һәм балалар баҡсаларында 29 декабргә тиклем яңы йыл иртәлектәре уҙғарыла, 198 мең самаһы бала ҡатнаша", - тине Елена Хаффазова.

✓23 декабрҙә көндөҙгө сәғәт 3-тә Ағиҙел йылғаһы буйында Ҡыш бабайҙар парады ойошторолдо. Унда баш ҡаланың бөтә районнарынан вәкилдәр ҡатнашты. Дүшәмбе, 27 декабрҙә, киске сәғәт 6-сы яртыла шулай уҡ Ағиҙел йылғаһы буйында һырғалаҡ асыла. "Һырғалаҡ "Торатау" конгресс-холынан төшкән ерҙә була. Уның оҙонлоғо - 1 саҡрымға яҡын, дөйөм майҙаны - 12 500 квадрат метр. Йылы сисенеү бүлмәһе, конькиҙар прокаты асыла", - тип хәбәр иттеләр Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

✓Рәсәйҙә 21 декабрь - ҡышҡы ҡояш торошо көнө. Был көндө йылдың иң ҡыҫҡа көнө һәм иң оҙон төнө билдәләнде. 23 декабрҙән һуң көндөң оҙайлығы арта башланы, 31 декабргә көн 6 минутҡа оҙая. Ә яҙға табан ҡояш ике-өс сәғәткә оҙағыраҡ яҡтырта башлай. "Кешеләр башлыса көн оҙайлығы үҙгәреүен шунда уҡ һиҙә, кәйеф тә күтәрелә. Ҡояш кешегә ыңғай йоғонто яһай", - тине Өфө планетарийы белгесе Тамара Денисова.

**БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

ОСРАШЫУҘАР

# МӘШӘҠӘТТӘР БИХИСАП

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Сергей Греков киң мәғлүмәт саралары журналистары менән осрашып, көнүҙәк мәсьәләләр буйынса фекер алышты, шулай уҡ ҡаланы төҙөкләндереү пландары менән уртаҡлашты.**



Йәнле фекер алышыуҙарҙың береһе йәмәғәт транспорты хеҙмәтләндереүенә ҡағылды. Сергей Греков белдереүенсә, пассажирҙар "яҡшы шарттарҙа" йөрөй. Мәғлүм булыуынса, һуңғы ваҡытта Өфөлә "ПАЗ" автобустары һаны ҡырҡа кәмене, 25 декабргә тиклем улар тулыһынса юлдарҙан алынды. Был мәсьәләне тормошҡа ашырыу маҡсатында Мәскәү беҙгә бер нисә тотонолған автобусын тапшырҙы. Ә инде яңы йылдан һынау рәүешендә "НефАЗ" предприятиеһында эшләнгән электр автобусы линияға сығасаҡ. Тест-драйв дүрт ай дауам итәсәк. Әгәр ошо арауыҡта был транспорт төрө үҙен аҡлаһа, баш ҡала хакимиәте Өфөлә электробустарҙы йыһазлау һәм үҫтереү буйынса федераль программала ҡатнашасаҡ.

Транспорт темаһын дауам иткәндә, Сергей Греков баш ҡалала түләүле парковкаларҙы булдырыу зарурлығы тураһында ла белдерҙе, сөнки элек автомобилдәр торған йәмәғәт киңлектәре хәҙер төҙөкләндерелә, әммә транспорт хужалары артыҡ баш ҡатырып тормай - машиналарын парковкаларҙа ҡалдыра. Ошо күренештәрҙән яйлап арыныр өсөн түләүле парковкалар кәрәк тә инде. Уларҙың 20 проценты һәр саҡ буш булырға, йәғни халыҡ ниндәйҙер ашығыс мәсьәләнән хәл итеү өсөн транспортын буш урында ҡалдырып, тиҙ генә кәрәкле урынға инеп сыға алырға тейеш. Сити-менеджер шулай уҡ һәр төбәктең үҙенең хоҡуҡи базаһы булыуын, шуға күрә ҡайһы бер ҙур ҡалаларҙа түләүле парковкаларҙы беренсе тапҡырҙан уҡ хәл итеп булмауын белдерҙе - прокуратура һәм башҡа ведомстволар тыйғас, был проекттарҙы ябырға тура килгән.

Осрашыуҙа шулай уҡ яҡын киләсәктә баш ҡалала төҙөләсәк яңы күперҙәр тураһында ла һүҙ булды. Уларҙың бер өлөшөн Өфө ҡәлғәһенең юбилейына ҡарата тормошҡа ашырыу планлаштырыла. Аныҡлап әйткәндә, 2024 йылда Ҡариҙел йылғаһы аша ҡаланан Көнсығыш сығыу юлы асыласаҡ һәм ул М7, М5 трассаларына тура сығыу мөмкинлеге бирәсәк.

Икенсе проект - Көньяҡтан инеү юлы. Ул тулыһынса тиерлек яңынан эшләнәсәк. Шулай уҡ Пугачев урамын, Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күперҙе, "Мега"ға сығыу юлын реконструкциялау планлаштырыла. Интернациональ урамы сатындағы Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күпер мәсьәләһе буйынса ла фекер алышыу алып барыла. Федераль программа сиктәрендә финанслау уны төҙөү мөмкинлеген бирер тип өмөт ителә. Шаҡшалағы һәм Затондағы күперҙәрҙе реконструкциялау буйынса финанстар эҙләнә. Нижегородкала күпер эшләү өҫтәмә мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе күҙаллай. Тәүҙә унда дамба төҙөргә, бик күп халыҡты күсерергә кәрәк. Шуға күрә әлегә был проект күҙ уңында тора, мөмкинлектәр сығыу менән ул да тормошҡа ашырыла башлаясаҡ.

Өфөнөң тарихи Октярьб революцияһы урамын баш ҡала буйлап экскурсия маршрутына индереү тураһында күптән һөйләнелә. Сергей Греков белдереүенсә, ундағы йорттар шәхси инвесторҙарға һатыласаҡ. Ә ҡала тарихи йорттарҙа йәшәгән милекселәрҙе икенсе урынға күсереү менән шөғөлләнә, әлеге ваҡытҡа 15 йорт халҡы күсерелгән. Йорттар, документтар әҙер булһа, ике айҙан конкурсҡа ҡуйыласаҡ. Инвесторҙар пулы булдырылған. Буш ҡалған йорттарҙа мародерлыҡ күренештәре булмаһын өсөн ҡайһы бер өйҙәргә камералар урынлаштырылған, йорттар Ҡала йәмәғәт имենлеге үҙәге һағы аҫтында.

Журналистарҙы шулай уҡ баш ҡала юлдарындағы боҙлауыҡтар проблемаһы ла борсомай ҡалманы. Быға, әлбиттә, тәү сиратта, тәбиғәт күренештәре сәбәпсе булһа, ҡала мэры белдереүенсә, ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре быға әҙер булмай сыҡҡан. Боҙлауыҡҡа ҡаршы реагенттар боҙлауыҡ барлыҡҡа килгәнгә тиклем генә һөҙөмтәле икән. Властар бығаса боҙлауыҡҡа ҡаршы ҡомло ҡатнашма ҡулланыуҙан баш тартырға ниәтләһә, килеп тыуған хәл-торош был ҡарарҙан кире дүндерә. Ә тәбиғәт күренештәре иһә - киләсәккә ҙур һабаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, ҡыҫҡа ғына ваҡытта барлыҡ һорауҙарҙы ла күтәреү һәм уларға яуап алыу мөмкин түгел, әммә баш ҡала хакимиәте башлығының журналистар менән осрашыуы киләсәктә традицияға әүерелеренә, властың халыҡҡа яҡынайырына өмөт уята.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

## ХӘҮЕФҺЕҘ БАЙРАМ БУЛҺЫН!

**31 декабрҙән 2022 йылдың 1 ғинуарына ҡараған Яңы йыл төнөндә, ғәҙәттә, 500 меңләп кеше республиканың байрамса биҙәлгән ҡалалары урамдарына йөрөргә сыға.**

Тейешле тәртип тәьмин итеү өсөн 2500-ләп эске эштәр бүлексәләре хеҙмәткәрҙәре, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институтынан 200 хеҙмәткәр, шәхси һаҡ ойошмаларынан 500 кеше, шулай уҡ хоҡуҡ һаҡлау йүнәлешендәге йәмәғәт берекмәләре һәм ойошмаларынан 600-гә яҡын хеҙмәткәр йәлеп ителәсәк. Байрам саралары урындарында 185 автопатруль составында 370 Юл патруль хеҙмәте вәкиле дежурлыҡ итәсәк.

2022 йылдың 6 ғинуарынан 7-һенә ҡараған мәлдә 148 сиркәү һәм ғибәҙәтханаларҙа Раштыуа байрамы айҡанлы 30 меңләп диндар халыҡтың йыйылыуы көтөлә. Эске эштәр бүлексәләренән 1400 хеҙмәткәр, Өфө юридик институтынан 200-ләп кеше, шәхси һаҡ хеҙмәтенән - 60, йәмәғәтселек ойошмаларынан 400 кеше был дини байрамдың хәүефһеҙлеген тәьмин итәсәк. Ошо йылдың 20 декабренән 2022 йылдың 10 ғинуарына тиклем эшләйәсәк нарядтарҙы контролләү һәм улар менән идара итеүгә Росгвардия менән МЧС үҙәге вәкилдәре ҡатнашлығында БР буйынса Эске эштәр министрлығының Оператив штабы эшләйәсәк. Халыҡ күпләп йыйылған урындарҙа даими рәүештә мониторинг алып барыу өсөн кәстәр менән идара итеү үҙәгендә "Хәүефһеҙ ҡала" аппарат-программа комплексы видеокамералары эшләй.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



## СӘЛӘМӘТЛЕКТЕ ҺАЙЛАЙБЫҘ!

**Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә быйыл иғлан ителгән Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы йылына йомғаҡ яһалды.**

Баш ҡаланың спорт комитеты рәйесе Егор Сорокин билдәүенсә, тажзәхмәт арҡаһында төрлө сикләүҙәр индерелеүгә ҡарамаҫтан, яҙғы-йәйге миҙгелдәрҙә парктарҙа һәм скверҙарҙа төрлө категория граждандар өсөн спорт саралары ойоштоpола, быйыл уларҙың һаны 304 тип иҫәпләнә һәм барлығы 82 мең самаһы кешене йәлеп итә. Бөтә Рәсәй атлау көнө 10 мең кешене берләштерә. Быйыл Өфө был сараны үткәреүҙең федераль үҙәге булып тора. Республиканың "Сәләмәтлек сәнғәте" халыҡ араһында сәләмәтлекте пропагандалауҙың төбәк йәмәғәт ойошмаһы менән берлектә баш ҡаланың 50-65 йәштәге халҡын скандинавса атлауға өйрәтеү буйынса инструкторҙар әҙерләнә. Уның һөҙөмтәһендә октябрҙә Өфөлә ҡала ярыштары уҙғарыла, унда барлығы 100-ҙән ашыу кеше ҡатнаша. "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә оло йәштәгеләргә физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн дәрестәр ойошторола. Дөйөм алғанда, 21 меңдән ашыу оло йәштәге өфөлө спорт, шул иҫәптән 1595 кеше - скандинавса атлау, 1483-ө - йога һәм тын алыу гимнастикаһы, 862-һе - йөҙөү, 224-е - футбол, 215-е - саңғы ярыштары, 314-е - шахмат, 155-е - өҫтәл теннисы, 105-е - еңел атлетика менән шөғөлләнә.

Баш ҡаланы ҡарҙан таҙартыу ҙа бөгөн актуаль эштәрҙең береһе. Хәбәр ителеүенсә, Өфөлә икенсе йыл инде "Карлы Өфө" интерактив картаһы эшләй. Халыҡ ufacity.info/ sneg сайтында ҡар баҫҡан урындың адресын айыҡ күрһәтеп, фотолар һала. Граждандарҙан килгән мөрәжәғәттәр ҡала райондары территориялары буйынса бүленә. Етешһеҙлекте бөтөрөүгә бер тәүлек бирелә. Мөрәжәғәт түбәндәге сәбәптәр буйынса кире ҡағылыуы мөмкин: фотола күрһәтелгән урынды һәм уның координаттарын билдәләп булмағанда; һалынған фото асыҡ күренмәгәндә йәки территорияның ғәмәлдәге торошона тап килмәгәндә; проблема яҙылған текст уҡырлыҡ булмағанда йәки унда нормаға һыймаған лексика ҡулланылғанда; мөрәжәғәттә күрһәтелгән урын Өфө ҡалаһы территорияһына ҡарамағанда; мөрәжәғәт төҙөкләндереү буйынса икенсе интерактив карталарҙа тормошҡа ашырылған эштәрҙе үҙ эсенә алғанда. "Карлы Өфө" картаһынан тыш граждандар "Йылы Өфө" колл-үҙәгенең 8 (347) 277-09-11 телефоны һәм @Ufahotbot телеграм-боты аша ла мөрәжәғәт ҡалдыра ала.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Нейродермит

❖ 5 ҡалаҡ ҡайын еләгенең япрағы, ярты балғалаҡ зәңгәр фаягәл тамыры (синюха голубая) йәки уны 3 балғалаҡ арыҫлан ҡойроғона алмаштырырға мөмкин, 3-әр балғалаҡ ялан ҡырҡбыуыны һәм эт дегәнәге (череда трехраздельная) үләндәре, шул уҡ миҡдарҙа ҡылыс үлән тамыры (аир болотный), 4 балғалаҡ йәбешкәк (репешок обыкновенный) үләне, 2 балғалаҡ мәтрүшкә үләне һәм 1 балғалаҡ сөйәл үләненән торған төнәтмә әҙерләргә кәрәк. Зәңгәр фаягәл кеслә тынысландырғыс, әммә ағыулы. Шуға уны арыҫлан ҡойроғона алмаштырырға мөмкин. Барыһын да ваҡларға һәм бергә ҡушырға. Килеп сыҡҡан йыйылманың 1 ҡалағын иртәнсәк термосҡа һалып, 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 20-30 минут төнәтергә. 1-әр стакан төнәтмәне көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланған осорҙа барлыҡ әсе һәм татлы ризыҡты ашауҙан тыйылып торорға. Сельдерей, балыҡ, төрлө бутҡалар ашауға өҫтөнлөк бирергә. Алма һеркәһе шешәһендә 1-әр ҡалаҡ ҡылыс үлән тамыры һәм мәтрүшкәне төнәтергә. Был дауа менән көнөнә 5-6 тапҡыр ауыртҡан урындарҙы ыуырға. 1 аҙнанан уҡ хәл яҡшыра, 1 айҙан таптар бөтә, әммә тулыһынса һауыҡҡансы 2 ай тирәһе дауаланырға кәрәк. Шулай ҙа тәмлетатлы ризыҡ ашауҙы сикләргә, миҙгелендә ҡайын еләге ашарға кәрәк.

### Коронар синдромы

❖ Коронар синдромын иҫкәртеү маҡсатында шифалы валериана тамыры һәм арыҫлан ҡойроғо япраҡтарын 3-әр өлөш, меңъяпраҡ үләнен һәм әнис емешен 2-шәр өлөш алып, ҡушырға һәм ваҡларға. Йыйылманың 1 ҡалағына 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас ябырға һәм һыу парында 15 минут тоторға. Шунан алып тағы 40 минут төнәтергә, һөҙөргә. Туҡланыу ваҡытына ҡарамай, көнөнә 2-3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Бүлмә араһындағы ишектәр бер яҡҡа асылмалы, йәки икегә асылмалы булған. Һәр бүлмә оҙонса уртаҡ соланға сыҡҡан. Эске ишек менән кәрәк саҡта ғына ҡулланғандар, ул йышыраҡ биҙәк өсөн генә эшләнгән. Уны ҡыҫанға тегелгән шаршауҙарҙан йәки филенкана эшләгәндәр, енел ишек килеп сыҡҡан. Йышыраҡ икегә асылмалы ишектәр филенканан яһалған. Уларҙың тотош майҙанын алып торған ҡабарынҡы ҡыя шаҡмаҡтар, мөйөштәре ҡырҡылған йәки эскә ҡарай инеп торған тура дүртмөйөштәр һәм башҡа ҡатмарлыраҡ фигуралар менән биҙәлгән.



*Ишек башындағы кәштә*

Ҡайһы бер осраҡта ишектәрҙе деталле семәр менән тоташ биҙәгәндәр. Ейәнсура районының Бикбау ауылындағы бер ишек бик зауыҡлы күренде (1970). Ишектең эске яҡ ҡырҙары буйлап ҡалҡып торған биҙәкле нәҙек таҡталар ҡағылған - нигеҙе тура дүртмөйөшлө дүрт ҡырлы пирамидалар теҙмәһе эшләнгән. Ишек йөҙө биҙәктәр ярҙамында өс өлөшкә бүленгән: орнамент нигеҙендә ҡалҡып торған һәм мөйөштәре батырынҡы кәкерсәк ятҡан. Ишектең урта өлөшө ике оҙонса таҡтанан эшләнгән һәм биҙәкһеҙ булған. Өҫкө һәм аҫҡы яғында һәнгә башына оҡшаш кисәк менән тоташтырылған өс түңәрәк семәр урынлашҡан. Йомро деталдәрҙә ситенән үҙәгенә ҡарай ике ҡырлы һырҙар эшләнгән, улар нурҙарҙы хәтерләтә. Уртала һигеҙ таждлы оя биҙәк уйып яһалған. йорт иҫке булғанға күрә ишек семәре элекке матурлығын, ҡабарынҡылығын юғалтып, шымарып киткән. Һүрәткә төшөргәндә тергеҙергә тырышып, уның зауыҡлығы, оҫтаның маһирлығы һәм төрләсә һырлау ысулдарын белеүен күрергә мөмкин.



Урындыҡты семәрләү киң таралмаған күренеш, әммә ағасты художестволы эшкәртеү яҡшы үҫешкән райондарҙа был йыш ҡына осраған. Урам яҡ стена буйында урынлашҡан урындыҡтар өйгә килеп инеү менән күҙгә ташланған, шуға уның алдын мөмкин тиклем биҙәү һәм шул рәүешле аҫтында һаҡланған әйберҙәрҙе кеше күҙенән ҡапларға тырышыу ғәҙәти булған.



*Һырланған ишек. Орнамент детале. Ейәнсура районы, Бикбау ауылы, 1970 й. Рәссамы М.Д. Кузнецов*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

**Яңы йыл менән! Яңы бәхет менән! Ошо ябай ғына һүҙҙәр беҙгә бала саҡтан уҡ таныш, һәм инде улар бик тә алыҫ ҡалған йылдар төпкөлөнән мәктәптәрҙәге, ауыл клубтарындағы шыршы байрамдарына ғына хас булған хис-кисерештәрҙе хәтеребеҙҙә яңырткандай була. "Йәшел шыршым, һин минең, их, нуры урмандың, һин беҙҙәге Яңы йылда беҙҙең урамдың!" - тип, ниндәй генә башҡорт балаһы йырламаны икән шул замандарҙа?**

# БОРОНОРАҠ ЯҢЫ ЙЫЛДЫ...

## март айында байрам иткәндәр



Яңы йыл килеүен ҡаршылау - әлегә тиклем килеп еткән иң боронғо йолаларҙың береһе, шуға күрә уны кешелектең тарихи байрамдары рәтенә индереп була. Был байрам нисек барлыҡҡа килгән һуң? Быны өсөн боронғо ҡәүемдәрҙең ваҡыт төшөнсәһен аңлай башлауы тәү шарт булып торған. Билдәле булыуынса, тәү кешеләр аңында ваҡыт төшөнсәһе көн менән төн, миҙгелдәр алышыныуын, тәбиғәттә йыл һайын ҡабатланып торған үҙгәрештәрҙе күҙәтеү нигеҙендә формалашҡан. Аңдары үҫешә барған кешеләр үткән ваҡытты иҫәпләү өсөн бик ҡулай булған үлсәм - йыл төшөнсәһен булдыра. Иң ҡыҙығы ла шулдыр - әле фәнгилем тигәнебеҙ хаҡында бер ни белмәгән боронғо бабаларыбыҙ ваҡыт үлсәмдәрен бер-бер артлы таба тороп, улар аша ваҡыт тип аталған ысынбарлыҡтың хәҡиҡәткә ярашлы сағылышын аңдарына һеңдерә алған.

Йыһанда, шул иҫәптән кешеләр төйәк иткән Ер шарында, мәңгелек, туктауһыҙ хәрәкәт-әйләнеш бара. Барса нәмә ҡабатлана: тыуа, үҫешә, йәшәй һәм икенсе бер идеаль (рухи) йәиһә матди халәткә күсә. Хатта миллион йылдар буйына йыһан океанын гиҙгән йондоҙҙар ҙа, үҙ ваҡыты үткәс, тарҡалып, йыһандың астрономдар "кара тишек" тип атаған бер даирәһенә һурылып алына икән. Ерҙәге тормош та шулай - ул тотош хәрәкәттән, үҙгәрештәрҙән, йәшәйеш тип аталған рәүештән ахыр сиктә беҙгә билгеһеҙ булмаған икенсе бер халәткә күсеп китеүҙән ғибәрәт. Был - Бөйөк Йыһан ҡануны, уны бер генә әҙәм балаһы ла үҙгәртә алмаясаҡ. Йыһан туктауһыҙ әйләнә, ваҡыт тигәнең дә ошо әйләнештең бер сағылышылыр ул.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЭШЛЕКЛЕ БУЛАЙЫҠ!

"Юлбарыҫ"тарға йондоҙнамә үҙ йылында ҙур уңышҡа өлгәшәсәк тип юрай. Үткән йылда планлаштырған бар эштәрен тамамлаясаҡ, тигән юрау ҙа бар. Иншалла... Эштәре тиҙ алға барыр, карьера буйынса үрләү өсөн яңы мөмкинлектәр асылыр, көтөлмәгән сюрпризар һөйөндөрөр. Янғыҙҙар икенсе яртыһын табыр, ғаиләләр араһында мөнәсәбәттәр нығыныр, тип тә яҙылған. Ҡыҫҡаһы, алдағы йылда эштә лә, мөхәббәттә лә уңасаҡмын. Бөгөн минең иң борсоған, миңә иң етмәгән нәмәләр...

Булмышыма, асылыма тура килгән эш таба алмай ҡаңғырҙым. Ҡайҙа ғына эшләп ҡараманым, ниндәй генә һөнәрҙә һынап ҡараманым үҙемде. Хатта ашнаҡсы булып эшләнем. Рәсәй киңлектәрен арҡырыға-буйға урап сыҡтым, тиһәм дә арттырыу булмаҫ. Һөнәрем буйынса геодезист мин. Монтажсы ла, бураулаусы ла, электрик та, балтасы ла, фрезеровщик булып та эшләй алам. Тик эштән-эшкә күсеп йөрөүем эш хаҡы менән генә бәйле түгел. Күңелгә ятмағанға оҙаҡ тотҡарланмайым бер урында.

Әле бына ике йыл таксист булып йөрөйөм. Оҡшай. Ҡала-ара маршруттарға, алыҫ араға йөрөргә яратам. Юлда үҙ уйҙарым менән яңғыҙ ҡалыу ҙа, яңы таныштар менән бөгөнгө тормош тураһында һөйләшеү ҙә бик оҡшай. Киләсәктә ошо пассажирҙар ташыу өлкәһендә үҙ эшемде асыу тураһында хыялланам. Һауа торошоноң ниндәй булыуына ҡарамаҫтан, юлға ҙур теләк менән сығам.

Һеҙгә лә, хөрмәтле "Киске Өфө"нө уҡыусылар, барығыҙға ла яратҡан кешегеҙ генә түгел, яратҡан, күңелегеҙ ятҡан эшегеҙ булыуын теләйем. Тормошоғоҙға үҙгәрештәр индерергә ҡурҡмағыҙ, уйығыҙ изге булһа, барыһы ла яңғай, һеҙҙең файҙаға ғына буласаҡ. Яңы йылда барыбыҙ ҙа эшлекле һәм һөйөклө булайыҡ!

**Илмир ВАХИТОВ.**
**Күмертау ҡалаһы.**

Архаик замандарҙа һәр яңы йыл ерҙәге барса тереклектең яңырыу осоро - яҙ миҙгеле етеү менән башланған, һәм был мәңгелек күктең, тәбиғәттең кисектергеһеҙ ҡануны рәүешендә ҡабул ителгән. Кешеләр аңында яҙ башы - яңы йыл башы - яҙғы ерҙең сираттағы йәнләнеше, яңырышы рәүешендә сағылыш тапҡан. Тап шуның өсөн дә боронғо халыҡтар яңы йыл башын март айында байрам иткән.

Иң боронғо яҙма сығанаҡтарҙан булған Муса бәйғәмбәр закондарында (б.э. тиклем 2 мең йыл әүәл) Яңы йылды "авив" (башаҡ) айынан һанай башлау тураһында әйтелә, был март-апрель тирәләренә тура килә. Төркиҙәрҙә Яңы йылды яҙ килеү менән байрам итеү йолаһы хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалып, Науруҙ исемен йөрөтә. Моғайын, төркисә "навруз" һүҙе яҡынса "нав арз"дан алынып, "яңы дөгө", "яңы ризыҡ" ("арз" - гәрәпсә дөгөнө, йәғни ер ризыҡын белдерә) мәғәнәһендә ҡулланылған. Әйткәндәй, беҙҙең "Иҫке ауыҙға - яңы аш", тигән әйтемебеҙ ҙә бик боронғонан ҡалғанға оҡшай, яҙ көнө үлән-фәлән, йәйен - еләк-емеште ауыҙ иткәндә шулай тибеҙ бит.

Әйтегеҙ әле, боронғо кеше яҙ килеү менән нимәгә шатланырға тейеш? Әлбиттә, ҡояшҡа, йылыға. Тимәк, Науруҙ байрамында ата-бабаларыбыҙ бер-береһен яңы Ҡояш, яңы Ырыҫ, яңы Ҡот (русса: новый Год) һәм, әлбиттә, яңы Йыл менән ҡотлаған-тәбрикләгән. Тарих төпкөлөндә тәүге арийҙар булып танылған башҡарт ҡанбабаларыбыҙға ҡанҡәрҙәш остготтарҙың илаһы ла юҡҡа ғына Гот тип аталмағандыр ул.

Әйткәндәй, үтә лә боронғо ҡәүемдәрҙең тәү теленән, меңәр йылдар үтеп киткән хәлдә лә, байтаҡ ҡына халыҡтар телдәрендә бер үк тамырлы һүҙҙәр һаҡланып ҡалған. Шуларҙың береһе - архаик "yahr" (яр) һүҙ тамыры. Ул әлеге телдәрҙә төрлөсә яңғырай, әммә тамырында бер үк мәғәнә ята. Немец, инглиз һәм башҡорт телдәрендә лә бар ул. Немецса "Jahr", инглизсә "Year" һүҙҙәре йыл төшөнсәһен аңлата. Баҡтиһәң, ошо уҡ мәғәнәләге башҡорт һүҙе лә бар икән: "йарынға" ("йөренгә") - киләһе, алдағы йылға тигәнде аңлата бит. Нисек кенә булмаһын, ошо боронғо һүҙ иң башта яҡтылыҡты, йылылыҡты, әҫәлекте белдергән. Славяндарҙың ҡояш аллаһы - Ярилло, ярҡий - сағыу, яровая пшеница - яҙғы бойҙай, жара - эҫелек, жар-птица - нурлы ҡош. Хатта беҙҙең "йәр", "яратам" тигән һүҙҙәребеҙ ҙә ошо ерлектә тыуғандыр ул - һөйгән йәре әҙәм балаһына йән йылыһын бирә бит!

Яңы йылдың яҙ байрамы булыуҙан туҡтауы Рим императоры Юлий Цезарь менән бәйле. Б.э. тиклем 45 йылда ул хәҙер юлиан календары тип аталған йыл иҫәпләү системаһын индерә. Тап шул ваҡыттан башлап Рим империяһында "календа"лар байрамы, йәғни Яңы йыл 1 ғинуарҙа билдәләнә башлай. "Ғинуар" атамаһы римлылар табынған ике йөҙлө илаһ Янустың исеменән алынған: уның йөҙөнөң бер яғы уҙған йылға ҡараһа, икенсеһе алдағы йылға төбәлгән була.

Яңы йылда бер-береңде ҡотлап, бүләктәр биреү ҙә бик боронғо күренеш икән. Шул уҡ Рим граждандары бер-береһенә Яңы йылда Янус илаһтың һүрәте төшөрөлгән тимер аҡсалар, башҡа бүләктәр тапшырған. Яңы йыл төнөндә ҡолдар хужалары менән бергә күңел асҡан, ашаған-эскән. Ә иң ҡиммәтле бүләктәр императорға тәғәйенләнгән. Император Калигула Яңы йылдың тәүге көнөндә үҙ һарайы алдындағы майҙанда римлыларҙан бүләктәр ҡабул иткән, кемдең ниндәй бүләк килтергәне махсус исемлеккә теркәп ҡуйылған.

Боронғо Вавилонда Яңы йыл ҡаршылау алдынан батша үҙенең ярандары менән ҡаланы ташлап сығып китер булған: йәнәһе, минән башҡа ни ҡылһағыҙ ҙа, үҙ иркегеҙҙә. Халыҡ танһығы ҡанғансы күңел асҡан, бер кемде бер ниндәй ғәмәлдән тыйыусы булмаған. Бер нисә көндән батша кире ҡайтҡас, ҡәҙимге тормош башланған.

Урта быуаттарҙа Англияла ла Яңы йыл 1 мартта байрам ителгән. 1752 йылдың Яңы йыл башын 1 марттан түгел, ә 1 ғинуарҙан башлап иҫәпләү тураһында Англия парламенты махсус ҡарар ҡабул иткәс, ҡатын-ҡыҙҙар зыҡ ҡупҡан. Бер төркөм ҡатын-ҡыҙ парламент спикерына килеп, парламенттың ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер юлы бер нисә тиҫтә көнгә ҡартайтырға хоҡуғы юҡ, тип белдергән. Спикер ҙа аптырап ҡалмаған: "Һеҙҙең әйткәнегеҙ бер ни ҙә түгел, бары ҡатын-ҡыҙ логикаһының классик өлгөһө генә", - тип яуаплаған, имеш. Ул замандарҙан инглиз телендә "pin money" (булавка өсөн аҡса) тигән термин тороп ҡалған, сөнки Яңы йылда ирҙәр тарафынан бүләк ителгән булавка ҡатын-ҡыҙ өсөн бик шәп бүләк, тип иҫәпләнгән. Ә Англия королеваһы Елизавета I үҙенә һәр Яңы йылда бүләк ителгән, ҡиммәтле аҫылташтар менән биҙәлгән сигелгән бирсәткәләрҙән тотош бер коллекция туплаған.

Рәсәйҙә шулай уҡ төрлө дәүерҙәрҙә йыл хисабын алып барыу һәм Яңы йыл башын билдәләү төрлөсә булған. Боронғо Рустә Яңы йыл, башҡа халыҡтарҙағы кеүек, 1 марттан башланған, ә йыл иҫәбе донъя яратылған ваҡыттан башлап алып барылған. XIV быуатта Мәскәү сиркәү соборы, грек календарына ярашлы, Яңы йыл башын 1 сентябргә күсерергә ҡарар итһә лә, был ҡарар бөйөк кенәз Иоанн Васильевич Өсөнсөнөң ҡәтғи талабы буйынса 1492 йылдан ғына сиркәү һәм граждандар йылын иҫәпләүгә нигеҙ булып китә. 1 сентябрь бер үк ваҡытта яһаҡ, пошлиналар һәм башҡа түләүҙәрҙе ҡабул итеү көнө, тип һанала. Был көндә батша Кремлгә килгән, унда сиркәүҙең юғары вазифалы руханиҙары менән тантаналы сараларҙа ҡатнашҡан, бында килгән һәр кем батшаға яҡлау һәм ғәҙеллек һорап мөрәжәғәт итә алған.

Рәсәйҙә 1 сентябрҙә Яңы йылды ҡаршылау һуңғы тапҡыр 1698 йылда булған. 1699 йылда Европала оҙайлы сәйәхәттә йөрөп ҡайтҡан Петр I йыл башын 1 ғинуарҙан башлап иҫәпләүҙе, йыл хисабын донъя башынан түгел, Христос тыуғандан алып барыуҙы талап иткән указ ҡабул итә. "Рәсәйҙә Яңы йылды төрлөсә иҫәпләү булғанлыҡтан, ошо числонан кешеләрҙең башын ҡатырыуҙы туҡтатырға һәм бар ерҙә лә Яңы йылды 1 ғинуарҙан алып иҫәпләй башларға. Ошо изге башланғыс һәм күңел асыу хөрмәтенә бер-берегеңде, эштә уңыштар һәм ғаилә именлеге теләп, Яңы йыл менән ҡотларға. Яңы йыл хөрмәтенә шыршылар ҡуйырға, балаларға уйындар ҡорорға, тауҙан санала шыуыу ойошторорға. Ә ололарға эскелек һәм танау емереү менән булмаҫҡа - бының өсөн башҡа көндәр ҙә етерлек", тиелә батша указында. Әйе, Петр батшаның был талаптарын беҙ бөгөн дә еренә еткереп үтәйәк, оҙайлы Яңы йыл байрамыбыҙ күңелле һәм ипле генә үтер ҙә китер ине...

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АХМАҠ МЕНӘН БӘХӘСЛӘШМӘЙЕК!

Бер көндө Ишәк тик торғандан Юлбарыҫҡа:
- Үлән зәңгәр төҫтә, - тигән.

Юлбарыҫ үләндең йәшел икәнен иҫбат итергә тырышҡан. Улар араһында бәхәс ҡупҡан һәм бәхәсте хәл итеү өсөн урман батшаһына килгәндәр.

Тәхеттә ултырған Арыҫлан күренеү менән ишәк әлләҡайҙан:

- Хөрмәтле батша, үлән зәңгәр төҫтә булыуы дөрөҫ бит! - тип ҡысҡыра башлаған.

Арыҫлан бер ишәккә, бер юлбарыҫҡа ҡараған да, баш ҡағып ҡына ризалашҡанын белдергән.

Ишәк:

- Ә бына юлбарыҫ бының менән риза түгел һәм минең йәнемә тейә. Зинһар өсөн уға яза бирегеҙ, - тигән.

Урман батшаһы юлбарыҫҡа "биш йыл өндәшмәй йөрөргә" тигән яза иғлан иткән. Быны ишеткән ишәк үрле-ҡырлы һикереп, юлын ары дауам иткән.

Бер ни тиклем өндәшмәй торғандан һуң юлбарыҫ телгә килгән:

- Һеҙ ни өсөн миңә яза бирәһегеҙ - үлән зәңгәр түгел бит...

Арыҫлан уға:

- Эйе, ул йәшел төҫтә, - тигән.

Юлбарыҫ аптырап:

- Улай булғас, ниңә миңә яза бирәһегеҙ?

Арыҫлан:

- Үләндең йәшелме, зәңгәрме икәненең бер ҡыҫылышы ла юҡ бында. Язаны һин аҡыллы һәм белемле йәнлек була тороп, наҙан һәм хаяһыҙ хайуан менән бәхәскә инеүең өсөн алдың... - тигән.

...Эйе, ҡайны берҙә ахмаҡ һәм тупаҫ кешеләр менән бәхәскә инеүебеҙ беҙҙең дә иң ҙур хатабыҙ ул. Ундайҙарға дөрөҫлөк тә, ысынбарлыҡ та бер ниндәй әһәмиәткә эйә түгеллеген белә тороп, һүҙгә килешәбеҙ, үҙебеҙҙекен иҫбатларға маташып, иң ҡәҙерле, иң ҡиммәтле ваҡытыбыҙҙы юғалтабыҙ. Ә бит ундайҙар өсөн хәҡиҡәт, намыҫ бер ни түгел, иң мөһиме - һүҙен һүҙ итеү, еңеү.

Ниндәй генә дәлил һәм күҙгә күренеп торған дөрөҫлөк булһа ла, күрә алмаусанлығы һәм көнләшеүе арҡаһында бер нәмә ишетергә теләмәгән кеше менән бәхәскә инеүҙән һаҡланырға кәрәклеге хаҡында был хикмәтле хикәйәт.

**Ләйсән СӘЛИХОВА әҙерләне.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Ошо радиограмманы алғас, комкор 15-се гв. дивизияһын бер аҙ уңғараҡ бороп, Красный Кут ауылына һөжүм итергә бойора. Был пункт Петровское ҡасабаһынан 10 саҡрымдар тирәһе көньяҡ-көнбайыштараҡ, ә 16-сы гв. дивизияһына ошо ҡасаба янындағы Петровеньки тимер юл станцияһын алыу бурысы йөкмәтелә.

15-се гв. дивизияһының (командиры полковник И.Т. Чаленко) 84-се атлы полкының өс эскадроны атлылары, дошман һис бер көтмәгәндә, Красный Кут ауылы урамдарына һыбай килеш бәреп инә. Ауылды биләгән дошман һалдаттары араһында паника башлана. Немецтарҙың танк училищеһы курсанттары ауыҙ ҡаршылыҡ күрһәтә, әммә улар юҡ ителә. Ошо ауылда немецтарҙың 62-се пехота дивизияһы штабы урынлашҡан була. 15-се гв. атлы дивизияһының 78-се атлы полкы яугирҙары ошо штабты ҡыйрата, уның командиры һәм штаб офицерҙары әсиргә алына.

1943 йылдың 21 февралендә 16-сы гвардия дивизияһының (элекке 112-се Башҡорт атлы дивизияһы) 60-сы һәм 62-се полктары, юлһыҙ ерҙән, тәрән ҡар һырынтылары аша үтеп сығып, Петровеньки станцияһына яҡынлаша. Уң флангтан разведка дивизионы бара. Ҡасаба өйҙәренә яҡынлашыу менән немецтар сарҙаҡтарҙан ут аса. Дивизион командиры, гв. капитаны Әхмәҙиев Абдулла яугирҙарын туҡтатып тороп, бер нисә һалдатын алып, икенсе яҡтан дошман тылына үтеп инә һәм сарҙаҡтарҙағы немецтарҙы берәм-берәм юҡ итә. Шул уҡ ваҡытта дивизия артиллеристары Петровеньҡиға етеп килгән дошман бронепоезына ут асып, уны сафтан сығара.

22 февралдә 3-сө гвардия армияһы штабынан тағы ла яңы приказ алына. Был юлы рейдтан сығып килеүсе корпус, Широкий хуторы йүнәлешендә хәрәкәт итеп, фронт һыҙығының икенсе яғынан һөжүмгә күсергә тейешле 14-се гв. уксы корпусы частарына ҡушылырға тейеш була. Армия штабының көн һайын үҙгәреп торған приказдары армия командованиеһының (командующийы - генерал-лейтенант Д.Д. Лелюшенко) 8-се гв. корпусын дошман тылынан юғалтыуһыҙ алып сығыу планы булмағанлығын, ошо йүнәлештәге дошман көстәре хаҡында аныҡ мәғлүмәт тупланылмағанын асыҡ күрһәтә. Рейдтан сығыусылар өсөн иң хәүефлеһе - фронттың икенсе яғындағы беҙҙең частар һөжүменең бары тик хәрби приказдарҙа ғына ҡалыуы...

Кавкорпус командиры, генерал-майор М.Д. Борисов, армия штабы приказына ярашлы, үҙенең ҡулы аҫтындағы частарҙы фронт һыҙығына "52-се һанлы шахта - Владимировка - Фромандиновка - Широкий - Малоивановка" маршруты буйынса алып сығыу хаҡында подразделениелар командирҙарына бойороҡ бирә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

**Күптән түгел Венгрияның баш ҡалаһы Будапештта CIOFF®-тың (Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм халыҡ сәнғәтен ойоштороу советы) 50-се Бөтә донъя конгресы һәм Генераль Ассамблеяһы үтте. Унда Башҡортостандан мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова етәкселегендәге делегация ҡатнашты һәм бик емешле эшләп, матур яңылыҡтар менән әйләнеп ҡайтты. Ошо уңайҙан Бөтә донъя фольклориадаһын әҙерләү һәм үткәреү буйынса комитет ағзаһы - Башҡортостан Халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры Артур ӘЛИБӘКОВ һәм Башҡортостан күсемһеҙ мәҙәни мираҫ ҡомартҡыларын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир ҒӘЙНУЛЛИН менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Быйылғы еңел булмаған осорҙа беҙҙең республика Бөтә донъя фольклориадаһын ҡабул итте. Унда 37 илдән килгән ижади коллективтар сығыш яһаны, тип беләбеҙ. Венгрияға, моғайын, ошо Башҡортостанда үткән Бөтә донъя фольклориадаһы һөҙөмтәләре менән таныштырыу һәм артабанғы хеҙмәттәшлекте үҫтереү кеүек ҙур маҡсаттар менән барғанһығыҙҙыр?**

**Артур Айҙар улы:** Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм халыҡ сәнғәтен ойоштороу советының Венгрияла үткән 50-се юбилей йыйынына 42 илдән вәкилдәр килгәйне. Республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова етәкләгән делегация составында Данир Ғәйнуллин һәм Республика халыҡ ижады үҙәгенең төбәк-ара һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлек итеү бүлеге начальнигы Зарина Хәсәнова ла булды. Эш программаһы бик тығыҙға тура килде. Венгрияның мәҙәниәт министры Петер Фекете, CIOFF® президенты Филипп Боссан, Советтың Милли секцияһы президент урынбаҫары Йозеф Сзигетвари ҡатнашлығында уҙғарылған матбуғат конференцияһы онотолмаҫ тәьҫорат ҡалдырҙы. Кисен иһә Мираҫ йортонда 50-се Генераль Ассамблеяны асыу тантанаһында ҡатнаштыҡ. Унда VI Бөтөн донъя фольклориадаһы буйынса һығымталар яһалды, иң мөһиме, CIOFF® Башҡортостанда Бөтә донъя фольклориадаһы ғына түгел, ә үҙ эшмәкәрлеге менән бәйле бөтөн сараларҙың да бик юғары кимәлдә үтеүен һыҙыҡ аҫтына алды. Мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙының, Беренсе бөтә донъя балалар фольклориадаһын Өфөлә ҡабул итер инек, тигән тәкдиме тауыш биреүгә ҡуйылды. Совет ағзалары, бер тауыштан тип әйтерлек, әле аталған фольклориаданың Башҡортостан Республикаһында үткәрелеүен хупланы. Был тарихи ваҡиға, сөнки Бөтә донъя балалар фольклориадаһы, ғөмүмән, беренсе тапҡыр уҙғарыла. Бының өсөн тап Башҡортостан күҙ уңында тотолоуы - беҙҙә үткән Бөтә донъя фольклориадаһының иң сағыу сара булыуын таныуҙан килә. Ошондай матур яңылыҡ менән әйләнеп ҡайттыҡ беҙ ватаныбыҙға. Барығыҙ ҙа күргәнһеҙҙер, Радий Фәрит улы Хәбиров үҙенең рәсми сәхифәһендә был мәғлүмәтте еткерҙе. Беҙ матур, яҡты сараға әле үк әҙерләнә башланыҡ. Икенсе йыл, Алла бирһә, уның норматив яғы ҡараласаҡ.

Сәфәрҙең төп маҡсаты CIOFF® Ассамблеяһына бәйле булһа ла, үҙебеҙҙең милләткә, мәҙәниәткә ҡағылышлы ҡайһы бер эш-ғәмәлдәрҙе лә атҡарырға тигән ниәтебеҙ бар ине. Ҡуйған пландар барыһы ла тормошҡа ашты, тап беҙ теләгәнсә килеп сыҡты: хөкүмәт ағзалары менән дә күрештек, төрлө ижтимағи ойошмаларҙа ла булырға өлгөрҙөк. Консуллыҡҡа, шулай уҡ оҙатып йөрөгән дуҫтарыбыҙға рәхмәт, улар ярҙамында премьер-министр Петер Фекете менән осраштыҡ. Беҙҙе бик йылы ҡабул иттеләр, үҙебеҙҙең халыҡ ижады йәки археологияға бәйле һорауҙар ғына түгел, ә профессиональ мәҙәниәткә ҡағылышлы мәсьәләләр күтәрелде. Осрашыуҙар-һөйләшеүҙәр - барыһы ла Венгрия һәм Башҡортостан араһындағы хеҙмәттәшлеккә яңы йүнәлеш бирәсәк. Эш һөҙөмтәләренә бәйле, алдағы йыл күп кенә килешеүҙәр төҙөләсәк.

# ИЛ МЕНӘН

## иң тәүҙә



*Беҙҙең делегация Венгрияның мәҙәниәт министры Петер Фекете менән.*

Данир Әхмәҙи улының дуҫы, беҙҙе оҙатып йөрөгән Аттила Тюрк, тарихсы булараҡ, бик мәғлүмәтле. Венгриялағы берәй объект тураһында һөйләгәндә лә башҡорттар менән бәйле хәл-ваҡиғаларҙы иҫенә төшөрә һала. Данир менән Аттила - ике тарихсы - бер-береһен яҡшы аңлайҙар, уларҙы тыңлауы ҡыҙыҡ. Аттила урыҫса фәнни телдә матур итеп һөйләшә. Ошо осрашыуҙа ғына ла үткән замандарға бәйле әллә күпме нәмәләр белеп ҡайттыҡ: беҙҙең тарихсыбыҙ Данир ниндәйҙер мәғлүмәттәр еткерһә, венгрҙар икенсе ваҡиғаларға бәйле мәғ-лүмәт бирә. Бына шулай, бер-береһен тулыландырған ике яҡлы бик файҙалы фекер алышыу булды.

Яңыраҡ ҡына Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығына Венгрияның мәҙәниәт министры Петер Фекетенан рәхмәт хаты килеп төштө: "Мин һеҙгә Венгрияның Мәҙәниәт министрлығы исеменән яҙам. Һеҙҙең менән күрешеү, шулай уҡ Башҡортостан делегацияһын Ференц Лист исемендәге музыкаль академияһына оҙатыу беҙҙең өсөн ҙур мәртәбә булды", - тиелгән унда. Кеше ресурстары министрлығындағы һөйләшеүҙәр һәм һөҙөмтәле эштәр өсөн ул Башҡортостандың мәҙәниәт министрына һәм делегацияға рәхмәтен белдергән.

**Венгрҙар менән башҡорттарҙы үткән дәүерҙәр бәйләй. Әлеге яуаплы сәфәргә тарихсыны алып барыуығыҙ ҙа юҡҡа түгелдер. Данир Әхмәҙи улы, был сәфәрҙәгә һеҙҙең эштәр нимәнән ғибәрәт ине?**

**Данир Әхмәҙи улы:** Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау фәнни үҙәгенең директоры булараҡ, беҙҙең Венгрия менән бәйләнеш күптән килә. Һуңғы бишалты йыл эсендә һәр йәй Венгрия Фәндәр академияһы һәм Петер Пазмань исемендәге университеттың археологик экспедицияһын үҙебеҙҙә ҡабул итәбеҙ. Шул ваҡыттарҙан алып, венгр ғалимдары менән ныҡ дуҫлашып киттек һәм аралашыу өҙөлгәне юҡ. Ғәҙәттә, ул тарафтан ун-ун биш кеше - профессорҙар, ғалимдар, аспиранттар киләләр. Башҡорт-мадъяр уртаҡ проблематикаһына, уртаҡ тарихыбыҙға ҡағылған төбәктәрҙә булабыҙ. Айырып әйткәндә, Учалы, Бораевай, Бөрө районДарында ҡурғандарҙа, ҡәберлектәрҙә ҡаҙыу экспедицияһы булды.

Ә ғөмүмән алғанда, мадъярҙар Башҡортостан, башҡорттар менән электән үк ҡыҙыҡһыналар. Иң аҙаҡҡыларҙан булып, ҙур тикшеренеү эштәре менән, 1909 йылда Месарош Дъюла тигән венгр ғалимы килә. Ул сәфәрен Ырымбурҙан башлай, артабан Баймаҡ, Әбйәлил районДарында була, Йомаш, Тупаҡ ауылдарында бай ҡомартҡыларға юлыға. Барҙы яҡтарына барып етеп, ғәйнә башҡорттарын да күрә, башҡорттарҙан бик күп этнографик материал туплай. Ике йөҙҙән артыҡ экспонат, милли кейем, төрлө көнкүреш әйберҙәре йыя, 130-лап фото төшөрә. Улар барыһы ла - егерменсе быуат башындағы башҡорт тормош-көнкүрешен тасуирлаған, ауылдарҙы, мәсеттәрҙе, йорттарҙы күҙ алдына баҫтырырға ярҙам иткән шәп фотоһүрәттәр.

Месарош Дъюла йыйған материал Венгрияның этнография музейы коллекцияһында һаҡлана. Был коллекцияның барлығын мин ғалимдар аша белә инем. Ҡаҙан ҡалаһында Венгрияның генераль консуллығы урынлашҡан, консул Адам Штифтер менән беҙ күптән танышбыҙ. Шуға күрә уға үҙебеҙҙең осрашыу ниәтебеҙҙе алдан белдергәйнек. Даими аралашып торғас, электән белгән үҙебеҙҙең туғандарға барып төшкәндәй булдыҡ. Дуҫтарыбыҙ ҡыуанып ҡаршы алды. Беренсе көндә профессор Аттила Тюрк беҙҙе Будапешт ҡалаһы буйлап йөрөттө, ҡыҙыҡһындырған музейҙарға алып барҙы. Икенсе көндә ҡала менән Агнеш Фуреди тигән ғалим таныштырҙы. Шуны ла әйтергә кәрәк, венгр ғалимдары бөтәһе лә урыҫса яҡшы һөйләшә. Беҙҙе бигерәк тә башҡорт коллекцияһы ҡыҙыҡһындырғанын әйткәс, үҙҙәренең данлы этнография музейына алып киттеләр.

**Артур Айҙар улы:** Музейҙың генераль директоры урынбаҫары Габор Вереш беҙҙең сәфәребеҙ маҡсаты менән бик

**✓ Боронғо башҡорт ҡәберлектәрендәге һөйәктәрҙән алынған ДНК һәм боронғо венгр ҡәберлектәрендәге һөйәктәрҙең ДНК-һы бер иш. Был башҡорттар менән боронғо венгрҙарҙың бик яҡын булыуы тураһында һөйләй.**

ҡыҙыҡһынды. Әминә Ивнәй ҡыҙы музейҙағы башҡорт коллекцияһынан алдағы йыл Башҡортостанда фотокүргәҙмә эшләргә, тигән тәҡдим белдерҙе. Ә артабан ҡомартҡыларҙың иң яҡшыларын Башҡортостанға алып килеп, ҙур күргәҙмә ойошторорға һәм өс телдә - венгр башҡорт, урыҫ телдәрендә - коллекцияның каталогын эшләргә, тигән фекер әйтте. Унда беҙҙең этнографтар өсөн бик кәрәкле, әһәмиәтле материалдар һаҡлана. Хәҙер беҙҙең күп ғалимдарыбыҙ, ижад өлкәһендә эшләгән оҫталарыбыҙ реконструкция менән шөғөлләнә башланы. Онотолған, йәки онотолоп барған тормош-көнкүреш әйберҙәрен, кейем-һалым өлгөләрен тергеҙеү йәһәтенән уларҙың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ, тимәк, Месарош Дьюла йыйған байлыҡ улар өсөн өҫтәмә мәғлүмәт, асыш-табыш буласаҡ.

башҡорт ҡәберлектәрендәге һөйәктәрҙән алынған ДНК һәм боронғо венгр ҡәберлектәрендәге һөйәктәрҙең ДНК-һы бер иш. Был башҡорттар менән боронғо венгрҙарҙың бик яҡын булыуы тураһында һөйләй. Тағы ла шуныһы иғтибарға лайыҡ, боронғо башҡорттар менән бөгөнгө башҡорттарҙың ДНК-һы бер үк, йәғни, беҙ ошонда йәшәгән боронғо ата-бабаларыбыҙҙың туранан-тура вариҫтары. Ә бөгөн йәшәгән венгрҙарҙың ДНК-һы боронғо бабаларынығынан айырыла. Европала йәшәп, инде ундағы халыҡтар менән буталышып бөткәндәр, ДНК-лары ла икенсе төрлө. Уларҙың ата-бабаларының ДНК-һы беҙгә, башҡорттарға, яҡыныраҡ. Шуға, туғандаш халыҡ, тип әйтеүҙә мәғәнә бар. Петер Фекете менән осрашҡанда: "Беҙ туғандаш халыҡ, оҙаҡ ваҡыт бергә йәшәгәнбеҙ, тик беҙ Уралда тороп ҡалғанбыҙ, ә һеҙ, нишләптер, Евро-

Башҡорттар кеүек үк, яугир халыҡ булғандар. Көньяҡ Уралдан сығып киткәндән алып, Паннонияға тиклем һуғышып барғандар, аҙаҡтан башҡорттар, ҡыпсаҡтар, ҡумандарҙың бер өлөшө уларға килеп ҡушылған. Тәүәккәл халыҡ, шул яҡтан оҡшаштар.

**Тимәк, Венгрия менән төрлө бәйләнештәр ойоштороу мөмкинлеге бар?**

**Данир Әхмәҙи улы:** Эйе, Венгрия - беҙҙең өсөн асыҡ ил, һәм рухи бәйләнештәрҙе үҫтереү өсөн бер ниндәй ҙә кәртәләр юҡ. Әминә Ивнәй ҡыҙы уларҙы күп сараларға, шул иҫәптән, алдағы йыл үтәсәк "Берҙәмлек" фестиваленә саҡырҙы. Унда мәҙәниәт министры, ғилми даирәләр менән осрашыу бик һөҙөмтәле булды. Дөрөҫөн әйткәндә, бөтөн оло, мәртәбәле эштәр мәҙәниәт аша башлана. Ил менән ил, халыҡтар дуҫлығын иң беренсе мәҙәниәт башлаған,

менән танышырға мөмкинлеге бар. "Рәсәй киңлегендә иң йомарт, иң киң күңелле халыҡ - башҡорттар", - тип бер ҙә юҡҡа ғына һоҡланмайҙар.

**Әле һеҙ һөйләгәндәрҙән сығып, Венгрия менән туристик йүнәлеште үҫтерергә кәрәк икән, тигән фекер нығый.**

**Артур Айҙар улы:** Эйе, ул - беҙҙең өсөн асыҡ илдәрҙең береһе. Хаҡтар ҙа ҡыйбат түгел. Мәҫәлән, Австрия менән сағыштырғанда, тормош кимәле бер иш булһа ла, Венгрияла хаҡтар түбәнерәк. Австрия менән ирекһеҙҙән сағыштырырға тура килә, бигерәк тә архитектурала оҡшашлыҡтар байтаҡ - Будапешттың да, Венаның да үҙәгендә урынлашҡан биналар бер иш, тиерлек.

**Данир Әхмәҙи улы:** Вена менән Будапешт биналарҙы ярышып төҙөгән, һәр береһе үҙенекен шәберәк, еллерәк итеп һалырға тырышҡан, шуға ла архитектура нык үҫеш-

ғылар хәҙер инде бөтәһе лә үҙенең тарихын онотҡан, унификацияланған халыҡҡа әйләнгән, тип уйлайбыҙ. Юҡ шул. Был баҙарҙың да икенсе ҡатына күтәрелһәң, милләт байлығын кәүҙәләндергән сигелгән милли кейем, милли яулыҡтар, милли ҡурсаҡтар күҙҙең яуын ала, йәнең теләгән бөтә нәмәне һайлап алырға була. Венгрияның төрлө мөйөшөндә төрлөсә кейенәләр, һәм былар бөтәһе лә һатыуҙа бар. Бына ошо төрлөлөктө күреп, иҫебеҙ китте. Беҙҙең Өфөләге Үҙәк баҙарҙы, һорап та торманылыр, заманында сауҙа үҙәгенә әйләндерҙеләр ҙә, хәҙер унда милли-лекте сағылдырған бер нәмә лә юҡ. Венгрҙарҙың Үҙәк баҙар бинаһын бер изге ҡомартҡы итеп һаҡлауында тарихтарына, хәтергә булған мөнәсәбәттәре күренә. 120 йыл эсендә ниндәй генә ғәрәсәттәр-сәйәсәттәр булмаған тиһең, ә уның

# ИЛ ДУҪЛЫҒЫНА...

## мәҙәниәт күпер һала

Шуныһы иғтибарға лайыҡ, Будапештта ҙур яңы этнография музейы төҙөп яталар. Киләһе йылдың мартында инде унда күсенеп, яңы экспозиция ҡорорға йыйыналар, музейҙың бер мөйөшө тулыһынса башҡорт коллекцияһына ғына бағышлансаҡ. Тимәк, беҙҙең менән хеҙмәттәшлекте дауам итергә тағы ла ҙурыраҡ мөмкинлек тыуа. Тарихи музейға Башҡортостандан матур күргәҙмәләр алып барырға һөйләштек. Йәнә лә бик кәрәкле мәғлүмәт: беҙҙең ғалим, этнограф Ғәлимйән Таған 30-сы йылдарҙа этнографик музейҙың хеҙмәткәре булған һәм алда телгә алған коллекция менән эшләгән, уларға бик күп комментарийҙар, аңлатмалар яҙған. Венгрияла уның фәнни материалдары, хеҙмәттәре һаҡлана, башҡорттарҙың, төрки халыҡтарының этнографияһы буйынса китаптары сыҡҡан.

**Венгрҙарҙы беҙ туғандаш халыҡ тип атайбыҙ ҙа ул, улар үҙҙәре быны таныймы?**

**Данир Әхмәҙи улы:** Венгрҙарҙың беҙгә туғандаш халыҡ икәнен археологик ҡаҙыныуҙар ҙа раҫлай - 8-9 быуаттарҙа ошо Көньяҡ Уралда башҡорттар һәм венгрҙар күрше булып йәшәгәндәр. Венгрҙар ҙур походҡа йыйынып, Европаға киткән саҡтарында, уларҙың бер өлөшө башҡорттар менән тороп ҡалған, башҡорттарҙың бер өлөшө иһә мадъярҙар менән сығып киткән. Хәҙерге көндә археологик ҡаҙылмалар Башҡортостанда һәм Силәбе өлкәһендәге Уйылға тигән бер ҡәберлектә лә алып барыла. Шуныһы ҡыҙыҡ, боронғо

паға сығып киткәнһегеҙ. Ни өсөн икән, шуның сәбәбен белә алмайбыҙ", - тигәйнем, ул: "Беҙ бит киләсәктә Венгрияла һеҙҙең туғандарығыҙ булһын тип, һеҙгә Европа ишектәрен асыр өсөн бында килдек һәм тороп ҡалдыҡ", - тип шаяртып яуап бирҙе. Һәм етди өҫтәне: "Хәҙер венгрҙар һеҙҙең өсөн - Европа асҡысы, берәй һорау тыуһа, ҡайҙалыр барырға кәрәк булһа, миңә мөрәжәғәт итегеҙ".

**Башҡорттар менән мадъярҙарҙың туғанлығы тураһында һүҙ йөрөткәндә, улар башлыса юрматы ырыуына ҡарай бит инде. Оҡшашлыҡтар бармы?**

**Данир Әхмәҙи улы:** Эйе, юрматы ырыуының бер өлөшө мадъярҙар менән китеп, шул халыҡтың составына ингән. Дъярмат фамилиялы бик күп шәхестәре бар - спортсылары, сәйәсмәндәре, ғалимдары. Дъярмат - титуллы фамилия, аристократтар һанала. Венгрияла Дъярмат исемле өс ҡала бар: Фюзешдьярмат, Балашшадьярмат, Кеседъярмат. Венгрия ерендә Юрматы ырыуының нәҫелдәре ҡалған, венгрҙар был турала белә, фактты таныйҙар.

Венгр теле фин-уғыр тел ғаиләһенә инә. Шуға ҡарамаҫтан, уртаҡлыҡ юҡ түгел, беҙҙең халыҡҡа хас рух һәм ҡыйыулыҡ бар уларҙа. Шул рух булмаһа, мадъяр мең йыл элек ошонан сығып китеп, Европаның уртаһына барып инеп, уның иң матур өлөшөн яулап алып, шунда нығынып, үрсеп, ун биш миллионға етеп, бик ҙур мәҙәниәт ҡора алмаҫ ине. Алға әйҙәр эске көстәре бар.

ул әле лә шулай һәм киләсәктә лә шулай буласаҡ. Беҙҙә үткән Бөтә донъя фольклориадаһы тарихи, рухи бәйләнештәрҙе артабан үҫтерер өсөн яңы мөмкинлектәр бирҙе, мәҙәни сараларҙа ҡатнашыу - халыҡтар араһындағы хеҙмәттәшлекте нығытыу юлы икәнен тағы бер тапҡыр раҫланы.

**Артур Айҙар улы:** Венгрияның фольклор коллективы Башҡортостанға үткән Фольклориадаға ҡатнашыусы ғына булып килмәне, улар беҙҙең милләткә ҡарата ихлас мөнәсәбәттәрен күрһәтеүгә өлгәште. Башҡорт халыҡ йыры "Ҡарабай"ҙы йырлап йөрөүҙәре - шуның асыҡ сағылышы. Радий Фәрит улына һәм Бөтә донъя фольклориадаһын ойоштороу ағзаларына ҙур флаг формаһында эшләнгән башҡортса яҙылған хат яҙып алып килделәр. Үҙҙәренең менталитеты менән дә венгрҙар Европалағы халыҡтарҙан нык айырыла. Алла бирһә, бергә атҡараһы пландары күп, үҙ тәртибе, үҙ яйы менән тормошҡа ашыра барасаҡбыҙ.

**Данир Әхмәҙи улы:** Тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау буйынса, ысынлап та, ҙур тәжрибә тупланды, шуға беҙҙең хеҙмәттәшлек нык тип әйтә алабыҙ. Венгрияның археологтары йыл һайын бында килә, беҙ уларға бик матур итеп лагерь ойошторабыҙ. Венгрҙар бер көндө үҙҙәренең милли ризыҡтарын бешерһә, икенсе көндө беҙ үҙ милли ризығыбыҙ менән һыйлайбыҙ, мотлаҡ мәҙәни сараларҙы күрһәтәбеҙ. Һабантуй мәлдәренә тура килһә, венгр дуҫтарҙы һәр саҡ алып барабыҙ. Бер йылды Иглин районында үткән "Мәргән уҡсы"ға ла алып барҙыҡ. Тәү килгәндәрендә Шүлгәнташта, Темәстә булдылар. Хәйер, уларҙың бөтөн Башҡортостан

кән. Венгрия парламентының бинаһы - Европала иң матур биналарҙың береһе.

**Артур Айҙар улы:** Австрияның баш ҡалаһы Венанан Будапешт ике йөҙ ҙә ҡырҡ километр самаһы ғына аралыҡта ята. Өфөнән Вена ҡалаһына тура самолет рейсы булдырылғайны, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, пандемия арҡаһында әле ул кисектерелә. Ләкин бөтәһе лә ыңғай хәл ителер, шуға Венаға туристик сәйәхәт итеүселәр мотлаҡ Будапештҡа ла барып етеп ҡайтһындар ине. Тиҙ йөрөгән поезд менән сәғәтсәғәт ярымлыҡ ҡына юл.

**Боронғоно һәм бөгөнгөнө сағыштырыуығыҙ рухи бәйләнеште нығыраҡ тойорға ярҙам итә. Бына бит ниндәй бай тәьҫораттар менән уртаҡлаштығыҙ.**

**Данир Әхмәҙи улы:** Венгрия әлеге мәлдә иҡтисад йәһәтенән ҡайһы бер ауырлыҡтар кисерә, пандемия ла йоғонто яһамай ҡалмай, әлбиттә. Шуға ҡарамаҫтан, рухи тормошҡа иғтибар кәмемәгән. Будапештта күп яңы музейҙар төҙөлә. Ни өсөн тигәндә, туристар күп килә, уларҙы йәлеп итерлек мөмкинлектәр тыуҙыра беләләр. Ундағы тарих музейы, милли музей, хәрби-тарих музейы, террор музейы һ.б. музейҙар - һәр береһе бай экспозициялары менән иҫте китәрә. Венгрияла 1898 йылда төҙөлгән ике ҡатлы ҙур, матур Үҙәк баҙар ҙа - тарихи ҡомартҡы. Һәм иң ғәжәбе, уны үҙгәрешһеҙ һаҡлайҙар. Бөгөнгө көндә лә шул уҡ баҙар булып ҡалған, беренсе ҡатында аҙыҡ-түлек менән һатыу итһәләр, икенсе ҡатында сувенирҙар, милли туҡыма, милли кейем-һалым һатыла. Беҙ, ғәҙәттә, европалы, тигәс, унда-

функцияһын үҙгәртеү тураһында уйлап та ҡарамағандар.

**Артур Айҙар улы:** Тағы ла шуға иғтибар иттек, тарихи йорттарҙың эргәһендә заманса төҙөлгән биналар юҡ. Тарихилыҡты һаҡлау - улар өсөн өҫтөнлөклө. Беҙҙең илдә боронғо тарихы булған ҡайһы бер йорттар эргәһенә күп ҡатлыларын төҙөп ҡуялар. Ә Будапештта, ғөмүмән, күп ҡатлы йорттар юҡ.

**Данир Әхмәҙи улы:** Ғөмүмән, беҙ ҡыҙыҡ заманда йәшәйбеҙ. Беҙҙең тарихыбыҙ Башҡортостанда ғына түгел, ә тотош Европала ла һаҡлана. Уларҙы бары эҙләргә, табырға, өйрәнергә, сығанаҡтарҙы бында алып ҡайтырға ғына кәрәк. Үҙебеҙҙәге бай мираҫты ла башҡалар менән бүлешергә кәрәк. Туғандаш халыҡтар менән аралашыуҙы нығытыу ошо эштәрҙе йәнләндерер. Хәҙер технология заманы бит, сит континентта йәшәгәндәр менән шул уҡ секундта һөйләшергә, яҙышырға һәм мәғлүмәт менән бүлешергә була. Бына шундай киң даирәлә эшләргә, йәшәргә, асыштар яһарға кәрәк.

**Артур Айҙар улы:** Эш сәфәре тамамланып, аэропортҡа йүнәлгәндә, Данир Әхмәҙи улына: "Ошо заманда йәшәүемә һәм ошо эштәрҙе башҡарырға мөмкинлек булыуына шул тиклем ғорурланам", - тип әйттем. Эйе, беҙҙә ҙур, яуаплы эштәр көтә. Ҡайһы берәүҙәр беҙҙең алдыбыҙҙа милләтебеҙҙең тарихына, мәҙәниәтенә, матди мираҫына ҡағылышлы ниндәй юлдар асыла һәм нимәләр эшләнәсәген, бәлки, аңлап та бөтмәйҙер.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ӨФӨЛӘРҘӘ БАР БЕР АУЫЛ

**Өфө районының Шамонин ауылы беҙҙең күҙ алдында үҫте. Ундағы тәүге йорттар ҡалҡыуын, тәүләп йәшәй башлаусыларҙы ла хәтерләйбеҙ. Элек ауылда үтеп сығып булмаҫлыҡ, тубыҡтан батҡаҡ, ҡыш көрт ине. Хәҙер ауыл урамдарында асфальт түшәлгән, йорттар араһына барып инһән, үҙеңде Европала йөрөгәндәй хис итәһең. Иң һуңғы моделле иномаркаларҙа баш ҡаланан эштән ҡайтыусылар кабиналарынан сыҡмайынса, пульт төймәләренә баҫып ҡына гараждарының ишектәрен аса. Йә, әйтегеҙ, ҡайһы ауыл ошондай сервисы менән маҡтана ала? Йорттарға килгәндә инде, архитектуранан башлап, төҙөлөш материалдарына тиклем - барыһы ла Европаса!**

**Туғандар шунда йәшәгәс, шәхсән үҙемдең диҡҡәтем Салауат Юлаев исемендәге урамдың көньяҡ осонда йәшәүселәрҙә булды.**

**Республикабыҙҙың төрлө райондарынан, башлыса, ауылдарҙан килгән йәш ғаиләләр ҙур энтузиазм, йәшлек романтикаһы менән һуңғы ун йыл эсендә ҡасандыр колхоздың ташландыҡ баҫыуы булып, сәнскәк һәм әрем баҫҡан яланды гөл-сәскәле оазисҡа әйләндерҙе.**

**Мин белгән күршеләрҙе татыулаштырыусы, бер йоҙроҡҡа туплап, ауыл эсендәге ауылға әйләндереүсе сәбәп-шарттарға килгәндә инде:**

**-уларҙың барыһы ла ауылдарҙан баш ҡалабыҙ Өфөгә йән атып килеп, ғаилә ҡороп, яҙмыштарына "Шамонино" бәхете төшөүселәр;**

**-барыһы ла тиерлек Өфө ҡалаһында хеҙмәт итә;**

**-был татыу күршеләр: "Беҙҙең хатта пиондарыбыҙ ҙа бер төптән, сөнки улар бер ата-әсәнән", - тиҙәр.**

**-барыһы ла тиерлек уҙған быуаттың һикһәненсе йылдарында донъяға килеүселәр һ.б.**

**Тап шуның өсөн дә был күршеләр үҙҙәренең берләгән "Һикһәненселәр" тип атай ҙа инде. Тағы ла шуныһы: татыу күршеләрҙең ошо "Һикһәненселәр" берләгенә ҡараусылар икенсе урынға күсеп киткән осраҡта ла һаман да ошо ауыл кешеһе булып ҡала. Был да күп нәмә тураһында һөйләй.**

**Бөгөн был ауылда 9 ғаилә күрше булып йәшәй. Уларҙың ҡайһы берҙәренә түбәндәге һорауҙар менән мөрәжәғәт иттем.**

**Ғаилә башлыҡтары тәүҙә үҙҙәре менән дә таныштырып үтте.**

# ШАМОНДЫҢ "ҺИКҺӘНЕНСЕЛӘР" АУЫЛЫНДА ҠУНАҠТА



**➔ Шамонин ауылында йәшәй башлаған тәүге йылдарығыҙ ниндәй хәтирәләр менән күңелегеҙгә уйылып ҡалды?**

- Беҙ сығышыбыҙ менән Хәйбулла районының Урысбай ауылынан. Тормош иптәшем Азамат Кадаев менән беҙ бер ауылдан, күршеләрбеҙ. Исемем Мөнирә, ике малай, бер ҡыҙ тәрбиәләйбеҙ. Өлкән улым Батырға 16 йәш, Өфө авиация техникумында белем ала, уртансы улым Моратҡа - 13, бәләкәс ҡыҙыбыҙ Алһыуға 2 йәш тулды. Иптәшем 20 йыл полицияла эшләп, хаҡлы ялға сыҡты, үҙем ҡыҙым менән декрет ялындамын. Өфөлә витамин заводында эшләйем.

Һеҙҙең һорауға килгәндә, беҙ Өфө ҡалаһынан бында 2010 йылдың июнендә күсеп килдек. Ике йәш бала менән өйҙә газ, һыу, юлдар булмауы ауырға төштө. Мәтеле батҡаҡ урамдар, машина менән түгел, йәйәүләп үтеүҙәр, батҡаҡҡа батып ҡалған итектәрҙе әҙләй-әҙләй ҡайтыуҙар, таныштарҙан бидонлап һыу ташыуҙар, биш-алты ғаиләгә бер мунса яғып төшөүҙәр - барыһы ла булды. Яҡын тирәлә аҙыҡ-түлек кибеттәре булмауы ла ауырға тура килде. Иң иҫтә ҡалғаны шул булды: бейемем 30 йәшемә матур быймалар бүләк итҡәйне. Аҡса юҡ, ашарға бөттө, шул быймаларҙы һаттым бит әй аптырағас, ә уны нисек һатып ебәреү үҙе бер ҡыҙыҡлы ваҡиға ул. Аҙаҡ, аяҡтар өшөгән һайын, нишләп кенә һаттым тип үкендерә торғайны (бейемем әле булһа ла белмәй, әйтеп ҡуймағыҙ!)

Шулай булһа ла беҙ бәхетле инек, сөнки беҙҙең күптән хыялланған өйөбөҙ, балаларыбыҙ сыр-сыу килеп уйнап йөрөгән ихатабыҙ бар. Алдағы көндәргә ҙур өмөттәр бағлайбыҙ. Шамонино ауылында йәшәй башлаусы беҙ, йәш ғаиләләр, тырышып йәшәп, эшләп алып киттек. Күршеләр менән ауыр ваҡыттарҙа берберебеҙгә терәк-таяныс булдыҡ, бөтә уңайлыҡтары булған йорттар төҙөнөк.

**➔ Һеҙҙе нимә берләштерә: күрше йәшәү генәме? Йомош төшөүме? Мохтажлыҡмы? Байрамдармы? Тыуған көндәрме? Бәпес тыуыуымы?**

- Беҙ Хөснитдиновтар ғаиләһе, ирем Руслан Ағиҙел ҡалаһынан, мин Фәйрүзә - Татарстандың Йотаҙа ауылынан. Руслан әле Өфөлә бер фирмала менеджер булып эшләй, мин Шамонин мәктәбендә инглиз теле уҡытыусыһы. Улыбыҙ Аҫҡарға 10, ҡыҙыбыҙ Азалияға 8 йәш.

Руслан күршеләр менән бер-береһебеҙгә яҙҙамлашып, аралашып йәшәүҙе иң мөһиме, тип иҫәпләй. Минең иһә буш ваҡытым булмау сәбәпле, холҡомда интровертлыҡ өҫтөнлөк иткәнгә күрә, ундай аралашыуға форсатым ҡалмай, шуға күрәләр ҙә, күршеләребеҙ менән күмәкләп байрам өҫтәле артында осрашыуҙарҙы һағынып көтөп алам. Бигерәк тә һуңғы ике-өс йылдарҙағы ихлас осрашыуҙар, эскерһеҙ аралашыуҙар ваҡытында йыйылып көләрлек көләмәстәр һөйләнгәндә ысын мәғәнәһендәге бәхетле минуттар кисергәнебеҙҙе тоябыҙ. Был хаҡта мин күршеләребеҙгә әйткәнем дә бар. Шуға күрә беҙҙе берләштереүсе төшөнсәгә килгәндә, мин уны ихлас аралашыу мохтажлығы тип атар инем.

**➔ Бергә үткәргән байрамдарҙы, башҡа сараларҙы һанап үтһәгеҙ ине...**

- Хәлиловтар ғаиләһебеҙ, мин Айҙар Ейәнсура районының Абҙан ауылынан, эш урыным Башҡорт дәүләт медицина университетының физкультура уҡытыусыһымын, ҡатыным Фирүзә Ҡырмыҫҡалы районының Ҡустығол ауылынан, Республика ҡан ҡойоу станцияһында бүлек мөдире. Ҡыҙыбыҙ Юлиә - Мәскәүҙә Пирогов исемендәге медицина университеты студенты, улыбыҙ Булат Өфө ҡалаһының 20-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы, Амелияға 2 йәш.

Беҙҙә күршеләрһеҙ бер байрам үтмәй, бер эш эшләнмәй! Яңы йылда сиратлап күршеләрҙә йыйылышабыҙ. Күмәкләшеп табын әҙерләйбеҙ, уйындар ойоштор рабыҙ. Ватанды һаҡлаусылар, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көндәренә тышта усаҡ яғып, аш-һыу әҙерләп, квест ойоштороп үткәрәбеҙ. Йәш ғаиләләр булғас, Аллаға шөкөр, бәпестәр ҙә тыуып тора. Күршеләр менән йәш әсәйҙең ҡайтыуына тәмлекәстәр бешереп, әҙерләнеп торабыҙ.

Өй булғас, өйәбеҙ ҙә өйәбеҙ. Төкөтмәләр, мунсалар, гараждар төҙөү күршеләрҙең берҙәм ярҙамынан башҡа эшләнмәй. Нисек эшләйбеҙ, шулай матур итеп ял итә лә беләбеҙ. Башҡортостаныбыҙҙың матур төйәктәрен йәй һайын тиерлек барып күрергә тырышабыҙ. Шүлгәнташ, Мораҙым мәмерйәләрен күреү үҙе бер ғүмер булды. Бындай саралар үҙебеҙҙе лә, балаларыбыҙҙы ла берләштерә, усаҡ янында уҙ телефеҙҙә аралашып, йырҙар йырлап ултырыуға ни етә! Йәйҙең әсе көндәрендә һә тигәнсе йыйылышып, йылға-күлдәр буйына сығып китәбеҙ. Йолаларыбыҙҙы онотмай, Ҡорьән аштары ла үткәреп торабыҙ. Театр-концерттарҙы ла ҡалдырмайбыҙ. Йорт төҙөр алдынан күршеңде һайла, тиҙәр. Беҙгә һайларға форсат булманы. Шуға ҡарамаҫтан, күршеләребеҙҙән уңдыҡ. Һайлап йыйһаң да шулай тура килмәҫ ине.

**➔ Халыҡта "Күршең һуҡыр булһа, бер күҙеңде ҡыҫып йөрө" тигән әйтем бар. Быны нисек аңлайһығыҙ?**

- Беҙ Гөлсимә, Даян Иштановтар ғаиләһе. Даян Хәйбулла районының Йәнтеш ауылынан, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында хужалыҡ эштәре буйынса бүлек етәксеһе, мин Күгәрсен районының Юлдыбай ауылынан, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында эшләйем. Улдарыбыҙ Бәхтейәр менән Баязит Шамонино урта мәктәбендә уҡый, бәләкәсебеҙ Байназар балалар баҡсаһына йөрөй.

Һорауға килгәндә, тимәк, һин дә күпте күрмә. Үҙен белгән әүлиә, тиҙәр бит, шуның кеүек, үҙеңдең хаталарыңды белмәһәң дә, кешенекен тиҙ генә күҙгә салынып бара. Ут күршең менән татыу йәшәүҙең бер сере инде ул күп нәмәгә күҙҙе йомоп ҡарау. Ә күршеңә күҙ һалмай булмай, йорт алдында ниҙәләр менән булышып йөрөгәндә ҡойма аша тағы кемдәндер көнгөр-ҡаңғыр килеп йөрөүе үҙе бер кинәнес бит ул.

Беҙ йорттарыбыҙға күсеп йәшәй башлағанда бөтәбеҙҙең дә балалары бәләкәй, ҡатын-ҡыҙҙар күбебеҙ декрет ялында ултыра инек. Үҙ-ара танышып, аралашып китеүебеҙ ҙә тап шул балалар арҡаһында булғандыр. Балаларыбыҙ өсөн уйын майҙансығы - йорт алды, шунда сығарып уйнатабыҙ. Тәүҙә балалар, шунан әсәйҙәр дуҫлашты. Бер мәл декрет ялы тамамланып, эшкә сығып киткәйнеләр, иң тәүҙә шул ҡойма аша кеше йөрөмәүе эсте бошора икән, күршеңең ялы етеп, ишек алдында баҡса, йорт эштәре менән булышыуын көтөп алғаныңды һиҙә башлайһың. Беҙ хәҙер үҙ-ара шаяртып алабыҙ, сираттағы декрет ялында ултырыусы әсәй - ул "дежурный по стране", йәғни беҙҙең урамдың донъя тотҡаһы. Уның күҙ унынан бер нәмә лә ысҡынмай: балалар ҡасан мәктәптән ҡайтҡан, ҡайҙа уйнарға сығып киткәндәр, өйҙә бикләгәндәрме, ҡар көрәгәндәрме, ҡош-ҡортто ҡарағандармы, баҡсаға һыу ҡойғандармы һ.б. Бер-береһебеҙгә ышаныс кимәле юғары беҙҙә.

Беҙҙең осраҡта күршеңдең хаталарын түгел, ниндәйҙер һыныҡ эштәрен күреп, шунан өйрәнеп йәшәү күберәктер. Төрлебеҙ төрлө яҡтан, һәр кемдең үҙенең донъя көтөү әмәле бар. Кемдәндер ҡаҙҙай тауыҡ үрсетергә өйрәнәбеҙ, кемдәндер баҡса үҫтерергә, ә кемдәндер таш һалырға - арабыҙҙа оҫта ташсы ла бар. Йәштәрбеҙ бит әле, дәртләнеп, сәмләнеп, ярышып донъя көтөп ятҡан мәл. Шуныһы менән ҡиммәт беҙҙең дуҫлыҡ.

**➔ Әгәр ҙә һеҙҙе ауыл тип атарға ҡушһалар, уға ниндәй исем бирер инегеҙ?**

- Беҙ Зәйтүновтар ғаиләһе. Мин, Ләйсән, Хәйбулла районының Подольск ҡасабаһында тыуғанмын, ирем Самат - Әбйәлил районының Яңы Балапан ауылы егете, ике ҡыҙыбыҙ һәм бер улыбыҙ бар.

Шамонинды мин "Һиҡһәненселәр" ауылы тип әйтер инем. Сөнки күбеһе тап шул 1980-1986 йылдарҙа тыуғандар булып сыҡты. Шамониноға күсеп, бер йыл тирәһе йәшәгәс, бер-бер артлы юбилейҙар осоро башланды: бер күршегә 30 йәш тулды, саҡ ҡына ваҡыт үткәс, икенсеһенә-өсөнсөһөнә... Күбеһенә лә шул уҡ йәш тулды. Шул мәл ныҡ иҫтә ҡалған - күбебеҙ бер сама йылғылар икәне асыҡланды. Әлбиттә, башҡа йылда тыуыусылар ҙа бар, әммә "һиҡһәненселәр" күберәк.

Үҙебеҙ бер тирә йәштәштәр булғас, балаларыбыҙҙың да йәш айырмаһы ҙур түгел. Беҙ Өфөнөң төрлө ятаҡтарынан ауылға күсеп килдек, һәр ғаиләлә тиерлек бәләкәй балалар бар, барыбыҙ ҙа яңы мөхиткә сумдыҡ - эш, өй мәшәҡәттәре араһында яңы ҙур өйҙәрҙә бер-бер артлы тағын балалар тыуа. Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, бер осор күмәкләп декрет ялына сығып алдыҡ, ул мәл матур хәтирәләр менән иҫтә ҡалды. Күршеләрҙең ярҙамын тойоп, ауырлыҡтарға иғтибар итмәй, дәртләнеп, тырышып йәшәйбеҙ, балалар үҫтерәбеҙ. Балалар менән бергә баҡса үҫтереү менән дә мауығып киттек - үҙ ҡулдарың менән үҫтергән сәскәләргә, емеш-еләккә, йәшелсәләргә ни етһен! Ауылда ир-егеттәрҙең дә эштәре күп: йорт-ихата төҙөкләндереү ирҙәребеҙ яурындарында. Ярҙам кәрәк булһа, күршеләр "һә" тигәнсе йыйылышып, ярҙам итергә әҙер.

**➔ Һеҙҙең күршеләр тормошонда ниндәй иҫтә ҡалырлыҡ ҡыҙыҡ, фәһемле ваҡиғалар булды?**

- Беҙ Розалия, Руслан Мағашевтар икебеҙ ҙә Хәйбулла районынан. Рәсүл "Роснефть"тә баш белгес булып хеҙмәт итә, мин Өфө ҡалаһы ветстанцияһында ветеринария табибы булып эшләйем. Ике ҡыҙ тәрбиәләйбеҙ, Нәркәскә - 11, Наҙгөлгә 7 йәш.

Һорауға килгәндә, беҙ бер йыл 20 мулард өйрәктәре алғайныҡ. Күршеләребеҙ Кадаевтар ҙа алған. Ишек алдындағы үләнде ашап бөттөләр былар, шуға урамға сығарҙыҡ. Азамат Ҡадаев та сығарған икән. Бер мәл былар ҡушылып 40 баш булып йөрөп яталар. Мин өйҙә булмағанмын, ирҙәр саҡ айырып алған. Аҙаҡ ҡаскалаҡтарҙы алып ҡайтҡас, Азамат бер өйрәк тотоп килә ята, тей. Руслан да берәүһен ситнәтәләр, беҙҙеке түгел, тип тотоп сыҡҡан. Урам уртаһында алыш-биреш эшләгәндәр.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Һиҡһәненселәр" ауылы берҙәмлеге феноменының тағы ла бер сәбәбе - уларҙың күбеһенең Хәйбулла районынан булыуындалыр ҙа. Был район халҡының берҙәм булыуын Хәйбулла районы хакимиәте башлығы Рөстәм Динислам улы Шәрипов шулай аңлатҡайны: "Нимә генә тиһәк тә, район халҡы ҡырыҫ тәбиғәт ҡосағында йәшәй. Бында ел ныҡ өрһә, урамда баҫып та тороп булмай. Ҡышҡы һыуыҡта кешенең ун минут эсендә туңып үлеүе мөмкин. Машинаңдың тәгәрмәсе тишелеп, двигателе һүнде йә булмаһа көрт һалған юлдан үтә алмай ултыраһың икән, ти... Шундай шарттарҙа йәшәгәс, Хәйбулла халҡы өсөн берләшеү, бер төптән тотоноу хасыраҡ..."**

**Мине "Һиҡһәненселәр"ҙең тағы ла бер сифаты һоҡландыра. Ул да булһа, бер-береһенә ҡарап, сәмләнеп донъя көтөүҙәре, йорт-ҡура бөтәйтеүҙәре. Береһе өйөнә төкәтмә эшләһә, башҡаларында ла йорттар иркенәйә, икенсеһенең гараж төҙөүе була, башҡалары ла унан ҡалышмай, өсөнсөләре шәп иномарка алһа, күршеләре лә шәп атҡа атлана. Бына шулай йәшәй Өфөләрҙәге берәгәй "Һиҡһәненселәр" ауылы!**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАЛА САҠҠА БАРЫП ӘЙЛӘНӘЙЕК!

**Яңы йыл. Шыршы байрамы. Ҡыш бабай. Ҡарһылыу. Ғүмер буйы яңы йыл алдынан иҫкә төшкән таныш образдар беҙҙә ғәмһеҙ, гел шатлыҡтан торған асылыбыҙға, бала сағыбыҙға - мөғжизәгә мөкиббән ышанған мәлгә алып ҡайта. Тәүге шыршы байрамы, шулай ҙа, хәтергә иң ныҡ уйылып ҡалғанылыр. Бөгөнгөләй хәтеремдә: ҡуян "кейемендә" берәүҙән дә оялмайынса иркенләп шыршы тирәләй әйләнеп йөрөнөм. Байрам алдынан ғына ниндәйҙер бер әкиәттең инсценировкаһын әҙерләгәйнек. Миңә ҡуян роле эләккәйне. Эй оялам, ҡурҡам хатта! Һүҙҙәрен онотормон, тип түгел, үҙем кеүек балалар алдына, ололар алдына сығыуыңды күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ҡурҡыуым бушҡа булған! О, мөғжизә! Бәхтиһәң, маска кейһәң, үҙеңде иркен тояһың икән дә! Шул иркенлек, бәлки, ҡыйыулыҡтыр ҙа әле, хәтергә ныҡ уйылып ҡалған. Гәзит уҡыусыларыбыҙға тәүге шыршы байрамынан ҡалған иҫтәлектәре тураһында һөйләүен һорап мөрәжәғәт иттек.**



**Сәйфулла Ғайсин:** Бына тиҙҙән яңы йыл етә. Бала саҡтағылай көтмәһәм дә, байрам алдынан хәтирәләргә биреләм, бала саҡ сағыуыраҡ төҫтә иҫкә төшә. Мәктәп йылдарында шыршы байрамына бөтә класс менән бергәләп әҙерләнә торғайныҡ. Класс етәксеһе һәр беребеҙгә шыршыны биҙәү өсөн уйынсыҡтар әҙерләргә айырым эштәр бүлеп бирә торғайны. Өйҙә апайҙарым менән ағайҙарым да ярҙамлашыр ине. Тәүге шыршы байрамына әсәйем ҡулымдан етәкләп алып барҙы. Ағастан һалынған клуб минең өсөн шул хәтлем ҙур булып тойолдо. Эсе тулы кеше, тик ни эшләптер, береһе лә өҫ кейемдәрен һалмаған. Клуб һалҡынса булғандыр, күрәһең. Ниндәй уйындар уйнатҡандары иҫтә ҡалмаған, әммә әле булһа ла күҙ алдымда, бер ағай балта тотоп килеп инде лә уйынсыҡтар эленгән шыршының төбөн саба башланы. Шыршы ҡыйшайып йығылыр-йығылмаҫтан, клубтағылар был хулиганлыҡҡа күмәкләп кәртә ҡуйҙы.

**Гөлсәсәк Тләүсина:** Үҙем Сысҡан йылында тыуғанмын, ҡыҙым - Юлбарыҫ йылында. Шуға күрә киләһе йылға битараф түгелмен, уны ҙур өмөттәр менән ҡаршы алам. Тәүге шыршы байрамы, әлбиттә, балалар баҡсаһына йөрөгән саҡта булған, әммә ул әллә ни хәтерҙә ҡалмаған. Ә бына алты йәшлегемдәге шыршы байрамын һис тә онотмайым. Унда мин Ҡарһылыу булып кейенгәйнем. Шунда ятлаған шиғырым да, хатта тиҫтерҙәрем менән бергә йырлаған йырҙар ҙа иҫтә. Ул байрамда мин үҙем өсөн ҙур асыш яһаным: шыршының уттарын ҡабындырғанда, Ҡыш бабайҙың тылсымлы таяғынан тыш, тәрбиәсенең дә ҡыҫылышы бар икән дә! Тағы ла бер уй борсой торғайны: ни өсөн Ҡарһылыу юғала һәм беҙ уны йыл да ҡотҡарырға тейешбеҙ икән?

**Рәйсә Ҡунаева:** Мине беренсе тапҡыр, дүрт йәшемдә, Сәйетбаба ауыл клубында үткән балалар шыршыһына әсәйем алып барҙы. Унда мин Шүрәленән ныҡ ҡурҡтым һәм иланым. Ә Ҡыш бабайҙан бүләккә кәнфит, шоколадтар алыу оҡшаны. Яңы йыл байрамы етә башлаһа, ҡар бөртөктәре булып кейенергә костюм әҙерләй башлай торғайным. Элек һатыуҙа яңы йыл костюмдары булмағас, үҙебеҙ шыршыға элә торған уйынсыҡтарҙың ватылғандарын сүкеш менән ваҡлап, ҡатырғаға йәбештереп, матур ғына кейемдәр әҙерләй инек.

**Мөнирә Кирәева:** Дүртенсе класта уҡығандағы шыршы байрамын тәүге тапҡыр күргән яңы йыл байрамы тип хәтерләйем. Ул байрамдың бал-маскарад тигән әйтелешен дә, унда битлектәр, костюмдар кейеп баралар икәнен дә белмәй инем әле ул саҡта. Шыршыны, ғәҙәттә, дәфтәр биттәрен буяп, ҡағыҙ уйынсыҡтар элеп биҙәй инек. Бындай эштәр байтаҡ алдан башлана, сөнки байрамға тиклем өлгәрергә кәрәк. Магазиндан һатып алынған уйынсыҡтарҙы күҙ ҡараһындай күрә инек. Эй, күҙ ҡыҙа торғайны шуларға! Байрам, ғәҙәттә, көндөҙ үтә. Музыка ҡоралдары юҡ. Шыршы тирәләй парлашып йырлап, һикерәндәп бейеп йөрөүебеҙ бөгөнгөләй хәтеремдә. Ул бейеүҙе кем өйрәткәндер? Класс бүлмәһе тар ғына, балалар күп. Етмәһә, атай-әсәйҙәр ҙә стена буйында тулып ултырғаны томанлы ғына булып хәтергә уйылған. Кис етһә, олораҡтар тире тундарының тиҫкәре яғын әйләндереп кейеп, өйбеҙенсә йөрөп, йә бейеп, йә йырлап сығырҙар ине. Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу булмағандыр, бер ҙә генә лә хәтерләмәйемсе. Ихласлыҡ булған, иң мөһиме!

**Әминә Яхина:** Беренсе класса уҡып йөрөгәндә уҡытыусы апайыбыҙ: "Тиҙҙән яңы йыл байрамын ҡаршылайбыҙ, әсәйҙәрегеҙ һеҙгә байрам кейемдәре әҙерләһен," - тине. Ысын Ҡыш бабай килеүе тураһында ла әйткәс, шатлығым эсемә һыймағандыр. Өйгә ҡайтып инеү менән: "Әсәй, беҙгә Ҡыш бабай килә, уҡытыусы миңә шиғыр ятларға ҡушты!" - тип ҡысҡырып ебәрҙем. Әсәйем Ҡарһылыу костюмын әҙерләргә булды. Атайым магазиндан төрлө төҫтәге быяла сынйырҙар алып ҡайтып, Ҡарһылыуҙың башлығын тегеп бирҙе.

Эй, түҙемһеҙләнеп көтәм байрамды! Көн дә костюмымды һәм башлығымды кейәм дә, көҙгө алдында шиғырымды ятлайым. Байрам көндө уҡытыусыбыҙ беҙҙе бейек шыршы ҡуйылған залға алып инде. Ҡыҙҙарҙың күбеһе - Ҡарһылыу. Бына бер саҡ ап-аҡтан кейенгән Ҡарһылыу килеп инде лә, ысын Ҡыш бабайҙы саҡырҙы. Тоғон күтәреп, Ҡыш бабай килеп ингәс, зал геү итеп ҡалды. Өлкәнерәк балалар шиғыр һөйләй башланы. Ҡыш бабай һәр береһенә бүләк бирә. Йүгереп барып, Ҡыш бабай эргәһенә баҫтым да: "Эй, Ҡыш бабай, Ҡыш бабай, беҙгә ҡунаҡҡа килгән," - тинем һәм туҡтап ҡалдым. Шул хәтлем тулҡынланыуҙан, ҡалған һүҙҙәрен оноттом да ҡуйҙым. Ҡыш бабай башымдан һыйпаны ла, кәнфит һәм дәфтәр тотторҙо. Ул көн миңә ысын мөғжизә булды, сөнки Ҡыш бабайҙың бурандар йырып, беҙгә байрамға килеүенә ышана инем!

Радик ӨМӨТҠУЖИН
әҙерләне.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БЕРҘӘМ БУЛАЙЫҠ!

**Йондоҙнамәгә лә, астрологтарға ла ышанмайым. Ғөмүмән, беҙҙең ғаиләлә алдан күҙаллауҙарға, күрәҙәләргә бер кем дә ышанмай.**

Хәтеремдә, мин бәләкәй саҡта атай иҫке машинаһын һатып, яңыһын алырға уйланы. Ошолай Яңы йылды көткән ваҡыт. Тәбиғәте менән атайым ҡыҙыу, әҙә һуғып эшләргә ярата. Ә әсәй оҙағыраҡ уйлай, кешеләр менән кәңәшләшә. Шулай йөрөй торғас, әсәй мине үҙе менән алды ла, ҡалалағы үҙенең зыялылығы, шулай уҡ күрәҙәлек һәләте менән дә билдәле булған бер апайға киттек. Әйҙүкләп, бик ихлас ҡаршы алды, ултырып доға ҡылғас, әсәйем борсоған һорауын бирҙе: "Иҫке машинабыҙҙы һатып, яңыһын ала алырбыҙмы икән?" Теге апайҙың яуабы әле булһа беҙҙең өйҙә лаҡап булып йөрөй: "Иҫкеһен һатһағыҙ, яңыһын алаһығыҙ", - тине ул. Шул һүҙҙе ишетер өсөн генә әллә күпме юл үтеп, ҡалаға килгәнбеҙ булып сыҡты.

Яңы йылдан һуң һәр ваҡыт бөтә нәмәгә хаҡ арта бит. Ала алмай ҡалмаһындар, тип, беҙҙең ниәтте белгән бөтә туғандар йыйылышып, аҡса биреп торҙо һәм беҙ яңы машиналы булдыҡ. Иҫкеһен һатҡас, уларға бурысты таратып бирҙек. Бына шулай. Туғандар менән берҙәм булғанда бөтә мәсьәләне хәл итеп була, икәненә инаныр йәшәй беҙҙең ғаиләбеҙ. Йырҙа йырланғанса:

*"Бергә булайыҡ, берҙәм булайыҡ,*
*Күңелдәр йырлап торһон.*
*Яңы көнгә атлағанда,*
*Уңыштар юлдаш булһын..."*

Алина ҺАТЫБАЛДИНА.
Мәләүез ҡалаһы.

ИНТЕРНЕТТАН



# ҮҘАЛЛЫ ДАУАЛАНМА!

■ Бөйөк Британияла үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, был илдә йәшәүсе һәр дүртенсе ҡатын-ҡыҙ интернет ярҙамында үҙенә диагноз ҡуя һәм үҙаллы дауалана икән. Яңылыш диагноз ҡуйыу һөҙөмтәһендә улар файҙаһы теймәгән дарыуҙар һатып ала, йыш ҡына был дарыуҙар кире һөҙөмтәгә килтерә. Ғалимдар әйтеүенсә, зыян күргәндән һуң гүзәл заттарҙы ауырыуҙан ғына түгел, үҙаллы дауаланыуҙың эҙемтәләренән дә дауаларға тура килә. Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, һәр унынсы ҡатын-ҡыҙ үҙенең сәләмәтленә ҡағылышлы проблемаларын ғаилә ағзалары менән бүлешмәй. Ә һәр егерменсе ҡатын-ҡыҙ: "Ауырыу үҙе үтер әле", - тип, медицина ярҙамында йылдан ашыу мөрәжәғәт итмәй йөрөй. Британия ҡатын-ҡыҙҙары үҙаллы дауаларға маташҡан иң йыш осраған билдәләргә йоҡо боҙолоуы, баш ауыртыуы, депрессия, мускулдар ауыртыуы, арыу инә.

■ Күптәр "ҡоро күҙ" синдромы менән яфалана. Был сир ваҡытында күҙҙәр әсетә, яҡтыға ҡарап булмай, тиҙ арый. Токио университетының медицина мәктәбе тикшеренеүселәре уны ҡәһүә ярҙамында дауаларға тәҡдим итә. Билдәле булыуынса, кофеин төкөрөк һәм ашҡаҙан һуттары бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, ул шулай уҡ күҙ йәше биҙе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Был мәғлүмәтте Япония ғалимдары 78 оло кешелә тикшереп ҡараған. Уларҙың береһе лә "ҡоро күҙ" синдромы, глаукома һәм башҡа күҙ ауырыуҙары менән ауырымаған. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, кофеин был ауырыуҙарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Глазго университеты ғалимдары популяр эсемлектәргә анализ үткәргән. Асыҡланыуынса, уларҙың күбеһендә шәкәр күләме норманан юғарыраҡ. 2005 кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, күптәр татлы газлы эсемлектәрҙә шәкәр күплеген белһә лә, һөт һәм башҡа коктейлдәрҙә, энергетик эсемлектәрҙә һәм емеш-еләк һуттарында шәкәрҙең шулай уҡ юғары күләмдә булыуын бөтөнләй белмәй. Мәҫәлән, барыһы ла файҙалы тип иҫәпләгән анар (гранат) һутында шоколадлы һөт коктейленә йәки емеш-еләк һутына ҡарағанда шәкәр 1,5 тапҡырға артығыраҡ. Һуңғы осорҙа һимереү сиренең артыуы тап шәкәрле эсемлектәр ҡулланыу менән бәйле, ти ғалимдар. Был ҡан баҫымының күтәрелеүенә, шәкәр диабетына, йөрәк сирҙәренә, инсультҡа килтерә.

■ Буффало һәм Калифорния университеттары тикшеренеүселәре иҫәпләүенсә, ҡайһы бер кешеләрҙең башҡаларға ҡарағанда йомартыраҡ һәм игелеклерәк булыуында уларҙың гендары "ғәйепле". Ғалимдар ике гормон: "бәхет гормоны" - окситоцин һәм агрессияны яйлаусы вазопрессин кимәлен тикшереп ҡараған. Кемдә был ике гормон юғарыраҡ, улар ҡағиҙә буларак, бик йомарт һәм киң күңелле була. Шулай итеп, агрессияны, һаранлыҡты, тиҙ ҡыҙып барыусанлыҡты кешенең ДНК үҙенсәлегенә һылтарға мөмкин, ти ғалимдар.

■ Ҡала ығы-зығыһы, юлдарҙағы тығындар, йәмәғәт транспортындағы халыҡ, эштәге стресс һәр кемдең нервыларын ҡаҡшатыу һәләтенә эйә. Әгәр ҙә эшкә һәләтлелегеҙ кәмеһә, йоҡлай алмаһағыҙ, күңелегеҙҙе хәүеф тойғоһо биләп алһа, спорт менән шөғөлләнә башлағыҙ, тип кәңәш итә табиптар. Шулай уҡ башҡа төрлө физик әүҙемлек тә шатлыҡ һәм бәхет гормондары - эндорфиндарҙың кимәле күтәрелеүгә килтерә. Бынан һуң шунда уҡ кәйефегеҙ күтәреләсәк, насар уйҙар шунда уҡ тараласаҡ.

ЫШАНҺАҢ - ЫШАН

# БАРЫҪ НИҘӘР ВӘҒӘҘӘЛӘЙ?



**Көнсығыш йондоҙнамәһенә ярашлы, 2022 йыл беҙгә ниҙәр алып килер? Маҡсатлы һәм маҡсатына ирешеүсәндәр мотлаҡ уңышҡа өлгәшәсәк, тиелә. Шулай ҙа ҡыҫҡаса ғына һәр йондоҙлоҡҡа айырым туҡталып китәйек:**

***Сысҡан.*** Сысҡан йылында тыуғандар өсөн 2022 йыл юл йөрөүҙәргә һәм сәйәхәттәргә бай булмаҡсы. Эш урынын алмаштырыу йәки яңы бинаға күсенеүегеҙ мөмкин. Романтика өлкәһендә бик күп ҡыҙыҡлы танышлыҡтар буласаҡ. Яҙмыш бик күп ыңғай мөмкинлектәр биреп торор, әммә маҡсатҡа өлгәшеү өсөн үҙегеҙ ҙә көс һалырға онотмағыҙ.

***Үгеҙ.*** Йыл дауамында үҙ оҫталығығыҙҙан шикләнерһегеҙ. Үгеҙ бик төплө уйлап эш итә, ә йыл энергияһы тәүәккәл һәм энергиялы кешеләрҙе яҡлай. Шулай ҙа оҙаҡ ҡына аҙаҡҡыға ҡалдырып килгән бер нисә эшегеҙҙе хәл итә алырһығыҙ. Эш һәм карьера өлкәһендә лә уңыштар көтә, вазифағыҙ үрләүе мөмкин. Ҡараштарығыҙҙы киңәйтегеҙ, үҫешкә иғтибар бүлегеҙ. Шәхси тормошта ла барыһы ла ыңғай буласаҡ.

***Барыҫ.*** Йыл, һис шикһеҙ, һеҙҙең өсөн уңышлы уҙасаҡ. Барыҫтар яңы маҡсаттарға ынтыласаҡ һәм үҙе тирәләй ысынбарлыҡты үҙгәртергә ынтыласаҡ. Йылдың тәүге яртыһында бизнесығыҙҙы үҫтереүгә иғтибар бүлегеҙ, шул осраҡта июлдән алып тырышлығығыҙ үҙ емештәрен бирә башлар. Йыл барлыҡ башланғыстарығыҙға ярҙам итәсәк.

***Ҡуян.*** Йыл уңышлы ғына булмаҡсы, сөнки Барыҫ һәм Ҡуяндың уртаҡ көсө бар - ағас. Шулай ҙа Ҡуян йылында тыуғандарға пландарына иғтибарлы булырға кәңәш ителә, юғиһә, ҡайһы берҙәре бойомға ашмауы ла бар. Эштә лә тырышырға, ең һыҙғанып эшләргә кәрәк - бының ыңғай һөҙөмәһе оҙаҡ көттөрмәҫ.

***Аждаһа.*** Ул йыл хужаһы Барыҫ кеүек сағыу һәм көслө. Был уға йылды үтә лә уңышлы уҙғарырға булышлыҡ итәсәк. Иң мөһиме - барыһын да алдан уйлап хәл итеү, ҡабалан ҡарарҙар ҡабул итмәү. Маҡсатығыҙға табан барығыҙ. 2022 йылда яңы кешеләр менән танышыуҙар күп булыр. Бизнеста яңы перспективалар асылыр. Тормошоғоҙҙо күптән үҙгәртергә теләһәгеҙ, мөмкинлектәр тыуыр.

***Йылан.*** Йыл шәхси тормошта бик күп мөмкинлектәр килтерер. Бик күп кешеләр һеҙгә ғашиҡ булыр һәм романтик тәҡдимдәр ҙә яһар. Эш икенсе планға күсер. Йылан Барыҫ менән бик яҡшы мөнәсәбәттә түгел. Әммә был уның өсөн насар булыр, тигәнде аңлатмай. Ни бары килгән энергияларға ваҡытында яйланып өлгөрөү кәрәк.

***Йылҡы.*** 2022 йыл һеҙҙең өсөн энергиялы һәм актив булмаҡсы. Парһыҙҙарға тормош иптәшен осратыу өсөн мөмкинлектәр күп буласаҡ һәм ғаилә ҡорорға тәҡдимдәр ҙә ишетерһегеҙ. Эштә ниндәйҙер ҡатмарлыҡтар килеп тыуыуы мөмкин, әммә Йылҡының дипломаттарса һөйләшеү оҫталығы хәлде үҙ файҙаһына борорға ярҙам итәсәк.

***Ҡуй.*** Комфорт зонаһын киңәйтеү - Ҡуй өсөн киләһе 2022 йылға иң төп өҫтөнлөктәрҙең береһе. Тормошоғоҙҙо үҙгәртергә теләһәгеҙ, барлыҡ ҡыйыулығығыҙҙы туплап, эшкә тотонорға ваҡыт. Яңылыҡҡа ынтылығыҙ. Килеп тыуған ҡатмарлы хәлдәрҙән сығыу юлын таба алаһығыҙ. 2022 йылда тормошоғоҙҙоң яңы битен асырһығыҙ, әммә теләк кенә кәрәк.

***Маймыл.*** Йылдың тәүге яртыһында теләктәрегеҙҙе бойомға ашырғанда ҡаршылыҡтарға осрауығыҙ бар. Сәбәләнеүҙәр, ваҡ конфликттар көс һәм ваҡытығыҙҙы алыр. Әммә эш урынын ҡыҙыҡлыраҡ һәм аҡсалырағына алмаштырыу мөмкинлеге бар. Йылдың икенсе яртыһында килемегеҙ артырға мөмкин. Шәхси эшегеҙҙе асыу өсөн яңы мөмкинлектәр тыуыр.

***Әтәс.*** 2022 йылда етәкселек, коллегалар һәм туғандар менән араларҙы боҙмаҫ өсөн алтын урталыҡ табырға, дипломат булырға тырышығыҙ. Киләһе йыл карьера һәм белем алыуҙа яҡшылыҡтар алып килер. Яҡты киләсәк тураһында хыялланыу түгел, ә уға ирешеү өсөн аныҡ эштәр атҡарыу кәрәк. Шәхси тормошоғоҙҙа ыңғай яңылыҡтар, мөхәббәт вәғәҙә итә.

***Эт.*** Йыл уғата уңышлы булмаҡсы. Яңғыҙҙар һөйгәнен осратыр һәм ғаилә ҡорор. Йәшәгән урынығыҙҙы алмаштырыу йәки үҙ торлағығыҙға күсенеү мөмкинлеге бар. Карьера өлкәһендә шәхси байлығығыҙ артыр һәм яңы белем алырһығыҙ. Төп кәңәш - актив булығыҙ, үҙ идеяларығыҙҙы алға һөрөгөҙ һәм хеҙмәтегеҙ лайыҡлы баһаланыр.

***Ҡабан.*** 2022 йыл ваҡиғаларға бай булыр. Был үҙ тормошоңа яңы күҙлектән баҡыу, өҫтөнлөктәрҙе яңынан билдәләү өсөн уңай осор. Шәхси үҫешкә иғтибарҙы күп бүлегеҙ, хис-тойғоларығыҙҙы контролдә тоторға өйрәнегеҙ - был бихисап ыңғай үҙгәрештәр килтерер. Мөхәббәт өлкәһе йәй башында активлашыр. Эштә үҙ тырышлығығыҙ һәм тәжрибәле хеҙмәттәштәрегеҙ ярҙамында уңышҡа өлгәшерһегеҙ.

**Ниҙәр генә вәғәҙәләмәһен йондоҙлоҡтар, барыһы ла үҙ ҡулыңда булыуын һәм киләсәгеңде үҙең генә төҙөүеңде хәтерҙән ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Тырыш, маҡсатлы, уңған һәм ынтылышлы һәр кемгә Барыҫ ҡына түгел, бар Ғаләм ярҙам итергә әҙер торалыр.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ОПТИМИСТ БУЛАЙЫҠ!

Киләһе йыл - минең йылым. Ғәҙәттә, йондоҙнамәләр йыл хужаларына мәрхәмәтлерәк, шәфҡәтлерәк тормош юрай. Йәш саҡта, ысынлап та, астрологтарҙың фараздарына, һынамыштарға, күрәҙәселәргә ныҡ ышана инем. Ырымбурҙа йәшәгәндә гәзит-журнал һатылған киоскыларға алдан уҡ "Оракул" журналына заказ биреп ҡуя торғайным, сөнки төрлө юрамыштарға ышанған мин генә түгел инем. Туҡһанынсы йылдарҙа йылың түгел, иртәгәһе көнөң ниндәй булыры билдәһеҙ ине бит. Бына шул осорҙа йондоҙнамә менән ныҡлап ҡыҙыҡһындым. Ярай ҙа астрологтар миһырбанлы булды. Улар бөтәһенә лә бик матур киләсәк юраны: быйыл төшөмлө эш табаһың, фатирыңды яңыртаһың, сит илгә сәйәхәткә сығаһың, һаулығыңды нығытаһың, балаларың ҡыуандырыр һәм башҡалар. Һәм шуныһына иғтибар итә торғайным. Вәғәҙә иткән бәхетле минуттарҙың барыһы ла йылдың икенсе яртыһына йәки йыл аҙағына тура килә ине.

Билдәле инде, минең кеүек йондоҙнамәгә ышанғандар бөгөнгө проблемаларҙы йырып сығырына өмөтләнде. Бына ошо өмөт күптәрҙе ҡайһы бер һәләкәттән ҡотҡарҙы ла инде. Бының менән нимә әйтергә теләйем: оптимист булайыҡ, дуҫтар! Беҙҙең ыңғай кисерештәребеҙ, уйҙарыбыҙ, яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа ынтылыуыбыҙ иҫ киткес көскә эйә бит ул. Был тормошта хәл ителмәй торған бер ниндәй проблема ла юҡ. Әлбиттә, ҡайһы бер психологтар "тик үҙегеҙҙе генә уйлағыҙ" тип тәкрарларға ятатһа ла, беҙҙең бәхетле булыуыбыҙ эргәләге кешеләргә лә, яҡындарыбыҙға, уларҙың ырыҫлылығына, сәләмәтлегенә, йәшәйешенә лә туранан-тура бәйле. Әммә уларға ҡағылышлы көнитмешебеҙҙе үҙгәртә алмаһаҡ, мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртә алабыҙ бит.

Ошо йәшкә еткәс кенә шуны аңланым: тормошомда күп нәмәне мин үҙем ҡатмарлаштырғанмын. Улай ярамай, былай ярамай, кеше нимә тип әйтер, ни уйлар тигән ҡурҡыу-шиктәр мине оҙаҡ йылдар бәхетһеҙ булырға мәжбүр иткән. Хәҙер мин йондоҙнамә уҡымайым. Бер ниндәй астролог та, күрәҙәсе лә Аллаһы Тәғәләнән уҙып, бер нимә лә әйтә алмай. Барыһы ла Хаҡ Тәғәлә ҡулында. Ғүмеребеҙ ҙә, үлемебеҙ ҙә. Ошо хәҡиҡәтте аңлағас, мине артҡа тартҡан кире уйҙар урап үтә.

**Мәймүнә ҠАДИРОВА.**
**Ейәнсура районы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҺҮГЕНМӘЙЕК!

**Донъяны һүгенеү, насар һүҙҙәр баҫып алғандай тойола ҡайһы саҡта, сөнки уларҙы төрлө урында һәм төрлө кешенән ишетергә мөмкин. Ололар, йәштәр, гүзәл заттар, хатта телдәре саҡ асылып килгән балалар ауыҙынан да ошондай "матур һәм ягымлы" һүҙҙәр осоп сығыуына күнегеп тә кителгән хатта. Бындай һүҙ ҡулланыусы оло кеше үҙенең ғүмер юлында ниндәй "аҡылға" өйрәнгәнен иҫбатлаһа, йәштәр үҙҙәрен замандан артта ҡалмаусы, "модалы" итеп күрһәтергә тырыша, балаларға, ҡыҙыҡ күреп, ололар өйрәтә. Ләкин был, ысынлап та, ҡыҙыҡмы? Ҡыҙғаныс, тип әйтеү дөрөҫөрәктер, сөнки баланың был ҡыланышы аша уны уратып алған ололарҙың аң кимәле түбән, һүҙ запасының ярлы һәм уйлаған уйҙарының ошо юҫыктан ары китмәүен тойомларға була. Элегерәк һүгенеү һүҙҙәре нык асыуланғанда ғына әйтелә, тигән уй-фекер бөгөнгө көнгә һис тә тура килмәй, сөнки был һүҙҙәр хәҙер ҡайһы берәүҙәр тарафынан һөйләмде бер-береһенә ҡушыу өсөн дә ҡулланыла. Һүгенеүһеҙ йәшәп буламы? Бындай һүҙҙәр ҡулланыу ниндәй эҙемтәләргә килтерергә мөмкин? Уны еңеү өсөн нимә эшләргә кәрәк? Һүҙҙе гәзит уҡыусыларға бирәйек.**

**Рәмил Ҡолошов:** Кешегә Хоҙай тарафынан бөйөк "ҡорал" - һүҙ бирелгән. Беҙ нәҡ һүҙ ярҙамында аҡыл һәм ғилемгә эйә булабыҙ, тирә-яҡтағылар менән мөнәсәбәт ҡорабыҙ. Тик матур, ягымлы һүҙҙәр менән бер рәттән, насар һүгенеү һүҙҙәренең дә йыш ҡулланылыуы хәүефкә һала, сөнки иҫбат ителеүенсә, бындай һүҙҙәр кешегә ДНК кимәлендә тәьҫир итеп, энергетиканы бысратыуҫы булып тора. Бындай һүҙҙәр ярҙамында беҙ тирә-яҡҡа бысраҡ, яуыз һәм уҫал энергия сәсәбеҙ, ә ул беҙгә төрлө бәлә, ауыр мәсьәлә һәм проблема рәүешендә кире әйләнеп ҡайта. Шуға күрә, һәр һүҙебеҙҙе уйлап, үлсәп, һүгенеү һүҙҙәрен ҡыҫтырмайынса һөйләшәйек.

**Зөфәр Исмәғилев:** Башҡорт теле - матур, ягымлы, тос, бай тел һәм уны ниндәйҙер һүгенеү һүҙе менән бысратыу, минеңсә, милләтеңдең йөҙөнә төкөрөү менән бер. Үҙен, халҡын ихтирам иткән кеше бер ҡасан да бындай түбәнселеккә төшмәйәсәк һәм бындай һүҙҙәр һөйләмәйәсәк. Өйҙә ниндәй мөхит хөкөм һөргәнен балалар теләнән яҡшы аңлап була. Әгәр ҙә ололар әшәке һүҙ һөйләп, негатив мөхит тыуҙыра икән, бала ла тап ошоно уҡ ҡабатлаясаҡ һәм шулай уҡ ҡыланасаҡ. Бар тәрбиәне бер насар һүҙ менән юйып ташларға мөмкин булыуын онотмай, балаларыбыҙҙы позитив, шатлыҡ һәм нур бөркөләп торған мөхиттә тәрбиәләйек.

**Сәлим Хәйретдинов:** Төрлө социологик һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, Рәсәйҙә халыҡтың 70 проценты һүгенеү һүҙҙәрен ҡуллана, ләкин уларҙың күбеһе был һүҙҙәрҙе "үҙенән-үҙе телдән сыҡҡан" һүҙбәйләнеш булараҡ ҡына аңлата. Тик күптәр ул һүҙҙәрҙең тамыры тәрәндә һәм кемгәлер ҡарата әйтелгән һүгенеү һүҙе уны ҡарғау, ҡайһылыр осраҡта сихырлау, арбауға ҡайтып ҡалыуын аңламай. Элекке заманда ҡатын-ҡыҙға, ауырлы ҡатынға йәки балаға ҡарата һүгенеү һүҙе ҡулланыу оло гонаһ һаналған. Бындай һүҙҙе өйҙә йәки мал аҙбарында әйтеү ҙә ҡырҡа тыйылған, сөнки был ҙур ҡаза килтереүе мөмкин, тип һаналған. Ә бөгөн нисек? Өйҙә, тышта, кеше араһында, ҡатын-ҡыҙға, балаға - берәү ҙә ҡарап тормай, телен тыймай. Был күренеш, ҡыҙғаныҫҡа күрә, тәбиғигә әүрелеп бара. Бығa юл ҡуймайыҡ, матур һәм сағыу төҫтәргә мансылған донъяны ҡараңғылыҡ мөһөрө менән ҡаплауҙан һаҡлайыҡ.

**Гөлназ САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!



## "Яңы йыл менән!" турамаһы

**100 грамм бәшмәк, 2 һуған, 1 ҙур кишер, 2 ҡалаҡ дөгө, 1 "Магги" шаҡмағы, 100 грамм краб таяҡсалары, 3-4 бешкән йомортҡа, майонез кәрәк.**

Тураманы һәр ҡатына майонез һөртөп, ҡатлап яһарға: һалам кеүек туралған һәм майҙа ҡыҙҙырылған бәшмәк, ваҡ ҡына итеп туралған һуған, ҡырғыстан үткәрелгән һәм ҡыҙҙырылған кишер, "Магги" шаҡмағы һалынған һыуҙа бешкән дөгө, һалам кеүек туралған краб таяҡсалары, эре ҡырғыстан үткәрелгән йомортҡа. Турама өҫтөнә майонез һылап, йәшел тәмләткестәр һәм йәшелсәләрҙән яһалған фигуралар менән биҙәргә.

## "Яңы йыл төнө" турамаһы

**200 грамм тауыҡ ите, 200 грамм алма, 200 грамм картуф, 50 грамм әстерхан сәтләүеге, 4 өлөш һарымһаҡ, 100 грамм майонез, 50 грамм ҡаймаҡ, тоҙ, петрушка кәрәк.**

Тауыҡ итен, алманы, картуфты, петрушканы ваҡлап турарға, сәтләүек менән һарымһаҡты иҙергә. Бөтәһен бергә ҡушып болғатырға.

## Еңел салат

**200 грамм груша, 150 грамм персик, 1 лимон, 100 грамм әстерхан сәтләүеге, шәкәр кәрәк.**

Йыуылған һәм һөйәге алынған еләк-емештәрҙе (лимонды тышы менән) шаҡмаҡлап турарға һәм бөтәһен бергә болғатырға, өҫтөнә сәтләүек һәм шәкәр һибергә.

## "Әлиә" турамаһы

**200 грамм кишер, 150 грамм алма, 2 ҡалаҡ майҙа ҡыҙҙырылған һоло ярмаһы, 4 ҡалаҡ ҡуйыртылған һөт кәрәгер.**

Алманы, кишерҙе уртаса ҡырғыстан үткәрергә, ҡыҙҙырылған һоло ярмаһы һалып болғатырға һәм өҫтөнә ҡуйыртылған һөт ағыҙырға.

## Дөгө менән ҡыҙҙырылған тауыҡ ите

**4-6 стакан бешкән дөгө, 1 стакан тауыҡ ите, 1 татлы борос, 2 баш һуған, 1 йомортҡа, тәменсә соя соусы, ҡара борос, май кәрәк.**

Тауыҡ итен тиреһенән айырып, уртаса ҙурлыҡтағы киҫәктәргә турарға һәм һуған, тәмләткестәр менән ҡыҙҙырырға, йомортҡаны ҡушып болғатырға, шунан дөгө өҫтәргә. Соя соусын өҫтәй-өҫтәй, дөгө ҡараһыу төҫкә ингәнсе талғын утта тоторға. Табынға ҡайнар килеш бирергә.

## Һөтлө-ярмалы аш

**0,75 стакан арпа ярмаһы, 4-5 картуф, 1,5 л һөт, 1 ҡалаҡ май, 0,75 л һыу кәрәк булыр.**

Ярманы яртылаш әҙер булғансы һыуҙа бешерергә, картуфты һалып, әҙер булғансы ҡайнатырға, һөттө өҫтәп, ҡайнатып сығарырға, тоҙ һалып, май менән тәмләтергә.

## Көндәлек ябай турама

**100 грамм бешкән балыҡ, 200 грамм картуф, 4 йомортҡа, 2 баш һуған, тоҙ, борос, 250 грамм майонез, 2 ҡалаҡ аҡ май, 100 грамм йәшел борсаҡ кәрәк.**

Һөйәгенән айырған балыҡ итен ваҡлап турарға. Бешкән картуфты шаҡмаҡлап, йомортҡа ағын түнәрәкләп, һарыһын ваҡлап турарға. Һуғанды түнәрәкләп турарға һәм алтынһыу төҫкә ингәнсе майҙа ҡыҙҙырырға. Йәшел борсаҡ, тоҙ, борос, майонез өҫтәп, тураманы болғатырға, йәшел салат япраҡтары менән биҙәп, өҫтәлгә ҡуйырға.

## Анһат ҡоймаҡ

**150 грамм он, 60 грамм шәкәр, 1 балғалаҡ сода, 1 йомортҡа, 170 мл һөт, бешерер өсөн үҫемлек майы кәрәк. Кеше күп булһа, ризыҡ күләмдәрен арттыраһың.**

Барлыҡ аҙыҡтарҙы бергә ҡушып болғатырға. Ҡамырҙы 2 сәғәткә ултыртып торғас, табаны майларға һәм ҡамырҙы ҡыҙған табаға ҡалаҡлап ҡойорға.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Тормошоғоҙға яҡтылыҡ индерегеҙ

Көндәлек тормошоғоҙҙа тойған үҙгәреш шунан ғибәрәт: һеҙ кешеләргә, хайуандарға йылыраҡ мөнәсәбәттә булаҫаҡһығыҙ. Әгәр быға тиклем үрмәкселәргә ҡарата ерәнеү тойғоһо кисерһәгеҙ, ҡапыл был хистең кәмеүен һиҙерһегеҙ. Әгәр әлегәсә эттәрҙән ҡурҡһағыҙ, уларға ягымлыраҡ була башлаһығыҙ. Хатта бығаса башҡалар һыу ҡойған гөлдәрҙе тәрбиәләргә тотоноуығыҙ ҙа ихтимал. Быларҙың барыһы ла һеҙҙең Илаһҡа яҡынайыуығыҙҙы, тормоштоң берлеген яҡшыраҡ аңлай башлауығыҙҙы раҫлай.

Бынан бик күп йылдар элек хайуандарҙы өйрәтеүсе Дж. Аллан Бун Голливуд өсөн дрессировкаланған йәнлектәр әҙерләүен үҙенең китабында бәйән итә. Стронгхарт атамалы эттән ул үҙе теләгән һөҙөмтәне бер нисек тә ала алмай. Эт бер нәмә лә өйрәнергә теләмәй. Бында уның насар уҡыусы булыуы роль уйнамай, ул бары тик өйрәнергә теләмәй, үҙенә күрә бойондороҡһоҙ була. Бер ваҡыт кисен Бун үләнле түбәләскә ултырып, ҡояш байығанын күҙәтә. Эргәһендә бәйле торған Стронгхарт та була. Ҡапыл ул эттең дә ҡояш байыуына иҫе китеп ҡарағанын күрә. Уның эткә ҡарата булған асыуы бер аҙ һүрелә. Матурлыҡты күрә белгән эт насар була алмай, тип уйлай ул. Икенсе көнөнә Стронгхартты алыштырып ҡуяларммы ни! Ул нимә ҡушалар, шуны үтәй. Йүнһеҙ эттән ул иң яҡшы уҡыусыға әүерелә. Бун аптырашта ҡала. Эткә нимә булған һуң? Уйлай торғас, ул шундай фекергә килә: эт менән бергә ҡояш байыуын күҙәтеп, ул хайуанды ғәфү итә, уның менән берҙәмлек тойғоһо уяна.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Бун тауҙарға - индеецтар эргәһенә бара. Улар ҡырағай аттарҙы менгегә өйрәтә белгән була. Бун бер индеецтың нисек итеп башын эйеп, ат эргәһенә барыуын күҙәтә. Уның аптырауына күрә, ат индеецҡа һыртына ултырырға һәм менеп йөрөргә рөхсәт итә. Индеец кире килгәс, Бун унан баш эйеүҙең нимә аңлатҡанын һорай. "Мин атты күҙ алдыма килтерҙем, уны бер туған ағайымдай яраткан кеүек яраттым, унан менеп йөрөргә рөхсәт һораным", - ти. Тиҙҙән Бун үҙе лә был тәжрибәне ҡабатлай.

Артабан Бун йыландарға осрай, әммә уларға ерәнеп, ҡурҡып түгел, ә яратып ҡарай һәм улар уға юл бирә.

Өйҙә, ҡырынған ваҡытта бер себен маҙаһына тейә, һәм Бун унан тәҙрә тупһаһына ултырыуын һорай. Себен уның ҡушыуын үтәй. Хәҙер инде ул себен менән дә уртаҡ тел таба. Ул уны тотоп ҡарай ала һәм уға Фредди тип исем ҡуша. Себен йорттоң бер ағзаһына әүерелә.

Бун: "Үҙемде Йыһан Аңы тип тойоу енелләште... Беҙ - ҙур йыһан оркестрының ағзалары. Ә унда көй матур яңғыраһын өсөн һәр инструменттың булыуы һәм гармониялы яңғырауы кәрәк", - тип яҙа.

Быларҙан һуң Бун ҡараңғылыҡтағы кешегә оҡшағанмы? Стронгхарт менән булған осраҡтан һуң ул оло асышҡа юлыға. Ә тиҙҙән эт Голливуд йондоҙона әүерелә.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 27 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Сваты". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Х/ф "Дед Мороз всегда звонит... трижды". [16+]
4.00 Т/с "Байки Митяя". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Фильм-сказка "Радость сильнее". [6+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 17.00, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Фильм-сказка "Сладкая сказка". [6+]**
**17.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Крылья. [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ваш репититор". [16+]**
**2.45 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**

## 28 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Сваты". [12+]
22.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Х/ф "Снег на голову". [16+]
4.00 Т/с "Байки Митяя". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Фильм-сказка "Карйондоз". [6+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Фильм-сказка "Сулпан". [0+]**
**17.30 Вечерний телецентр. Итоги года.**
**19.00 Итоговое интервью с Главой Республики Башкортостан Радием Хабировым.**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Праздник взаперти". [16+]**
**2.45 Спектакль "Зятек". [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 29 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Сваты". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Х/ф "Снегурочка для взрослого сына". [12+]
4.00 Т/с "Байки Митяя". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Фильм-сказка "Ҡамыр батыр". [6+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Фильм-сказка "Боронзаман илендә". [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.20 Хоккей. "Барыс" (Нур-Султан) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.00, 5.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Тамга". Финал II Международного конкурса мастеров башкирского национального костюма. [12+]**
**0.00 Х/ф "Убить вечер". [12+]**
**3.00 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]**
**4.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 30 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 "Утро России".
9.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Фермерша". [12+]
15.25 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [6+]
17.15 Привет, Андрей! [12+]
21.20 Т/с "Сваты". [12+]
0.25 Х/ф "Покупай". [18+]
0.40 Х/ф "Управдомша". [12+]
4.05 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Фильм-сказка "Волшебный хвостик". [6+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Праздник пера. [6+]**
**15.45 "МузКәрәҙ". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Байтус. Новогодний "Маскарад". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр. Итоги года.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Честно говоря". [12+]**
**22.30 Итоги года (на баш. яз).**
**23.30 "Ете егет". [12+]**
**0.15 Х/ф "Посылка с Марса". [12+]**
**3.30 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 31 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

4.30 Х/ф "Доярка из Хацапетовки". [12+]
7.40 Х/ф "Операция "Ы" и другие приключения Шурика". [6+]
9.20 Х/ф "Девчата". [0+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.30 "Короли смеха". [16+]
13.50 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
15.35 Х/ф "Ирония судьбы, или С лёгким паром!" [0+]
18.50 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
20.35 Х/ф "Джентльмены удачи". [6+]
22.05 "Новогодний парад звёзд".
23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина.
0.00 Новогодний голубой огонёк-2022.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 Х/ф "Знакомые незнакомцы". [12+]**
**10.00 Күстәнәс. [12+]**
**10.30 "Йома". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.30 Новогодний звон "Сулпылар-2021". [0+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**14.30 Ретро-концерт. [12+]**
**15.30 "Яны йыл-караоке". [12+]**
**16.00 "Бал джигитов-2021". Финал проекта "Ете егет". [12+]**
**18.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 Итоги года (на рус. яз).**
**20.00 Новый год на БСТ. [12+]**
**23.50 Новогоднее поздравление Главы Республики Башкортостан Радия Хабирова. [0+]**
**23.55 Новогоднее обращение Президента Российской Федерации В.В. Путина. [0+]**
**0.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**3.15 Х/ф "Новогодний пассажир". [12+]**
**5.30 "Новогодние маршруты". Огонек. [12+]**

## 1 ЯНВАРЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

4.20 Х/ф "Ирония судьбы, или С лёгким паром!" [0+]
7.40 Х/ф "Девчата". [0+]
9.20 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
11.10 Х/ф "Джентльмены удачи". [6+]
12.40 Х/ф "Бриллиантовая рука". [0+]
14.20 "Песня года".
16.15 "Юмор года". [16+]
18.35 Х/ф "Одесский пароход". [12+]
20.00 Вести.
21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Х/ф "Последний богатырь: Корень Зла". [6+]
23.35 Х/ф "Вратарь Галактики". [6+]
1.40 Х/ф "Новогодний экспресс". [12+]
5.04 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С Новым 2022 годом!". Концерт. [12+]**
**8.00 Күстәнәс. [12+]**
**8.30 Х/ф "Знакомые незнакомцы". [12+]**
**11.00 "Снежная гора новостей". [6+]**
**11.15 М/ф "Пчелка Майя и Кубок меда". [0+]**
**12.45 Фильм-сказка "Ҡускар". [0+]**
**13.30 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Яны йыл-караоке". [12+]**
**16.45 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**20.00 "Дело не в самоваре". [6+]**
**20.45 "Байыҡ-2021". Гала-концерт. [12+]**
**0.00, 3.15 Х/ф "До Нового года осталось..." [12+]**
**1.30 "Весело живем". [12+]**
**4.45 Х/ф "Кто украл зиму?" [12+]**

## 2 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.05 Т/с "Голубка". [16+]
7.05 Т/с "Чёрная кровь". [12+]
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Галина". [12+]
15.20 "Песня года".
17.25 "Юмор года". [16+]
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Последний богатырь". [12+]
23.15 Х/ф "Последний богатырь: Корень Зла". [6+]
1.25 Т/с "Челночницы". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Зимние мелодии". Концерт. [12+]**
**8.00 "Йома". [0+]**
**8.30 Х/ф "Знакомые незнакомцы". [12+]**
**10.15 Фильм-сказка "Умырзая". [0+]**
**11.00 "Снежная гора новостей". [6+]**
**11.15 "Елкән". [0+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**14.30 "Здравствуй, Маэстро!". Концерт композитора, заслуженного деятеля искусств БАССР, народного артиста РБ, почетного гражданина г. Уфы Рима Хасанова. [12+]**
**17.00 Новый год на БСТ. [12+]**
**20.30 Т/с "Ышан". [12+]**
**21.30 "Башҡорт йыры-2020". [12+]**
**0.00, 3.45 Х/ф "Как встретить праздник не по-детски". [16+]**
**1.30 Спектакль "Морозное дыхание метели". [12+]**
**5.15 Х/ф "Ургала". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**28 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**"Мин - Марат"** (У. Ғәлиев), провинциаль проза. 16+

**29 декабрь "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**2 ғинуар "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 12.00 6+

**"Әҙләнем, бәғрем, һине"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 декабрь "Синяя птица"** (М. Метерлинк), әкиәт. 10.00, 13.00, 16.00 6+

**"Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00, 13.30, 15.00 3+

**28-29 декабрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 10.00, 13.00 0+

**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.30, 15.00 0+

**Премьера! "Кыш бабай и Дед мороз"** театрлаштырылған тамаша. 18.00 12+

**30 декабрь "Кыш бабай и Дед мороз"** театрлаштырылған тамаша. 14.00, 16.00, 18.00 12+

**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 12.00, 15.00 0+

**2 ғинуар "Щелкунчик"** (Н. Соболева), әкиәт.12.00, 15.00, 17.00 0+

**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 11.30, 13.30, 15.30 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**31 декабрь "Морозко"** (М. Шуринова). 11.00 0+

**2 ғинуар "Морозко"** (М. Шуринова). 11.00, 14.00, 17.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**27, 28, 29, 30 декабрь "Главный Новогодний утренник Уфы"** ғаилә өсөн тамаша. 11.00, 13.00 0+

**28 декабрь "Европала Раштыуа"** концерт. 6+

**29-30 декабрь Премьера! "Щелкунчик. История о счастье"** Яңы йыл фантазияһы. 0+

**2 ғинуар "Главный Новогодний утренник Уфы"** ғаилә өсөн тамаша. 12.00, 14.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**27-30 декабрь "Буль-буль-буль"ный Новый год или волшебный посох Деда Мороза"**, әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

**20-29 декабрь** Йылайыр, Хәйбулла, Ейәнсура районларында гастролдәрҙә **"Нарру Яңы йыл в сказочном царстве"**, әкиәт. 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27-29 декабрь Премьера! "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Нигматуллина), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

**30 декабрь "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Нигматуллина), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (23) дүшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 28 (24) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 29 (25) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 30 (26) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 31 (27) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 1 (1) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 2 (2) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

### БЕР АҘ АРТҠАН...

**2021 йылдың 1 октябренә Башҡортостанда пенсияның уртаса күләме яҡынса 15 354 һум тәшкил иткән, былтыр иһә 14 535 һум булған, тип белдерҙе республика статистиктары.** Ошо ваҡыт эсендә республикала пенсионерҙар 1,185 миллиондан 1,155 миллион кешегә тиклем кәмегән. Башҡортостанда хаҡлы ялдағыларҙың күпселегенә йәки яҡынса 1,057 миллион кешегә страховка пенсияһы түләнә. Быйыл 1 октябргә уның уртаса күләме 15 797 һум булған. Был 2020 йылдың октябренә ҡарағанда 878 һумға күберәк. Дәүләт пенсия тәьминәте буйынса пенсия алыусылар күпкә аҙыраҡ - 98,3 меңдән ашыу. Октябрҙә уларға уртаса 10 590 һум түләнгән, тип белдерҙеләр Башстатта.

### БАЛАЛАРҒА ТҮЛӘҮ...

**2020 йылда Президент указы менән өс йәштән ете йәшкәсә балаларға айлыҡ түләүҙәр индерелде.** Уларҙы аҙ килемле ғаиләләр ала. Һуңынан дәүләт башлығы адреслы ярҙам күрһәтергә ҡушты. Шуға бәйле 2021 йылда аҡса түләү ҡағиҙәләре камиллаштырылды. Хәҙер иһә ғаиләләге хәлгә ҡарап, уның күләме төбәктә балалар өсөн йәшәү минимумының 50 проценты, 75 һәм 100 процентҡа етеүе ихтимал. Әле Башҡортостанға аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү өсөн федераль бюджеттан өҫтәмә рәүештә 632 миллион һум йүнәлтелә. Был хаҡтағы бойороҡҡа Хөкүмәт Рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы.

### ПЕНСИЯ ӨҪТӘЛӘ БАРА

**Властар 2022 һәм 2023-2024 йылдарҙа рәсәйҙәрҙең пенсияһын арттырыуҙы дауам итер, тип белдерҙе Рәсәй Президенты Владимир Путин иҡтисади мәсьәләләр буйынса кәңәшмәлә.** "Ошондай индексация өсөн бюджетҡа аҡса һалынған. Бынан тыш, хоҡуҡ һаҡлау органдары: Эске эштәр министрлығы, Федераль яза башҡарыу хеҙмәте, Федераль таможня хеҙмәте, Росгвардия хеҙмәткәрҙәрен һәм башҡаларҙы аҡса менән тәьмин итеүҙе арттырыу буйынса ҡарар ҡабул ителгән", - тип хәбәр итте РИА Новости, дәүләт башлығының һүҙҙәренә һылтанма менән. Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Антон Котяков киләһе йылда страховка пенсияһы - 5,9 процентҡа, социаль пенсия 7,7 процентҡа арттырыласағын хәбәр итте. Шулай итеп, эшләмәгән пенсионерҙарҙың уртаса пенсияһы 2022 йылда - 18 521 һум, 2023 йылда - 19 477, 2024 йылда иһә 20 469 һум була. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, 2021 йылдың 1 июленә Башҡортостанда пенсияның уртаса күләме 15 320 һумдан артҡан. Был былтырғы менән сағыштырғанда 826 һумға күберәк. Ошо уҡ ваҡытта республикала хаҡлы ялдағыларҙың һаны 1,192 миллиондан 1,159 миллионға тиклем кәмегән.

### ТАБИПТАРҒА ТҮЛӘРГӘ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Хөкүмәткә яңы йыл байрамдарында коронавирус инфекцияһы менән ауырығандарҙы дауалаған табиптарға икеләтә түләү өсөн аҡса табырға ҡушты.** "2021 йылда беҙ Яңы йыл байрамдарында ковид йөҡторғандар менән эшләгән медицина хеҙмәткәрҙәре һәм социаль хеҙмәткәрҙәр өсөн махсус өҫтәмәләр түләүҙе тәьмин иттек. Хөкүмәттән 2022 йылда ла Яңы йыл байрамдарында шулай эшләүҙәрен һорайым", - тине дәүләт башлығы Хөкүмәт ағзалары менән кәңәшмәлә. Финанс министры Антон Силуанов һүҙҙәренсә, ил бюджетының ошондай түләүҙәр өсөн мөмкинлеге бар. Был маҡсатҡа 8 миллиард һум аҡса талап ителә.

### МИҘАЛҒА ӨҪТӘМӘ

**Башҡортостанда "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән әсәләргә премия күләме 25 мең һумға тиклем арттырыла.** Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы Башҡортостан Башлығының республика наградалы тураһындағы указына төҙәтмәләр әҙерләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Әсәлек даны" миҙалы 1998 йылдан алып биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән күп балалы әсәләргә бирелә. Башҡортостанда йәмғеһе һигеҙ меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ ошо юғары исемгә лайыҡ булған. Награда менән бергә аҡсалата премия тапшырыла, элек ул һалым ҡайтармаһы менән 17 241 һум ине. 2022 йылдың 1 ғинуарынан иһә ҡатын-ҡыҙҙарға 25 мең һум түләнә башлай.

### МИНИМАЛЬ ЭШ ХАҠЫ...

**Владимир Путин 2022 йылда минималь эш хаҡы күләмен айына 13 890 һумға тиклем арттырыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы.** Был әлегеһенә ҡарағанда уртаса 1000 һумға күберәк. Документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Республика Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, Башҡортостанда, Урал коэффициентын иҫәпкә алып (әммә Межгорьенан тыш), иң түбән хеҙмәт хаҡы 15 973,5 һум була. Бынан алда Путин социаль мәсьәләләр буйынса кәңәшмәлә билдәләүенсә, федераль бюджет проектында минималь эш хаҡы күләмен 2,5 процентҡа арттырыу ҡаралған, әммә был ғына етмәй, уны 8,6 процентҡа күтәрергә кәрәк. Хеҙмәтҡә түләүҙең минималь күләмен арттырыу "күп кенә социаль пособиеларҙың, шул иҫәптән балалы ғаиләләргә түләүҙәрҙең һәм пенсияға өҫтәмәләрҙең үҫешенә йоғонто яһай".

### ТҮЛӘҮҘӘР...

**Хөкүмәт ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙҙарын һәм йөклөлөк буйынса түләүҙәрҙе яңыса алыу тәртибен раҫланы. 2022 йылдан ҡағыҙҙар электрон төрҙә генә бирелә, ә улар буйынса пособиелар автоматик рәүештә күсерелә.** Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин дәүләт учреждениеларының, эш биреүселәрҙең Социаль страховкалау фонды менән эш итеү ҡағиҙәләрен раҫланы. Пособиелар, элеккесә, социаль страховкалау фондынан күсерелә, ләкин хәҙер граждандарға быны өсөн бер ниндәй ҙә ғариза һәм документтар тапшырырға кәрәкмәй. Хеҙмәт хаҡы күләме, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса отпускыға сығыу тураһында мәғлүмәттәр Социаль страховкалау фондына - эш биреүсенән, ә баланың тыуыу хаҡында мәғлүмәт ЗАГС -тан ебәрелә. Ошо документтар нигеҙендә Социаль страховкалау фонды пособие күләмен иҫәпләп сығарып, хеҙмәткәргә түләй. Пособие тәғәйенләү һәм түләү тураһында мәғлүмәт социаль тәьминәттең Берҙәм дәүләт мәғлүмәт системаһына урынлаштырыла һәм граждандарҙың дәүләт хеҙмәттәре порталындағы шәхси кабинетына ебәрелә. Социаль страховкалау фонды Пенсия фонды, Федераль һалым хеҙмәте һәм башҡа дәүләт учреждениеларынан өҫтәмә мәғлүмәт һорарға мөмкин.

### ТӨНДӘ ЭШЛӘМӘ!

**Яңғыҙ ата-әсәләр командировканан һәм төндә эшләүҙән азат ителә. Уларҙы эш сәғәтенән тыш эштәргә һәм командировкаларға үҙҙәренең ризалығы менән генә йәлеп итергә мөмкин.** Рәсәй Хеҙмәт кодексының яңы положениеһы 30 ноябрҙә көсөнә инде. Быға саҡлы сикләүҙәр 5 йәшкә тиклемге балаһы булған яңғыҙ ата-әсәләргә ҡағыла ине. Бынан тыш, әгәр хеҙмәткәр күп балалы ата-әсә йәки 14 йәшкәсә балалар тәрбиәләгән тулы ғаиләлә ата-әсәнең береһе вахта ысулы менән эшләй икән, эш биреүсе төнгө сменала йәки эштән һуң ҡалып эшләүҙе талап итә алмай. Яңы ҡағиҙәләр буйынса, бындай хеҙмәткәрҙе эш сәғәтенән тыш йәки төнгө эшкә йәлеп итеү өсөн эш биреүсегә яҙма рәүештә уның ризалығын алырға (иң тәүҙә унан баш тартыу хоҡуғы менән таныштырырға) кәрәк. Был ҡағиҙәләр командировкаларға ҡарата ла ғәмәлдә. Шулай уҡ закон инвалидтар һәм ауырыу туғандарын ҡараған хеҙмәткәрҙәр өсөн өҫтәмә гарантиялар билдәләй. Хәҙер уларҙы яҙма ризалыҡ менән генә командировкаға ебәрергә мөмкин.

### ТОРЛАҠ ҺАТҠАНДА...

**Балалы ғаиләләр 2021 йылдан уҡ торлаҡ һатҡанда килемгә һалымдан азат ителә. Президент Владимир Путин ҡул ҡуйған тейешле документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған.** Закон ике һәм унан күберәк балалы ғаиләләрҙең фатир, йорт йәки уларҙың өлөштәрен һатҡанда алынған һәм ҙурыраҡ майҙанлы яңы торлаҡ һатып алыу өсөн файҙаланылған килемде килемгә һалымдан азат итә. Льгота 24 йәшкәсә балалары (улар көндөҙгө бүлектә уҡыһа) булған ата-әсәләргә (уллыҡҡа, ҡыҙ итеп алыусыларға), шулай уҡ ҡайһы бер шарттарҙы үтәгәндә бер балаға бирелергә мөмкин. Тағы бер шарт - яңы торлаҡ иҫкеһен һатҡан йылда, йәки киләһе йылдың 30 апреленән дә һуңға ҡалмайынса һатып алынырға тейеш. Бынан тыш, һатыла торған күсемһеҙ милектең кадастр хаҡы 50 миллион һумдан артмауы һәм һатып алына торған торлаҡтың хаҡынан күберәк булыуы мөһим. Шулай уҡ торлаҡты һатҡан ваҡытта күп балалы ғаилә ағзаларының береһенең дә милкендә һатып алынған майҙандың 50 процентынан артығыраҡ күләмдәге башҡа торлағы булырға тейеш түгел. Был норма 2021 йылдың 1 ғинуарынан башлап фатирҙар һатыуҙан алынған килемгә ҡарата ғәмәлдә.

### ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө ҡалаһынан** Наилә Ниғмәтова, **Сибай ҡалаһынан** Фәрзәнә Аймурзина, Айгиз Ғабдуллин, Рәсимә Ғайсина, Илсиә Ишәйева, Илһам Мөхәмәтшин, Зилиә Нурғәлиева, Нурзиә Сабитова, Фәрүәз Рафиҡов, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Азамат Төхвәтуллин һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Йән-тән сәләмәтлеге, рухи һәм матди байлыҡ, барлыҡ эштәрегеҙҙә уңыштар юлдаш булыуын, яҡындарығыҙ менән бәхетле, оҙон ғүмер итеүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## БАШ ҠАЛАМ



# КАНИКУЛДА ҠАЙҘА БАРЫРҒА?

**Башҡортостан туризмын үҫтереү үҙәге, Республиканың туризм буйынса дәүләт комитеты һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте баш ҡала сираттағы "TERRA ZIMA" Яңы йыл фестивален ойоштора.**

Ул **31 декабрҙә 22 сәғәттә** Ҡунаҡһарай эргәһендә дөртле концерт программаһы менән асыла. Ҡунаҡтар өсөн уйындар, флешмоб һәм бүләктәр әҙерләнгән. Төн уртаһы яҡынлашҡанда урамдағы ҙур экранда Өфө хакимиәте башлығы Сергей Грековтың, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың, Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың ҡотлауҙары күрһәтеләсәк.

Байрамда хедлайнер булараҡ "Мираж" төркөмө сығыш яһаясаҡ. Тамашасыларҙы шулай уҡ башҡорт эстраdaһы йондоҙҙары сығышы көтә. Ҡыш Бабай ҡатнашлығындағы дискотека төнгө өскә тиклем дауам итәсәк.

**1 ғинуарҙа** "Вәғәҙәләр йүгереүе" ("Забег обещаний") планлаштырыла. Йылдың тәүге көнөндә бөтә донъяла кешеләр үҙҙәренә бер йылға вәғәҙә бирә һәм маҡсаттарына өлгәшеү өсөн йүгерә. Баш ҡала был сара Ҡунаҡһарайҙан көндөҙгө сәғәт 12-лә башлана. Теләүселәр _ilovesupersport.com_ сайтында теркәлеү үтә.

Көндөң икенсе яртыһында "АРТ-Квадрат"та Яңы йыл карнавалы уҙғарыла. Унда төрлө уйындар һәм бейеүҙәр ойоштороласаҡ. Төрлө номинацияларҙа еңеүселәр ҡиммәтле бүләктәргә эйә буласаҡ, иң бәхетле кешегә iPhone 13 эләгәсәк. Конкурста карнавал кейемендә килеүселәр барыһы ла ҡатнаша ала. Теркәлеү _https://www.terra-zima.ru/events/vserossiyskiy-konkurs-karnavalnykh-kostyumov-2022_ адресы буйынса. Конкурс "АРТ-Квадрат"та киске сәғәт 4-тә башлана, бишенсе яртыла ҡатнашыусылар Ҡунаҡһарайға табан йүнәлә.

**2 ғинуарҙа** Ҡунаҡһарайҙа, Коммунистик урамы яғынан, Ҡышҡы һабантуй башлана. Сәғәт 1-ҙә Өфө халҡы милли ҡышҡы уйындарҙа ҡатнаша ала.

Сәғәт 3-тә Бөтә Рәсәй самауырҙар конкурсы үтә. Уның еңеүсеһе 50 мең һум аҡсаға эйә буласаҡ. Самауырсылар _https://www.terra-zima.ru/events/vserossiyskiy-konkurs-samovarov-2022_ адресы буйынса теркәлеү үтә.

Киске сәғәт 6-ла башҡорт эстрада йондоҙҙары ҡатнашлығында башҡорт дискотекаһы ойоштороласаҡ.

**3 ғинуарҙа** Бөтә Рәсәй Ҡарһылыуҙар һәм Республика Ҡыш бабайҙар конкурсы уҙғарыла. Сараның программаһы түбәндәгесә:

12:00 - теркәлеү һәм Рәсәй Ҡарһылыуҙарын тәбрикләү. Чернышевский урамы, 88, "АРТ-Квадрат", майҙан һәм "Икенсе сәхнә" эвент-холы;

13:00 - теркәлеү һәм Ҡыш бабайҙар парады, Киров урамы, 1, Профсоюздар йорто;

13:30 - парад Профсоюздар йортонан Чернышевский урамы аша үтә;

14:00 - Ҡунаҡһарай майҙанында Ҡарһылыуҙар конкурсы башлана;

16:00 - концерт программаһы;

18:00 - популяр диджейҙар сығышы һәм һауа шарҙары тамашаһы.

Ҡарһылыуҙар - _https://www.terra-zima.ru/events/parad-snegurochek-2022_,

Ҡыш Бабайҙар _https://www.terra-zima.ru/events/parad-dedov-morozov-2022_ адресы буйынса теркәлә.

**4 ғинуарҙа** Ағиҙел йылғаһы ярында сәғәт 2-лә Атлы-санала экипаждар парады башлана. Уның сиктәрендә иң сағыу, матур һәм үҙенсәлекле биҙәлгән экипажды асыҡлау буйынса конкурс үтәсәк. Гран-при - 100 мең һум.

Ҡунаҡтарға күңел асыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәр буласаҡ, шулай уҡ майҙанда уҡтан атыу биатлоны ла ойоштороласаҡ. Теркәлеү өсөн адрес - _https://www.terra-zima.ru/events/vserossiyskiy-parad-konno-sannykh-ekipazhey._

Бынан тыш, "TERRA ZIMA" фестивале хөрмәтенә **25 декабрҙән 4 ғинуарға** тиклем Ҡунаҡһарайҙа Ҡыш Бабайҙың ҡунаҡ тирмәһе эшләйәсәк. Барлыҡ саралар тураһында ентеклерәк мәғлүмәтте _terra-zima.ru_ сайтында табырға йәки +7 917 379 38 72 телефоны аша белешергә була.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# "ЮЛДАШ"ТАР ЙОЛА АТҠАРҘЫ

**Яңыһына аяҡ баҫыр алдынан бар өлкәләрҙә лә үтеп барған йылға йомғаҡ яһала. "Юлдаш" радиоһы ла тыңлаусылары алдында үҙенең эшмәкәрлеге буйынса һынау тотоп, "Юлдаш-хит" республика фестивален уҙғарҙы. Матур йолаға әүерелгән моңло-көлкөлө тамаша тураһында радионың алып барыусыһы, "Теге өсәү"ҙең береһе - Ғәзиз ӘБДЕЛМӘНОВ менән һөйләштек.**

**Сираттағы "Юлдаш-хит" республика фестиваленә йомғаҡ яһап, уның яңылыҡтары һәм һөҙөмтәләре тураһында һөйләп китегеҙ әле.**

- "Юлдаш-хит" фестивален ун икенсе тапҡыр ойошторабыҙ һәм, ғәҙәттәгесә, тамашаның төп өлөшө радиола йыл дауамында барған "Хит-тар парады"на ҡоролдо. Тыңлаусыларыбыҙ яңы сыҡҡандары араһынан ай һайын күңелдәренә яҡын иң шәп йырҙар өсөн тауыш биреп, һайлап барҙы. Иң күп тауыш йыйған йырсылар сәхнәгә күтәрелде һәм йылдың төп йырҙарын башҡарҙы. Бынан тыш, төрлө быуын кешеләрен берләштергән йырҙар менән әсир иткән талант эйәләре лә үҙ сығыштары менән һөйөндөрҙө. Был инде "Юлдаш-хит" концертының ҡаҡшамаҫ йолаһы.

Үҙенсәлектәргә килгәндә, быйыл тәүге тапҡыр тамашаның дүрт алып барыусыһы булды һәм быға тиклем бер ҡайҙа ла яңғырамаған йырҙарҙы тамашасы хөкөмөнә сығарҙыҡ. Мәҫәлән, йәш башҡарыусы Илнур Рамазанов Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәлиә Солтанова репертуарынан "Кил, иркәм" йырын башҡарҙы һәм юбилярҙы күркәм ғүмер байрамы менән тәбрикләнек. Беҙҙең тапшырыуҙарҙы моңло тауыштары менән биҙәгән күренекле артистарҙы йыл да шулай ҡотлап, халыҡ исеменән рәхмәтебеҙҙе еткереп торабыҙ. Йылына бер тапҡыр ғына ойошторолған һәм шуға ла оҙайлы, күләмле концертыбыҙҙы сабырлыҡ менән тамаша ҡылған тыңлаусыларыбыҙға ла, "Юлдаш-хит"та сығыш яһауҙы оло мәртәбә итеп ҡабул иткән артистарыбыҙға ла барлыҡ коллегаларым исеменән рәхмәтебеҙҙе еткерәм.

Яңы йыл етеп килә бит инде, мөғжизәләргә ышаныр мәл. "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы фойеһында барыһы ла хыял-теләктәрен яҙып, хат ҡалдыра алды. Йомғаҡ 29 декабрҙә радиола тура эфирҙа яһала, ошо хаттар араһынан осраҡлы рәүештә һайлап алып, ҡайһы бер тыңлаусыларҙың хыялдарын "Юлдаш" көсө менән тормошҡа ашырасаҡбыҙ.

Билдәле булыуынса, "Юлдаш-хит"та музыка өлкәһендә генә түгел, ә йәмғиәттең төрлө юҫыҡтарын иғтибарға алып, йомғаҡтар яһарға тырышабыҙ. Был йәһәттән номинацияларҙа шәхестәр билдәләнә. Мәҫәлән, быйыл "Йыл композиторы" тип Муса Смаков, "Йыл шағиры" тип юбиляр Радик Хәкимйәнов, "Иң яҡшы аранжировкалаусы" тип Марсель Ҡаһиров танылды, ә "Легенда" номинацияһында Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәлиә Солтанова билдәләнде. Быйыл беренсе тапҡыр "Иң шәп ҡурайсы" - Юлай Ҡасимов, "Иң яҡшы музыкаль чат" - "Музыка һүнмә" төркөмө һәм "Йыл кешеһе" номинацияһына Өфөнөң Ҡала клиник дауаханаһының баш табибы Фәнил Шәмиғолов лайыҡ булды.

**Шулай уҡ "Радионың халыҡ артисы" миҙалына лайыҡ булыусы "беренселәр" ҙә тәбрикләнгән. Был награда кемдәргә тапшырыла?**

- Эйе, быйыл тәүге тапҡыр "Радионың халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡлы шәхестәргә миҙалдар тапшырҙыҡ. Уларҙы тамашаға килгән тыңлаусылар һайланы. Бының өсөн махсус һайлау бите булдырылды, сәхнәлә экранға сығарылған QR-код аша үтеп тауыш бирҙеләр. Был замана ысулы менән барыһы ла эш итә белә һәм һис ҡыйынлыҡһыҙ ҡушылып киттеләр. "Радионың халыҡ артисы" миҙалын булдырыу тураһында фекер йырсыларыбыҙға халыҡ һөйөүен, ихтирамын еткереү маҡсатында тыуҙы. Сер түгел, моңдары менән әсир иткән бик күп башҡарыусыларыбыҙ бар һәм уларҙы халыҡ таный, шуны белдерергә теләй. Быйыл махсус наградаға Искәндәр Ғәзизов, Рөстәм Шаһыбалов һәм Рәдиф Зарипов лайыҡ булды. Киләсәктә "Радионың халыҡ артисы" миҙалы бөтә артистар ҙа ынтылырҙай, маҡсат итерҙәй йыл һайын тапшырыла торған мәртәбәле наградаға әүерелер, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

**Яңы йылда - яңы үҙгәрештәр, тиҙәр. "Юлдаш"тарҙы ниҙәр көтә?**

- Яңы ҡабул ителгән программаға ярашлы, "Юлдаш" радиоһының ижади миҙгеле хәҙер нәҡ ғинуар айынан алмашына башлай. Шуға күрә, 1 ғинуарҙан радио тыңлаусыларҙы тапшырыуҙар теҙмәһе, алып барыусылар сафындағы үҙгәрештәр менән ҡаршылайбыҙ. Яңылыҡтар "Теге өсәү" тапшырыуына ла ҡағыла, нindәйерәк үҙгәрештәр булыр - көтөгөҙ һәм тыңлағыҙ. Ә инде Яңы йыл менән тәбрикләп, барыһына ла ныҡлы һаулыҡ теләйем. Юлбарыҫ йылында арыҫландай ҡыйыу булығыҙ, эштәрегеҙ уң булһын һәм беҙҙең менән бәйләнештәрегеҙ өҙөлмәһен.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## МАТУРЛЫҠ МОРАТ ТҮГЕЛ,

## фәҡирлек оят түгел

Боландың мөгөҙө, сәсәндең һүҙе, филдең теше, оҫтаның эше ҡиммәт.

**(Башҡорт халыҡ мәкәле).**

Кешеләр булмаған ерҙә лә, кеше булып ҡалырға тырыш.

**(Гиллель Старший).**

Эшләгәндә мин ял итәм. Эшһеҙ йөрөгәндә йәки ҡунаҡтар ҡабул иткәндә мин ныҡ арыйым.

**(Пабло Пикассо).**

Тәүҙә һеҙ эсемлек талап итәһегеҙ, һуңынан эсемлек эсемлекте талап итә, шунан эсемлек һеҙҙе талап итә...

**(Синклер Льюис).**

Эргәндәге кешенең бәхетһеҙлеге үҙеңдең бәхетһеҙлектәреңдән йыуата.

**(Лукиан).**

Йөҙ йылдан һуң беҙ йәшәмәҫбеҙ инде, тип илау, ниңә йөҙ йыл элек йәшәмәгәнбеҙ икән, тип илауға тиң.

**(Мишель Монтень).**

Һауа торошон әрләмәгеҙ, ул үҙгәреп тормаһа, ун кешенең туғыҙы һөйләшеүҙе ниҙән башларға белмәй аптырар ине.

**(Фрэнк Хаббард).**

Һәр бала - рәссам. Эш балалыҡтан сыҡһа ла, уның рәссам булып ҡалыуында.

**(Пабло Пикассо).**

Бәхетһеҙҙәр һәм насар йоҡлаусылар, ғәҙәттә, был сифаттары менән ғорурланырға ярата.

**(Бертран Рассел).**

Йөҙ мең ҡоралға ҡарағанда, мин өс бөртөк гәзиттән нығыраҡ ҡурҡам.

**(Наполеон I).**

Әгәр ҙә кешеләр ғашиҡ булыу арҡаһында ғына ғаилә ҡорһа, күбеһе ғүмер буйы тормош иптәшһеҙ йәшәп донъя ҡуйыр ине.

**(Роберт Стивенсон).**

**Тағы бер аҡыл: "Кемдер берәү әрләшә башлағас, әрләнеүсе ситкә китә. Әрләшеүсе уның артынан бара һәм: "Ниңә китәһең?" - тип һорай. Әрләнеүсе яуап бирә: "Һинең хоҡуғың - әрләшеү, ә минеке - тыңламау". Берәүгә һорау бирәләр. Ул яуап бирә алмай һәм әрләшә башлай. Уға шулай тип әйтәләр: "Әлбиттә, һиңә һорауға яуап биреүгә ҡарағанда, үҙ наҙанлығыңды йәшереү өсөн әрләшеү еңелерәк". Яман һүҙләләр - ҡырағай хайуандың иң хәтәре, ялағай һүҙләләр - йорт хайуандарының иң ҡурҡынысы".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21052

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
24 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1570